*ИҒТИБАР! Сентябргә тиклем 2010 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу бара. Йәғни ошо осорҙа гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡимммәтләнер, моғайын. Бергә ҡалайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға — Һатыуҙа хаҡы ирекле

8 - 14 АВГУСТ (УРАҠАЙ) 2009 ЙЫЛ

№32 (346)

www.kiskeufa.ru

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәй буйы баҡсаламын - коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә тейешменме?** 5



**Урал батырыбыҙ телен...** "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр нисегерәк яңғырата? 6



**Фән вә дин - белем асҡыстары,** Йәки донъяуи һәм дини мәҙәниәт берлеге тураһында 8-9



**Ни өсөн үлән йәшел?** Йәки баланың һорауҙарына яуаптар 12



**ТВ программа** 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Быйылғы Берҙәм дәүләт имтихандары уҡыусыларҙың белем кимәленең түбән булыуын күрһәтте. Быларҙың сәбәптәрен нимә күрәһегеҙ?

*Заһир САЛИХОВ, тарих уҡытыусыһы:*

-Беҙ уҡыусыларҙы үҙаллы фекерләргә өйрәтеү урынына күберәк мәғлүмәт бирергә тырышабыҙ. Атайым ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгән кеше булараҡ, беҙҙең мәктәп уҡыусылары өсөн сығарылған хәҙерге дәреслектәрҙе юғары уҡыу йорттары уҡыу әсбабына тиңләй. Бер мәл минең ҡулға Англия мәктәптәренең 6-сы синыфы өсөн сығарылған "Урта быуаттар тарихы" китабы килеп эләкте. Ул, асылда, сағыу һүрәттәрҙән, иллюстрацияларҙан ғына тора, китаптың артында ғына аңлатмалы һүҙлек килтерелгән. Беҙҙең Башҡортостан тарихы ла балалар өсөн яҙылмаған. Авторҙары күп, телдәре ҡатмарлы ғилми стилдә, аңлашылып бөтмәгән терминдар күп ҡулланыла.

Ҡыҫҡаһы, беҙҙең мәктәптә балалар уҡыусы булып уйнай ғына. Машина йөрөтөргә өйрәнеү өсөн мотлаҡ рәүештә руль артына ултырыр кәрәк. Ә беҙҙә иһә шулай килеп сыға: беҙ машинаны хыялда ғына йөрөтәбеҙ. Уҡытыу программаһы күп йәһәттән тормоштан айырылған.

*Әхмәт ӘХӘТОВ, психолог:*

Бөтә Рәсәй мәғарифын бик ҙур һәм үтә ҡатмарлы система рәүешендә ҡарарға кәрәк. Әгәр ошо система үҙенең эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә түбән сифатлы продукция бирә икән, ул дөрөҫ көйләнмәгән булып сыға. Дөрөҫөн әйткәндә, бында ошо система менән идара итеүселәрҙең мөкиббән китеп формаль күрһәткестәргә биреләүе лә белем биреү процесын ысынында яңырта алыу мөмкинлеген юҡҡа сығара. Ә идара итеүселәр системаның төп элементтары - уҡытыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың эшмәкәрлегенә уңайлы шарттар булдырыу урынына, уларҙы төрлө яһалма реформалар менән ҡаңғырта. Мәғарифта психологик факторҙарҙы иҫәпкә алыу хаҡында ҡайғыртыусылар һирәк. Мәктәпкә күрһәткестәрҙән хасил булған уҡыусы яңынан ҡайтты шикелле. Уҡытыусының да, уҡыусының да эшмәкәрлек мотивацияһын тормошсан итә алһаҡ, белем сифаты беҙҙә оҙаҡ көттөрмәҫ,тип уйлайым.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР !

**"Беҙ төп маҡсатҡа өлгәштек: Рәсәйҙә мәғариф өлкәһенең ниндәй булыуы хаҡында тулы картина асыҡланды. Һәм ул картина бигүк ҡыуаныслы түгел: бөгөн белем биреү кимәле үтә түбән".**

**Андрей ФУРСЕНКО, Рәсәйҙең мәғариф һәм фән министры.**

## ИШАРА

# ЯҢЫ МӘКТӘП - ИҪКЕ ФЕКЕРҘӘР,

## йәки Август кәңәшмәләре ни тураһында уйландыра?





**Рәсәйҙә август айы төрлө сәйәси ваҡиғалар, көтөлмәгән һәләкәттәр һәм башҡа иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеп тороусы ғәҙәттән тыш хәлдәр менән билдәле булһа ла, көн ҡыҙыуы һүрелә барған был мәл ил мәғарифының бөгөнгөһө һәм киләсәге менән бәйле проблемалар буйынса фекер алышыуҙар, бәхәс-дискуссияларҙың яңынан ҡабынып, киң матбуғат сараларында сағылыш табыу мөҙҙәте еткәнен дә белдерә. Уҡыусылар тауышынан тынып ҡалған мәктәптәрҙә лә яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәренең иң әүҙемләшкән ваҡыты был.**

Тик беҙҙең илгә генә хас булған традицияға ярашлы, мәғариф хеҙмәткәрҙәренең кәңәшмәләре тап август айында уҙғарыла. Изге эшкә тотонор алдынан боронғолар ҙа, бергә йыйылып, кәңәш ҡорор булған бит. Халыҡ мәғарифын заманса ойоштороу, уны камиллаштырыу илдең киләсәген билдәләй торған өлкә икәнен һәр кем яҡшы аңлай. Быйылғы республика кәңәшмәһе "Мәғариф системаһының яңы моделен булдырыу - республиканың инновацион үҫешенең мөһим шарты", тигән девиз аҫтында уҙасаҡ. Ошо яңыса һәм фәнни яңғыраған фекер менән килешмәйенсә булмай, әммә ул мәғариф өлкәһенә битараф булмаған кешене уйландырмай ҡалмаҫ, моғайын.

**(Дауамы 2-се биттә).**

***✓ Бына нисек икән ул "белем сифаты менән идара итеү": бөтә аҡыл-зиһенеңде уҡытыуға сарыф итеү урынына һин таблицаларҙы балдар менән тултырыусы хисапсыға әйләнергә тейеш икәнһең.***



ИШАРА

# ЯҢЫ МӘКТӘП - ИҪКЕ ФЕКЕРҘӘР,

## йәки Август кәңәшмәләре ни тураһында уйландыра?

**(Башы 1-се биттә).**

Мәғариф системаһының ниндәй генә яңы моделе тураһында һүҙ бармаһын, уның нигеҙен ҡәҙимге мәктәп тәшкил итә. Иҫке мәктәп, яңы мәктәп... Әлбиттә, бында һүҙ яңы мәктәптәр һалыу йәиһә иҫкеләрен яңыртыу тураһында ғына бармай (был яҡтан Башҡортостанға тиңләшә алырлыҡ төбәктәр һирәктер). Иҫкеһе - оло һәм урта быуынға белем биргән совет мәктәбе булһа, яңыһы - үҙгәртелеп ҡоролған Рәсәйҙең заман талаптарына яуап бирерлек белем усағы булырға тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо яңы мәктәптең нисек ҡоролорға тейешлеге хаҡында инде ике тиҫтә йылға яҡын бәхәстәр тынмай барһа, мәктәп даирәһен береһе артына икенсеһе тағылып килгән реформалар йөҙәтеп бөттө. Мәҫәлән, тулы урта мәктәпте 12 йыллыҡ итеү буйынса күпме ҡапма-ҡаршылыҡлы тәҡдимдәр яһалды, пландар ҡоролдо, экспериметтар башланды, ә хәҙер ул турала онотоп та бөттөк инде. Был реформаның туҡтатылыуы ла бик урынлы: ул саҡта 10 йыл эсендә урта мәктәпте тамамлаған миллионлаған уҡыусылар үҙ ғүмеренең ике йылын экономиялай алды түгелме ни? Ә талантлы баланы нисек итеп 12 йыл буйына мәктәп сиктәрендә ыҙалатыр инек!

Бына профилле уҡытыуға күсеү менән бәйле үҙгәрештәрҙе нисәмә йыл инде ғәмәлгә ашыра алмай Рәсәй мәктәбе. Ә бөтә мәктәптәр ҙә бер юлы профилле була аламы һуң? Аламы-юҡмы, әммә мәктәптәрҙең бөтәһе лә бер иш булырға тейеш, тигән принцип барыбер шуны талап итә. Төптәнерәк уйлаһаң, профилле уҡытыу өлгөләрен совет мәктәбе бик күп йылдар элек үк тапҡайны бит, тик ул мәктәптәр махсуслаштырылған уҡыу йорттары рәүешендә йәшәп килде. Рәсәйҙең сәнғәт мәктәптәре, Мәскәү дәүләт университеты эргәһендәге данлыҡлы физика-математика мәктәбе һәм башҡа ошондай урта белем биреү учреждениелары илдең буласаҡ элитаһын әҙерләүгә аҙ өлөш индермәгәндер ул. Урта һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыуға дәғүә итә алмаған уҡыусыларҙы мотлаҡ рәүештә тигәндәй профтехучилищеларға йүнәлтеүҙе эшсе һөнәрҙәре профилен ғәмәлгә ашырыу итеп ҡарап булмаймы ни? Ә хәҙер замана ла, заң да башҡа. 11 йыл буйына үҙ "профилен" таба алмаған, йәиһә БДИ иләгенән үтмәгәндәргә нисек булдыра ала, шулай күрергә тура киләсәк үҙ көнөн. Ай-һай, быйыл БДИ тапшыра алмайынса, аттестатһыҙ ҡалған 30 меңләп йәш егет һәм ҡыҙҙар ҡайҙа барыр икән? Ошо "уңышһыҙ" мөһөрө баҫылғандарҙы бер кем дә ҡоласын йәйеп ҡаршы алмаясаҡ бит бөгөн.

Йәнә бер мөһим проблема: илдең интеллектуаль элита ҡатламын махсус мәктәптәрҙә әҙерләү бөтә йәмғиәт өсөн файҙалы, һәм бында "барыһына ла бер тигеҙ белем биреү" принцибына йәбешеп ятыу һис кәрәкмәҫ ине. Шул уҡ ваҡытта үҙгәртеп ҡороу йылдарында тергеҙелгән лицей һәм гимназияларҙы башҡа мәктәптәр менән "тигеҙләү" өсөн барыһы ла эшләнде. Мин, лицейҙа эшләү тәжрибәһе булған педагог-психолог булараҡ, тап ошондай уҡыу йорттары 90-сы йылдарҙа уҡ профилле уҡытыуҙы юлға һалғайны, тип иҫәпләйем. Балаларым уҡыған М. Иҫҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейын тамамлаусылар һуңынан, махсус урта һәм, башлыса, юғары белем алып, ниндәй генә һөнәр эйәләре булып китмәне - һанап бөтөрөрлөк тә түгел. Ә хәҙер, гимназия йә лицей исемен йөрөтөп тә, юридик яҡтан ҡәҙимге урта мәктәптән бер ни менән дә айырылмаған уҡыу йортонда профилле уҡытыуҙы һүҙҙә түгел, ысынында башҡарыу өсөн педагогик коллективтан икеләтә күберәк көс һалыу талап ителә.

Тағы бына нимә тураһында әйтеп үтеү кәрәк тип уйлайым. Илебеҙҙә мәғариф өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәр алып барған ғалим-педагогтар бихисап. Бер яҡтан, шулай булырға тейештер ҙә: кеше шәхесен "төҙөү"ҙән дә ҡатмарлыраҡ һәм оҙайлыраҡ процестарҙы табып та булмаҫ. Тик шуныһы: уларҙың ҡайһылары мәғариф ғәмәлиәте өсөн һуҡыр бер тинлек файҙаһы булмаған, хатта туҙға яҙмаған "тикшеренеүҙәр" алып бара. Улай ғына ла түгел, уларҙың фәнни "ҡаҙаныштарын" нисек булһа ла мәктәп мөхитенә индерергә тырышалар. Мәҫәлән, Мәскәүҙең иркен кабинеттарында ошондай ғалимдар "Белем сифаты менән идара итеү" тәғлимәтен уйлап сығарҙы, һәм бөгөн был идеяны ғәмәлгә ашырыу менән балалар баҡсаһынан алып вузға тиклем тиҫтәләгән мең белгес шөғөлләнә. Ваҡытында миңә бер ғалимдың ошо проблема буйынса ярайһы уҡ ҡалын китап сифатында нәшер ителгән хеҙмәте менән танышырға тура килде. Китап мәктәп уҡытыусыларына тәғәйенләнгәйне. Ошо ғалимыбыҙ "белем сифаты менән идара итеү" өсөн тиҫтәнән ашыу критерий ҡуйып, һәр береһен асыҡлау өсөн тағы ла тиҫтәләп күрһәткестәр билдәләгән, былар барыһы ла таблицаға индерелгән. Ошо ғалимдың күрһәтмәләренә ярашлы, уҡытыусы даими рәүештә һәр уҡыусының белем сифатын билдәләү өсөн йөҙәрләгән күрһәткестәр буйынса иҫәпләүҙәр алып барып, шуны йыл әйләнәһенә таблицаға индерә барырға тейеш. Бына нисек икән ул "белем сифаты менән идара итеү": бөтә аҡыл-зиһенеңде уҡытыуға сарыф итеү урынына һин таблицаларҙы балдар менән тултырыусы хисапсыға әйләнергә тейеш икәнһең.

Ғөмүмән, ошо идеяның нигеҙенә абсурд төшөнсә һалынған түгелме һуң? Мин шәхсән йәшәйешебеҙҙең бер генә өлкәһендә лә "сифат менән идара итеүселәр"ҙе күргәнем юҡ: ниндәйҙер ғәмәл һөҙөмтәһенең сифаты йә бар, йә юҡ, булған хәлдә, насар йәки яҡшы булыуы мөмкин. Мәғарифта ла шулай: педагог уҡытыу процесы менән идара итә, йәғни уҡыусыларҙың аң-белемен, зиһенен үҫтереү маҡсатында тейешле саралар ҡулланып, уңайлы шарттар булдыра. Белем сифаты һәр ваҡытта ла һөҙөмтә генә булғас, уның менән ни рәүешле идара итмәк кәрәк? Был йөҙәр меңләгән уҡытыусының башын бутау түгелме ни? Белем сифатын уҡытыусы ҡуйған билдәләр йәиһә БДИ балдары менән формаль рәүештә үлсәп була, әммә был балаларҙың тәбиғи һәләтттәре асылып-үҫтерелеп, үҙаллы фекерләү ҡеүәһенә өлгәшеүен тулыһынса күрһәтә алмай.

Миңә ҡалһа, мәктәптең уҡытыу-тәрбиә эшмәкәрлегенә, уны тамамлаусыларҙың белеменә аҙаҡҡы баһаны тормош үҙе ҡуясаҡ: улар ниндәй һөнәрҙәргә эйә була алған, нисек ғаилә ҡорған, ниндәй уңыштарға өлгәшкән - былар барыһы ла шәхес сифаттары бит. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең мәғариф системаһында бындай үлсәм ҡулланылмай, уның урынына нисек тә булһа формаль күрһәткестәрҙе күтәререргә ынтылыу сәскә ата. Хатта был күп йылдар эксперимент рәүешендә барып, быйыл тәүләп бөтә ил буйынса закон нигеҙендә мотлаҡ рәүештә уҙғарылған Берҙәм дәүләт имтихандарында ла сағылыш тапмай ҡалманы.

Ил Президенты Дмитрий Медведев менән БДИ һөҙөмтәләренә арналған әңгәмә барышында мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко 2200 уҡыусының мөмкин булған иң юғары - 100 балл алыуын иҫкә алып китһә, Рособрнадзор етәксеһе Елена Глебова 100 балл алыусыларҙың 25 процентының эштәренә тикшереү комиссиялары тарафынан артыҡ юғары, йәғни объектив баһа бирелмәүе хаҡында белдереү яһаны. Бына һиңә - мә! Был, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә киң таралған процентоманияның, йәғни эш күрһәткестәрен яһалма рәүештә күтәрергә ынтылыуҙың ябай, әммә шаҡ ҡатырғыс бер өлгөһө ул. Тик бында мәктәпте ғәйепләп тә булмайҙыр: иң элгәре был уның эше менән идара итеүсе системаның хатаһы, дөрөҫөрәге - әлеге лә баяғы "сифат менән идара итеү"ҙең уңышлы барыуын уҡыусылар, ата-әсәләр, дәүләт етәкселәре алдында нисек тә булһа иҫбатларға тырышыу һөҙөмтәһелер.

Шулай итеп, "яңы мәктәп" тураһындағы уйҙар мәғариф өлкәһендә иҫке, әммә һыналған тормош ҡанундарын теүәл үтәй алыуға барып ялғана. "Иҫке" мәктәбебеҙҙе бюрократик идара итеү сылбырҙарынан, уға иркен тын алырға ирек бирмәгән баҫымдан, төптән уйланылмаған реформаларҙан азат итә алмаһаҡ, ул бер ҡасан да ижади һәм ысынлап та сифатлы эшләй алыусы яңы мәктәпкә әүерелмәйәсәк.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Ырымбурҙа "2009 йылда уңыш йыйыу барышы тураһында"ғы мәсьәлә буйынса РФ Хөкүмәте рәйесе Владимир Путин үткәргән кәңәшмәлә ҡатнашты. Ил Хөкүмәте рәйесе әйтеүенсә, ҡоролоҡтан зыян күргән төбәктәргә 100 миллиард һум самаһы бюджет кредиты биреү мөмкинлеге ҡарала. Мортаза Ғөбәйҙулла улы кәңәшмәләге сығышында, Башҡортостандың бигерәк тә Ырымбур менән сиктәш райондарында ла ҡоролоҡ күҙәтелеүен, бындағы уңыштың гектарынан 5 центнерҙан артмауын, шуға ла 54 райондың 48-ендә ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителеүен билдәләп үтте.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ауылдағы йәш белгестәргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү тәртибе тураһындағы 305-се ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Ошо сара менән Хөкүмәт БР Президентының 2009 йылдың 25 майындағы "Башҡортостан Республикаһы агросәнәғәт комплексының кадрҙар потенциалына дәүләт ярҙамы саралары тураһында"ғы Указын үтәү йөҙөнән ошо маҡсаттар өсөн бүленгән бюджет аҡсаһының маҡсатҡа ярашлы файҙаланылыуын тәьмин итәсәк. Уның буйынса, юғары белемле йәш белгестәргә айлыҡ түләүҙәр - 7 мең, урта һөнәри белем алыусыларға - 4 мең һум билдәләнә. Түләүҙәр өс йыл дауамында тормошҡа ашырыла. Шулай уҡ юғары белемлеләргә - 100 мең һум, урта һөнәри белемлеләргә 60 мең һум күләмендә бер тапҡыр пособие бирелә. Пособиелар йыл һайын 100 һәм 150 йәш белгескә тапшырыла.

✓БР Ауыл хужалығы министрлығы граждандарға агросәнәғәт комплексы кадрҙарына ярҙам итеү мәсьәләләре буйынса консультация үткәрә. Граждандарҙың һорауҙарына 273-26-85 телефоны буйынса министрлыҡ хеҙмәткәрҙәре Гөлнара Ғилемханова һәм Илгиз Аҫылбаев яуап бирә

✓28 августан 11 сентябргә тиклем республикала традицион регион-ара интернет-педсовет үтәсәк. Хәҙерге форумдың темаһы - буласаҡ Уҡытыусы йылы һәм йәмғәтселектең иғтибарын уҡытыусы роленә йүнәлтеү буласаҡ. Интернет-педсоветта ҡатнашыу өсөн Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты сайтында http://biro.ufanet.ru теркәлергә кәрәк. Докладты pedsovet03@mail.ru адресы буйынса ебәрергә кәрәк.

***✓ ВАЗ предприятиеһының да эше шәптән түгел. Бөгөн уларҙың бурысы 100 миллиард һумға яҡынлаша. Хөкүмәт биргән 25 миллиард һум упҡынға ташлаған кеүек юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы.***

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Урам буйында һоранып ултырыусыларҙы күргәнегеҙ бармы, йәмәғәт. Барҙыр, моғайын. Ундайҙар күп хәҙер. Айырыуса, оло ҡалаларҙа. Кеше йөрөгән урындарҙа. Баҙарҙар эргәһендә. Эре супермаркеттар алдында.**

# ҺОРАНЫУСЫЛАР КҮБӘЙӘ,

## йәки Беҙгә ниндәй автопром кәрәк?




Йәш кенә ҡатын-ҡыҙҙар имсәк балаларын ҡосаҡлап үтеп-һүтеп йөрөгән кешеләргә битараф ҡына ҡарап ултыралар. Эрерәк балалары эргәләрендә йүгергеләп йөрөй. Кешеләрҙе еңдәренән тартҡылай, күҙгә ҡарап йәлләтергә тырышалар. Маҡсаттары - бер нисә тин булһа ла һорап алыу. Улар люли тигән халыҡ вәкилдәре, имеш. Тәү Ватандары - ҡайҙалыр Урта Азия киңлектәрендә. Улар хаҡында хатта Сыңғыҙхан да хәбәрҙар булған икән. Әрһеҙ булыуҙары, уның ғәскәрен сәүкә көтөүе кеүек оҙатып барып, туҡтауһыҙ һораныуҙарын оҡшатмай, ҡырып бөтөрөргә фарман биргән, йәнәһе. Сыңғыҙхан ҡайҙа ла, уның ғәскәре ҡайҙа - ә люли халҡы тере. Бөтә донъя буйлап уҡ таралмаһа ла, Рәсәй ҡалаларының урамдарын тултырып йөрөй. Һорана. Балалар таба. Уларҙы ла һоранырға өйрәтә. Буйтым йәшәй. Миллионлаған кеше йәшәгән ҡалала аҡмаһа ла тамып ҡына тора бит. Көн һайын туҡланырлыҡ аҡса йыйып торалаҙыр, моғайын. Юғиһә, ултырмаҫтар ине әле.

Иҡтисади көрсөк башланғас, урамда һоранып ултырыусыларҙың һаны күбәйерме, тип көтөлгәйне. Урамдарға завод-фабрикаларҙан ҡыҫҡартылғандар сығып ултырырмы, тип уйланылғайны. Әлегә тыныс бит. Шул әлеге лә баяғы люли халҡы вәкилдәре генә күренгеләй. Ҡулдарында сабыйҙары. Устарында бер нисә тин баҡыр. Ҡараштарында битарафлыҡ. Сыңғыҙханға бирешмәгәнде, иҡтисади көрсөккә генә бирешмәбеҙ әле, тигән кеүек улар.

Люли халҡы кеүек тыныс булырға кәрәк ине лә бит. Был донъяға битараф ҡына ҡарап ултырырға ине. Булмай икән. 2009 йылдың ҡоро йәйе (ә ул, ысынлап та, ҡопҡоро, ҡайһы бер төбәктәрҙә ямғыр икешәр ай яуғаны юҡ) Рәсәй иҡтисады өсөн дә ҡоро булып сыҡты. Августа аяҡ баҫылды, ә көрсөктөң төбө күренмәй. Асылда, был айҙа иҡтисади торғонлоҡтоң йыллығын билдәләргә тейешбеҙ. Үткән йылдың август-сентябрендә бөтә донъя иҡтисади көрсөгөнөң һалҡын еле беҙгә лә килеп етте бит. Тик бик күңелһеҙ байрам килеп сыҡмаҫы. Һәр хәлдә, салют аттырып булмай. Ябай халыҡтың хәле "туҡ" йылдарҙа ла бигүк шәптән түгел ине. Әле бигерәк хөртәйҙе. Эш хаҡы уртаса 30-35 процентҡа кәмене, ә хаҡтар иһә артҡандан-арта ғына. Эйе, урамға сығып, ҡул һуҙып ултырыусылар юҡ әлегә. Әммә хөкүмәткә күҙ төбәп, ярҙам өмөт итеүселәр байтаҡ. Аҡсалата ярҙам хаҡында һүҙ бара, әлбиттә. Шуныһы ҡыҙыҡ - ярҙамды ябай кешеләр һорамай. Улар нисек тә булһа йәшәргә күнеп киткәндәр. Булмағанды бар итеп, булғанды иш итеп йәшәй бөгөн бөтә ил. Юғары белемле, юғары квалификациялы тәжрибәле уҡытыусының йыйыштырыусы булып эшләүе, бер яҡтан, аяныслы булһа, икенсе яҡтан, уның оптимизмы, тормошҡа булған һөйөүе хайран ҡалдыра.

Эре компаниялар, фирмалар, банкылар ярҙамға мохтаж. Эрерәк булған һайын, аҡсаны ла күберәк һорайҙар. Мулыраҡ ярҙамға өмөт итәләр.

Премьер-министр Владимир Путин ил буйлап йөрөп, бәләкәй моноҡалаларҙа барлыҡҡа килгән ауыр хәлдәрҙе көйләргә тырыша. Пикалево ҡалаһынан һуң уға Байкальск ҡалаһына барырға тура килде. Премьер маршрутының киләһе пункты Тольятти булмаҫ микән?

Был ҡаланы беҙҙең илдә белмәгән кеше юҡтыр ул. Ваҡытында унда етештерелгән автомобилдәрҙе илебеҙҙең иң төпкөл мөйөшөндә лә осратырға мөмкин ине. Бөгөн - улай түгел. Бөгөн халыҡ иномаркаларҙы, йәғни сит илдәрҙә етештерелгән, һис юғында Рәсәй территорияһында урынлашҡан сит ил автозаводтарының йыйыу производстволарында ҡоролған машиналарҙы яҡыныраҡ күрә. "ВАЗ" автомобилдәрен һатыу йылдан-йыл кәмей.

Үткән аҙна башында АвтоВАЗ президенты Борис Алешин Волжск автомобиль заводының төп конвейерын туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Был нимәне аңлата, тип һорарһығыҙ, моғайын. Төп конвейерҙа илдең төрлө төбәктәренән килгән запчастар, комплектлауысыларҙан автомобиль йыйыла. Конвейерҙы туҡтатыу - производствоны туҡтатыу, тигән һүҙ. Был, әлбиттә, ВАЗ автомобилдәренең һатыуҙан юҡҡа сығыуын аңлатмай. Бөгөн предприятие һәм уның дилерҙарының келәттәрендә һатылмаған 80 меңдән ашыу автомобиль ултыра икән.

Дөйөм алғанда, быйыл Рәсәйҙә еңел автомобилдәрҙе етештереү ике ярым тапҡырға, а һатыу ике тапҡырға кәмегән. Рәсәй автопромы тәрән, сыға алмаҫлыҡ упҡынға сумғанмы ни?

Илебеҙҙең етәкселеге, асыҡлап әйткәндә, Премьер-министр Владимир Путин фекеренсә, Рәсәй автопромын юғалтыу - илдең иҡтисадын юҡҡа сығарыу менән бер. Әлбиттә, беҙҙең, дөрөҫөрәге, Рәсәй олигархтарының ҡулында әле нефть һәм газ бар. Уларҙы сит илдәргә оҙатыу илебеҙгә күпмелер ваҡыт иркен йәшәргә мөмкинлек бирәсәк. Аңлашылып тора: ер аҫты байлыҡтары мәңгелек түгел. Улар ҡасан булһа ла бөтәсәк. Әммә уға тиклем Рәсәй тарҡалып юҡҡа сыҡмаҫмы?

Хәйер, ул хәтлем төпкә суммайыҡ әле. Люли халҡы кеүек үк һоранып ултырғандарға, йәғни илебеҙҙең автосәнәғәт предприятиеларына әйләнеп ҡайтайыҡ.

АвтоВАЗ предприятиеһы быйыл ғына Рәсәй хөкүмәтенән 25 миллиард һум күләмендә ярҙам алды. Ә икенсе бер автогигантҡа - ГАЗ предприятиеларына (хужаһы - билдәле олигарх Олег Дерипаска) хөкүмәтебеҙ 20 миллиард һум күләмендә ярҙам күрһәтергә вәғәҙә итте. Шуға ҡарамаҫтан, ГАЗ предприятиеһында 2009 йылдың беренсе кварталында ғына 5 меңдән ашыу эшсе ҡыҫҡартыла. Был хеҙмәт коллективының дүрттән бер өлөшө, тигән һүҙ. Ә Олег Дерипаска иһә Рәсәй Һаҡлыҡ банкыһы менән бергәләшеп Германияның "Опель" автоконцернын һатып алырға йыйына. Ғәжәп икән был донъя!

ВАЗ предприятиеһының да эше шәптән түгел. Бөгөн уларҙың бурысы 100 миллиард һумға яҡынлаша. Хөкүмәт биргән 25 миллиард һум упҡынға ташлаған кеүек юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Кәрәкме һуң беҙгә бындай автопром? Беҙгә, йәғни, ябай кешеләргә автомобиль кәрәк. Идара итеүҙә ябай һәм уңайлы, ҡулланыуҙа сифатлы һәм ышаныслы булған, Рәсәй юлдары буйлап күпме йөрөһә лә ватылмаған автомашина кәрәк беҙгә. Ҡайҙа етештерелеүе үтә мөһим түгел. Эйе, автомобиль йәһәтенән Рәсәй халҡы патриот түгел шул. "УАЗ-Патриот" урынына япон джибында йөрөргә ризабыҙ. ВАЗ автомобилдәренә ҡарағанда, беҙгә "Мерседес" яҡыныраҡ. Беҙгә, тим, тәү сираттан түрәләребеҙгә. Улар күптән инде ватан автомобилдәренән баш тартты бит. Улар күптән инде сит ил машиналарын хуп күрә.

Шулай булғас, үлеп барғанды терелтергә маташҡансы, уның менән мәңгегә хушлашыу хәйерлерәк түгелме?

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда быйылғы алты айҙа тыуым күрһәткесе 0,8 процентҡа артҡан, вафат булыусылар һаны 6,3 процентҡа, тәбиғи кәмеү өс тапҡырға кәмегән.

✓Республика вуздары уҡыуға ҡабул итеүселәр буйынса тәүге бойороҡто баҫып сығарҙы. Бөтә вуздарҙың да ҡабул итеү комиссиялары балл буйынса конкурстан үткән абитуриенттарҙан документтарҙың төп нөсхәләрен йыйып алды. Беренсе курсҡа алыныусылар тураһындағы икенсе бойороҡ - 12 августҡа тиклем, икенсеһе 21 августа буласаҡ. Уҡырға инергә балл йыя алмаған абитуриенттар документтарын коммерция йә ситтән тороп уҡыу бүлегенә бирә ала. Һәм тағы: республика вуздарының бюджет урындарына быйыл 9554 кеше ҡабул ителгән, 48,5 мең кеше ғариза биргән булған.

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов Пермь ҡалаһында РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Совет ултырышы һәм РФ Именлек Советының берлектәге күсмә кәңәшмә эшендә ҡатнашты. Милли стратегик өҫтөнлөктәрҙе тормошҡа ашырғанда милли именлеккә янаусы потенциаль хәүеф мәсьәләләре һәм финанс-иҡтисади көрсөк шарттарында уларҙы нейтралләштереү буйынса саралар тикшерелде.

✓"Республика ғаиләгә, балаларға, йәштәргә социаль-психологик ярҙам үҙәге" дәүләт учреждениеһында ауыр хәлдәге кешеләргә социаль-психологик ярҙам күрһәтеү маҡсатында ашығыс психологик ярҙам бүлеге асылды. Телефоны: 8(347)273-09-00, тәүлек әйләнәһенә эшләй.

✓Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр һаны буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында беренсе урынға сыҡҡан. Йәғни бер йыл эсендә беҙҙә эшҡыуарлыҡ субъекттары 116,7 меңдән 125,5 меңгә, шәхси эшҡыуарҙар 86 меңдән 93 меңгә еткән. Фермер хужалыҡтары ла артҡан. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарында бөтәһе 650 мең кеше эшләй.

✓З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Яңы мәғлүмәт технологияларын үҫтереүҙә һөҙөмтәлелек һәм уңыш" өсөн Мәскәүҙәге "СПЕЦ-АДРЕС" нәшриәте һәм "Рәсәйҙең иң яҡшы кешеләре" энциклопедияһы редакцияһы дипломы менән бүләкләнде.

*✓ "Эше тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, бында Мортаза Ғөбәйҙулла улы аҙнаһына ике тапҡыр килеп китергә өлгөрә. Шулай булғас, беҙ нисек түҙеп ятайыҡ", - ти тәҙәүселәргә ихлас ярҙамлашып йөрөгән уҡытыусылар ҙа.*



*Аһ-Аһ...*

**Һәр балаға хәүефһеҙ тормош шарттары булдырыу, уның ҡыҙыҡһыныуҙарын, уҡыуын, шәхес булараҡ үҫешен тәьмин итеү өсөн ниндәй саралар, механизмдар, ойошмалар булдырырға кәрәк? Был һорауҙарға яуап биреү өсөн БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бала табыу йортонда үҙ балаһынан баш тартыусы әсәләр менән аноним һорау-яуап сараһы үткәрҙе.**

# НИҢӘ ӘСӘЛӘР...
## балаһынан баш тарта?

БР Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Рәлиҙә Шакирова хәбәр итеүенсә, ошо ярты йылда Башҡортостанда 84 ҡатын балаһынан баш тартҡан, уларҙың күптәре, 62 проценты - ҡалала, 38 проценты ауыл ерендә йәшәй. Балаларынан баш тартыусыларҙың 47 проценты - 18-25 йәштә, 32,2 проценты - 26-35 йәштә, 11,9 проценты - 18 йәшкә тиклем, 8,3 проценты 35 йәштән юғары булған ҡатын-ҡыҙҙар. Үҙ балаларынан баш тартыусы ҡатындарҙың яртыһы тиерлек урта махсус белемле, 30 проценты - урта, 17,5 проценты - тулы булмаған урта белемле, 13 проценты мәктәп уҡыусылары йәки студенттар, ҡалған 34 проценты эш урыны булған кешеләр. Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 75 процентының эш хаҡы йәшәү минимумынан түбән, 21,4 процентының эш хаҡы - 4-6 мең һум, тик 3,6 проценты ғына 6 мең һумдан юғарыраҡ эш хаҡы ала.

Балаларынан баш тартыуҙың сәбәбе итеп 43 ҡатын матди яҡтан мохтажлыҡ кисереүен таныған. Уларҙың 20-һе - йәшәү шарттары булмауын, 13-ө - эш урыны булмауҙы сәбәп иткән, 7 ҡатын, бала өҫтәлеү уларҙың матди хәленә кире йоғонто яһаясаҡ, тип белдергән. Һорауға яуап биргән ҡатындарҙың 33 проценты, баланан баш тартыу ҡарарын үҙгәртеүгә матди, рухи яҡтан ярҙам күрһәтеү, 15 проценты тормошондағы социаль хәлде үҙгәртеү (эшкә урынлашыу, кейәүгә сығыу), 12 проценты тормошҡа, йәшәү рәүешенә ҡарашын үҙгәртеү йоғонто яһарға мөмкин, тигән. Әммә был ҡатындарҙың 40 проценты баланан баш тартыу ҡарарына бер нәмә лә йоғонто яһай алмаясаҡ, тип белдергән.

- Ошо һорау-яуап сараһы һөҙөмтәләрен анализлау бала табыу йортонда балаһынан баш тартыусы ҡатын-ҡыҙға социаль портрет төҙөргә ярҙам итте, - тип һөйләне БР һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары. - Һөҙөмтәлә, 20 йәшкә тиклемге, урта һәм махсус урта белемле, эшләмәгән, кейәүгә сыҡмаған, матди ярҙамға мохтаж, үҙенең социаль статусын барлыҡлыҡ, тип һанаусы, матди һәм социаль хәлен яҡшыртыу уларҙың ҡарарын үҙгәртер ине, тип һанаусы ҡатындар күпләп балаһынан баш тарта икәнлеге асыҡланды. Ул балаларҙы әсәләре менән ҡалдырыуға ғаиләгә социаль ярҙам күрһәтеү һәм социаль хәлен үҙгәртеү ярҙам итер ине. Шулай ҙа һорауға яуап биргән ҡатындарҙың яртыһының тиерлек балаһынан баш тартыу ҡарарына бер ниндәй ҙә факторҙың йоғонто яһай алмаясағы аяныс хәл, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алып үтте Рәлиҙә Шакирова.

Билдәләнелеүенсә, яңы тыуған балаларынан баш тартыусы ҡатындарҙың социаль портретын булдырыу уларҙың шәхси социаль фактор комплекстарын баһаларға һәм бала тыуғанға тиклем үк унан баш тартыу буйынса хәүефте кәметеүгә ярҙам итә. Етемлекте булдырмау саралары ошондан ғибәрәт тә инде, йәғни һөҙөмтәләр, шелтәләүҙәр менән түгел, ә сәбәптәр менән көрәшергә кәрәк, ә хәл төҙәтеүҙән уҙғас көрәшеүҙән фәтеүә юҡ.

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАР...
## заманса мәктәпкә лайыҡ

**Быйылғы уҡыу йылын Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты уҡыусылары өр-яңы корпустарҙа ҡаршылаясаҡ.**

Бөтә нәмә яңыртылған бында. Элекке уҡыу корпусын үҙгәртеп, 320 урынлыҡ ятаҡ, административ корпус төҙәгәндәр. Быға тиклем ике бүлмәнән генә торған медицина изоляторы хәҙер беренсе ҡаттың яртыһын биләй. Ошонда уҡ киләсәктә массаж бүлмәләре булдырырға ла хыялланалар. Уҡыу корпустары, спорт залы, тамаша залы, ашхана - барыһы ла яңы, иркен корпуста урынлашҡан.

"Был төҙөлөш һәләтле балалар өсөн баһалап бөткөһөҙ ҙур бүләк, - тип ҡыуыныусын йәшермәй художество гимназия-интернатының директоры Рәфил Рафаэль улы Фәтихов. - Шуныһына хайран ҡалырлыҡ: республикала музыкаль, һынлы сәнғәт мәктәптәре, училищеларының береһе лә ташландыҡ хәлдә түгел. Боронғо бер аҡыл эйәһе "Тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен белгән, күтәргән халыҡ ҡына бөйөк була ала", тип әйткән бит әле. Башҡорт халҡының фәлсәфәһендә лә ошондай ҡараш бар. Милләттең сәнғәте түбән булһа, ул үҙен бөтә донъяға күрһәтә, таныта алмай. Бар донъя күрсәк, тип, баҙап ҡалған ваҡытта шундай объект тапшырыуҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Баш ҡалала ғына бармай бындай төҙөлөштәр, республика буйынса улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ".

Әле төҙөлөш эштәре тамамланыу өҫтөндә. Ял көндәрендә лә эш тынып торғаны юҡ бында. "Эше тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, бында Мортаза Ғөбәйҙулла улы аҙнаһына ике тапҡыр килеп китергә өлгөрә. Шулай булғас, беҙ нисек түҙеп ятайыҡ", - ти тәҙәүселәргә ихлас ярҙамлашып йөрөгән уҡытыусылар ҙа.



**Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатында ла яңы уҡыу-административ һәм реконструкцияланған уҡыу корпусы уҡыусыларын ҡаршы алырға әҙерләнә.**

Өс ҡатлы яңы уҡыу-административ корпусында административ кабинеттар, ҡунаҡтар өсөн бүлмәләр, стоматология, физиотерапевтик кабинеттары менән медицина блогы урынлашҡан.

Унын икенсе ҡатында 50 урынлыҡ йоҡо корпусы, махсус кластар, уҡыу залы ла бар. Был бинаға йылы үткәргес менән тоташҡан корпуста 350 урынлыҡ ашхана төҙөлгән, икенсе ҡатында - иркен спорт залы, сисенеү, душ бүлмәләре, тренажер залы, концерт һәм оркестр залдары урынлашҡан. Тәнәфес ваҡытында уҡыусылар ҡышҡы баҡса һәм релаксация кабинетында ял итә аласаҡ. Хужалыҡ блоктарына ла реконструкция үткәрелгән, музей урынлашасаҡ айырым бина үҙгәртеп ҡоролған, унда композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ижады һәм тормошона, уҡыу йортоноң тарихына арналған музей буласаҡ. Гимназия-интернаттың директоры Эльмира Рафаил ҡыҙы Сафина әйтеүенсә, бындай төҙөлөштән һуң гимназияла, ниһәйәт, башҡорт филологияһы бүлеге асырға мөмкин буласаҡ. Был бүлектә балалар ҡыл-ҡумыҙ, ҡурай, думбыра кеүек музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәнәсәк.

**Шулай итеп...**

**Республикала барған башҡа төҙөлөштәрҙән айырмалы рәүештә, баш ҡалала урынлашҡан был ике гимназия-интернат өсөн яңы корпустар төҙөү - һәләтле балаларға яҡшы белем алыу, йәшәү өсөн өҫтәмә шарттар тыуҙыра. Талант һәр ваҡытта ла яҡлауға мохтаж - быны ил етәкселәре лә яҡшы аңлай. Бындай матур һәм яҡты гимназияла уҡыған, уңайлы ятакта йәшәгән балалар киләсәктә сәнғәт өлкәһендә юғары һөҙөмтәләргә ирешеп, республиканы донъя кимәлендә лә танытып ҡыуандырасағына иманыбыҙ камил.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ...
## ярҙамға килә

**Рәсәй Федерацияһы Пенсия фонды Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, идараға әсәлек капиталынан 12 мең һум күләмендәге бер тапҡыр түләнә торған аҡсаны һорап, 18580 ғаилә мөрәжәғәт иткән.**

Икенсе йәки унан һуңғы балаларҙың тыуыуына күпме ваҡыт үтеүенә ҡарамаҫтан, әсәлек капиталы сертификаты эйәләренең бөтәһе лә бындай ғаризаны яҙа ала. Бының өсөн паспорт, әсәлек капиталына сертификат һәм аҡсаны күсереү өсөн банкыла асылған иҫәптең реквизиттары хаҡында банк белешмәһе кәрәк.

2009 йылдың ғинуарынан алып әсәлек капиталы кредиттар һәм займдар, шул иҫәптән ипотека буйынса төп бурысты йәиһә проценттарҙы өлөшләтә йәки тулыһынса түләүгә, торлаҡ һатып алыу йәки төҙөүгә йүнәлтелә ала.

Бөгөнгә урындарҙағы Пенсия фонды идаралыҡтарына торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн алынған кредиттар һәм займдарҙы ҡаплауға файҙаланыу тураһында 2887 ғариза яҙылған. 2539 ғариза буйынса мәсьәлә ыңғай хәл ителгән, шулар араһынан 2229 ғаилә әсәлек капиталы ярҙамында өлөшләтә йә тулыһынса ипотека буйынса бурысы менән иҫәпләшкән, бөтәһе 579,7 миллион һум кредит һәм займдар түләнгән.

Әсәлек капиталы менән эш итеү тураһында Пенсия фондына ғариза (бланк Пенсия фонды идаралыҡтарында бирелә) яҙғанда паспорт йәки уны алыштырыусы документ, әсәлек капиталына сертификат, кредит килешеүе, кредит учреждениеһынан алынған кредит буйынса ҡалған бурыстың суммаһы күрһәтелгән белешмә, кредитҡа алынған торлаҡ бинаһына милексәлек хоҡуғын дәүләт теркәүе тураһында таныҡлыҡ кәрәк.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Быйыл республиканың ҡан менән тәьмин итеү хеҙмәтенә ҡан ебәреү станцияларын һәм бүлексәләрен матди-техник йыһазландырыу өсөн 100 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә яңғын хәүефһеҙлеге саралары һәм мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү барышы тураһында мәғлүмәттәр тыңланды. Билдәләнелеүенсә, 18 августа тиклем - барлыҡ мәктәптәр, 31 августа тиклем барлыҡ балалар баҡсалары яңы уҡыу йылына әҙерләнеп бөтәсәк. Быйыл беренсе класҡа 9515 бала уҡырға киләсәк, был былтырғы менән сағыштырғанда 725 балаға күберәк.

✓Өфөлә көҙөн V "Ҡала мөхите" социаль реклама фестивале үтәсәк. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, һуңғы осорҙа баш ҡалала социаль йүнәлештәге реклама таҡталары күберәк күҙгә салына башланы. Бындай рекламаларҙың йөкмәткеһе нисегерәк булырға, ниндәй темаға ҡағылырға тейеш? Буласаҡ фестиваль ошо һорауға асыҡлыҡ индерергә ярҙамлашыр, моғайын. Быйылғы фестивалдең девизы - "Яңы быуын - яңы идеялар".

✓Быйыл ярты йылда З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте 141 исемдәге баҫма сығарған. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда, был ун баҫмаға күберәк. Сығарылған продукцияның дөйөм тиражы - 559 мең.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән матбуғат конференцияһында Физкультурниктар көнөнә арналған саралар тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, 8 августа баш ҡаланың һәр районында спорт саралары үтәсәк. "Аҡбуҙат" ипподромы алдындағы майҙан байрам үҙәгенә әйләнәсәк. Бында сәғәт 11-ҙә "Ҡыҙғылт-һары туп -2009" Бөтә Рәсәй урам баскетболы буйынса ярыштар башланасаҡ.

✓Мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙә сусҡа киҙеүе менән ауырыусылар һаны 55-кә еткән. Уларҙың күбеһе был сирҙе Великобританияла, Испания, Төркиә һәм Болгарияла эләктергән.

ҺОРАУ - ЯУАП



# ЙӘЙ БУЙЫ БАҠСАЛАМЫН -

## коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә тейешменме?

**Күҙ асып йомған арала йәйҙең ике айы үтеп тә китте, ләкин ошо осорҙа ял итә алмағандар өсөн тотош август бар әле. Дачаларҙа ла баҡсасыларҙың эше бөтөрлөк түгел. Юл йөрөүселәр, туристик путевкалар һатып алыусылар ҙа һис кәмемәй. Бына ошондай ҡыҙыу эш тә, ял ваҡыты ла булыуға ҡарамаҫтан, йәйге сезон темаһына редакцияға хаттар килеүҙән туктамай. Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең халыҡты социаль яҡлау идаралығы начальнигы Динар ХӘЛИЛОВ шундай хаттар һәм һорауҙарҙың бер-нисәһенә аңлатма бирә .**

- Бөгөн иң көнүҙәк темаларҙың береһе - банк хеҙмәттәре , - тип башланы һүҙен Динар Ғәли улы. - Беҙгә банктарҙың ҡулланыусыға кредит биреү шарттары хаҡында тулы мәғлүмәт бирмәүҙәренә зарланып йыш мөрәжәғәт итәләр. Тап шул сәбәпле клиенттар айлыҡ түләүҙәр һәм кредиттан файҙаланған өсөн проценттар хаҡында хәлдә асыҡ күҙаллай алмай. Шуныһы ла бар: банк хеҙмәткәрҙәре лә йыш ҡына клиенттан түләтелә торған комиссия төрҙәре һәм күләме хаҡында килешеү төҙөгәнгә тиклем үк тулы мәғлүмәтте аса һалып бармай. Бынан тыш, ҡулланыусыға "бөтә шарттар менән таныштым һәм ризамын" тип яҙылған әҙер стандарт бланкҡа ҡул ҡуйырға тәҡдим итә. Шул уҡ ваҡытта ҡулланыусының шарттар менән таныштырылмауы ла ихтимал. Аҙаҡ клиент билдәләнгән сумманы ай һайын түләгән хәлдә лә быны фәҡәт кредиттан файҙаланған проценттар икәнлеген, ә бурысының шул килеш ҡалыуын асыҡлай. Шулай ҙа була: банктар кешеләргә уларҙың өй адресы буйынса почта аша карточкалар ебәрә. Уларҙы активациялау бик еңел. Рекламаға ышанып, эҙемтәләре хаҡында уйлап тормайынса, ҡулланыусы карточканы активациялай һәм шуның менән бик ҙур бурысҡа батыуы ихтимал.

▸ **Йәй буйы баҡсаһында булып, йә ҡайҙалыр ял итергә китеп, өйөндә газ, электр энергияһы, һыу менән файҙаланмаһа, кеше ошо осорҙа коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә тейешме?**

- Фатирында биш тулы календарь көн һәм унан оҙағыраҡ йәшәмәгән кеше һыуыҡ һәм эҫе һыу, электр энергияһы һәм газ, һыу өсөн ҡайтанан иҫәп-хисап яһауҙы талап итергә хоҡуғы бар. Бының өсөн өйгә ҡайтҡандан һуң бер ай эсендә торлаҡ-файҙаланыу участкаһына (ЖЭУ) ғариза яҙырға кәрәк. Уға үҙегеҙҙең ҡайҙа булыуығыҙҙы раҫлаусы (эштән дөрөҫләнгән командировка таныҡлығы, стационар дауалау учреждениеһында булыуығыҙ хаҡында белешмә йәки юл йөрөгән билеттар һәм уларҙың күсермәһе, ваҡытлыса йәшәү урынында теркәлеү хаҡында эске эштәр органынан белешмә, ялда йә баҡсала булған осорҙа фатирҙы һаҡлаусы һаҡ ойошмаһынан белешмә һ.б.) документтарҙы теркәү мотлаҡ. Ҡайтанан иҫәп-хисап тотонолған һыу һәм газды иҫәпләп барыусы индивидуаль приборҙар булмаған осраҡта яһала.

▸ **Баҡсасыларҙан һорау: тимер юл транспортына ташламалар ҡасанға тиклем һәм ниндәй категория граждандар өсөн бирелә?**

- Куйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлексәһе тарафынан ҡала яны тимер юл транспорты өсөн социаль ярҙам сараларына хоҡуғы булған граждандарға ошо йылдын 30 сентябренә тиклем 50 процент ташлама менән файҙаланыу мөмкинлеге бирелә. Улар иҫәбенә пенсионерҙар, тәбәк һәм федераль регистрға индерелгән граждандар, эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре инә. Юл йөрөүҙә ҡулланылыусы ташламалы билет тимер юл транспорты кассаларында ташламаға хоҡукты раҫлаусы документтар нигеҙендә һатыла .

▸ **Бөгөн шифаханаға йәки башҡа берәй илгә путевка һатып алыуы проблема түгел, аҡсаң ғына булһын. Ҡалала һәр төрлө агентлыҡтар шул тиклем күп, ниндәй туристик компанияға ышанырға ла белмәйһең ...**

- Ундай компанияны һайлауға бик яуаплы ҡарарға кәңәш итер инем. Фирма менән турист мөнәсәбәттәре "Ҡулланыусы хоҡуктарын яҡлау тураһында" РФ законы һәм "Рәсәй Федерацияһында туристик эшмәкәрлек нигеҙҙәре тураһында" федераль закондарға ярашлы көйләнә Путевка һатып алғанда яҙма рәүештә килешеү төҙөргә һәм унда түбәндәге пункттарҙың булыу-булмауына иғтибар итергә кәрәк: ял итеп ҡайтыу программаһы, сәфәр маршруты һәм шарттары, йәшәү һәм туҡланыу, турҙың хаҡтары, экскурсоводтың булыуы, шулай уҡ өҫтәмә хеҙмәттәр исемлеге.

Турист ваҡытлыса сит илгә барып ҡайтыу ҡағиҙәләре, урындағы ғәҙәттәр, дини ырымдар, изге иҫәпләнгән урындар, тәбиғәт, тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡылар, программаға ингән башҡа төр объекттар хаҡында дөрөҫ мәғлүмәт алырға хоҡуҡлы. Туристарҙың шәхси хәүефһеҙлеген тәьмин итеү, уларҙың милкен һаҡлау, ашығыс медицина ярҙамы, бәйләнеш һәм элемтә саралары менән файҙаланыу мөмкинлегенә лә иғтибар итергә кәрәк.

ИНТЕРНЕТТАН

# ЙӘЙГЕ КАНИКУЛДАР...

## ҡыҫҡарасаҡ, тиҙәр

● Яңы уҡыу йылы башында мәктәп уҡыусыларын бик үк күңелле булмаған яңылыҡ көтә. Рәсәй закон сығарыусылары уҡыу йылын үҙгәртеп ҡорорға һәм йәйге каникулдарҙы ҡыҫҡартырға уйлай. Улар фекеренсә, уҡыусыларға йыллыҡ программаны ете ай эсендә үҙләштерергә тура килә, етмәһә, май айында байрамдар күп, ә сентябрь-октябрь айҙары үтелгән материалды ҡабатлауға китә. Шуға ла йәйге каникулдарҙы 1,5-2 айға ҡалдырып, көҙгө һәм яҙғы каникулдарҙы оҙайтырға уйлайҙар.

● Сентябрҙә мәктәп дәреслектәренә хаҡтар өс тапҡырға артасаҡ, тип иҫкәртә мәктәп дәреслектәрен баҫыусылар. Күп ата-әсәләр дәреслектәрҙе майҙа түгел, ә уҡыу йылы башында һатып ала, һөҙөмтәлә китап магазиндарында ҙур сираттар барлыҡҡа килә. Бындай шарттарҙа дәреслектәргә бер нисә тапҡыр ҡиммәтерәк хаҡ ҡуйып һатыусылар ҙа күбәйә.

● Быйыл йәй уҡытыусы булып эшкә урынлашырға теләүселәр һаны күбәйгән. Күрсәк ваҡытында бюджет эшсеһе булыу яҡшыраҡ, шуға ла элек минималь эш хаҡы 50 мең булған программистар, режиссерҙар, пиарщиктар ҙа мәктәпкә тартыла башлаған. Хәҙер Мәскәү уҡытыусыларының да эш хаҡы өҫтәмәләр менән ике мең доллар тирәһенә барып баҫа. Мәктәп директорҙары фекеренсә, уҡытыу эшенә башҡа өлкәләрҙән дә белгестәр йәлеп итеү яҡшы һөҙөмтәләргә килтерәсәк.

● Рособрнадзор БДИ-ла 100 балл менән баһаланған һөҙөмтәләрҙе тикшереп, уларҙың 25 процентын дөрөҫ баһаланмаған, тип тапҡан. Июнь һәм июль айында төрлө фәндәр буйынса иң юғары балл йыйыған уҡыусылар һаны 2336-ға еткән. Рособрнадзор 370 эште тикшереп, уларҙың 74,6 процентының һөҙөмтәһен генә дөрөҫләгән. Әлеге ваҡытта һөҙөмтәләр Рәсәйҙең төбәктәренә кире ҡайтарылған. Рособрнадзор мәғлүмәттәре буйынса, быйыл Рәсәй мәктәптәрен тамамлаусы 2,7 процент уҡыусы аттестатһыҙ ҡалған.

● Рособрнадзор вузға уҡырға ингәндә льгота менән ҡулланырға мөмкинлек биреүсе категорияларҙы ҡыҫҡартырға тәҡдим итә. Әлеге мәлдә бындай льгота менән Рәсәй граждандарының 153 категорияһы ҡуллана. Быйыл вуздарға уҡырға инеүселәр араһында ялған справкалар килтереп, конкурсһыҙ уҡырға инергә теләүселәр һаны ла артҡан. Ҡайһы бер бүлектәрҙә льготаға эйә абитуриенттар һаны бюджет урындары һанынан күпкә артып киткән.

● Күрсәк осоронда түләп белем алыусы 28 мең студент бюджет нигеҙендә уҡыуға күсерелгән.

● "Суҫка" киҙеүен сәбәп итеп, Рәсәй мәктәптәре карантинға ябылмаясаҡ, тип белдерҙе РФ баш дәүләт санитар табибы Геннадий Онищенко. Бөгөнгө көнгә беҙҙең илдә был ауырыу менән сирләүселәр һаны 18-гә еткән. Киҙеүҙән һаҡланыуҙың төп саралары булып мәктәптәрҙә температура режимын күҙәтеү, зарарлы ғәҙәттәрҙән баш тартыу һәм миҙгелгә ҡарап, дөрөҫ кейем һайлау тора.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

### Кишер - аҙыҡ ҡына түгел

Әле баҡсала кишер өлгөрә. Тамырын, япрағын, артып ҡалған орлоғон да файҙаланырға кәрәк: 1) сей көйө; 2) шеш булмаһа, бешереп аша - күҙең яҡшыраҡ күрер; 3) эренле йәрәхәтте йүнәлтә; 4) япраҡ төнәтмәһе геморройҙан ҡотҡара; 5) сөгәлдәр менән бергә бешереп, бал ҡушып аша - төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тора; 6) һытын эс - бөйөрҙәге ҡом, таштьы төшөрә - быны өсөн бер ҡалаҡ кишер орлоғон 3 стакан ҡайнар һыуға һалып, 6-7 сәғәт ябып тотаһың да, көнөнә 3 тапҡыр 3/4 стакан эсәһең.

### Күҙ катарактаһы

Бер стакан һөткә ҡырғыстан үткәрелгән бер ҡалаҡ керәнде һалып ҡайнатырға. Бер сәғәт төнәткәс, ашар алдынан көнөнә дүрт тапҡыр сирек стакан эсергә. Күҙҙе үҙ аллы дауалау мөмкин түгел, мотлаҡ табип менән кәңәшләшегеҙ.

### Аҡ ҡайын, шифалы ҡайын

Күп кешелә тимерәү юҡтан ғына килеп сыға. Бындай саҡта: 1) ҡайындың ботаҡ-япраҡтары менән бергә ҡайнатып сығарырға һәм шунда ҡулдарҙы 20-30 минут тығып торорға, һыу ни тиклем эҫе булһа, шунса шифалы. Ҡулдарҙы был һыуҙан алғас, йыумаҫҡа, шул көйө кипһендәр. Йыбанмайынса, көнөнә бер нисә тапҡыр эшләргә була. Ҡайын һыуы менән тотош йыуынһаң да файҙалы; 2) кәбеҫтә япрағын алма һеркәһендә тотоп, һыты сыҡҡансы йомшартырға һәм тимерәүле урынға ябып бәйләргә; 3) ололар өсөн: бер стакан балан һутына йөҙ грамм бал һәм бер литр һалҡын һыу ҡушып болғарға ла, көнөнә ярты стакан эсергә.

### "Һыуыҡ мунса", эҫе таш

Ағиҙелдең 4-5 м киңлектә ап-аҡ тигеҙ ташлы ҡырсынлығы булды. Йәйге эҫелә ул уттай ҡыҙа, шуға һыу һибеп, салҡан йәки йөҙтүбән ятабыҙ. Тән тирләй, ҡыҫыта. Уныһын өләсәйем "таштар эстәге сирҙе сығара", тип аңлата ине. Мунсаһыҙ ғына эҫе таште ятҡас, "һыуыҡ мунса, эҫе таш", ти торғайныҡ.

### Ҡан склерозы

1) Беҙ бәләкәй саҡта ҡаrабойҙай сәскәһен бер литр ҡайнаған һыуҙа төнәтеп һөҙәләр ҙә, көнөнә 3 мәртәбә ярты стакан эсерәләр ине. Ә үҙебеҙ йәш саҡта ул сәскәләрҙән тәмле ҡайнатма яһай инек; 2) помидорҙы күп итеп ашарға кәрәк; 3) хөрмә емеше лә аҡыл өсөн файҙалы.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

*✓ Милли кейемдең сәхнәлә кейелә торған әйбер тип кенә ҡабул ителеүе берәүҙе лә ғәжәпләндермәй, буғай. Башҡорт телен дә шул күренешкә яҡынайтмаҫбыҙмы, уға аралашыу теленән бигерәк сәхнә теленә әйләнеп китеү хәүефе янамаҫмы?*

*ФЕКЕР ҠОРО*

# УРАЛ БАТЫРЫБЫҘ ТЕЛЕН...

## "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр нисегерәк яңғырата?

**Һуңғы тиҫтә йыл эсендә "Урал батыр" эпосын пропагандалау йүнәлешендә ҙур эштәр эшләнде. Мәшһүр эпосты донъя кимәлендә таный башлауҙарында айырыуса йәш ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәте тос. Быны әйтеп китеү урынлы булыр, сөнки хәҙер "Урал батыр" эпосын өйрәнеүселәр ҙә йәшәрә бара - был бөгөнгө заманыбыҙҙың мөһим ваҡиғаларының береһе. 1910 йылда яҙып алынған эпостың донъя телдәрендә нәшер ителеүенә Мөхәмәтша Буранғолов үҙе лә хәҙер таң ҡалыр ине. Хәйер, былай тип әйтеү дөрөҫ булырмы? Эпостың баһалап бөткөһөҙ ҡиммәткә эйә икәнен иң тәүгеләрҙән аңлап, уны халҡына ҡалдырыр өсөн оло эш атҡарған ғәли зат - ул үҙе ләбаһа! Йәш быуын араһында эшен дауам итеүселәрҙең бермә-бер артыуын күрһә, сикһеҙ шатланыр ине Мөхәмәтша аҡһаҡал.**

"Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр хәҙер һәр районда ла бар, тип әйтә алабыҙ. Республикабыҙҙың Мәғариф министрлығы йыл да үткәрә килгән йәш сәсәндәр бәйгеһе башҡорт теленә иғтибарҙы арттыра, рухи донъябыҙға йәшлек һулышы өҫтәй, шуға ярашлы киләсәкте күҙаллау мөмкинлеген дә бирә. Үткән ун бер йыл эсендә сәсәндәрҙең эшен дауам итерҙәй нисә егеттең исеме асылғандыр, быны иҫәпләүҙе маҡсат итеп ҡуйманым. Һәр хәлдә, бәләкәй оҫталарҙың бәйгеләрҙә лайыҡлы баһа алғандарына ла, артабан тормошта үҙҙәре ярған юлдан барыуҙарына ла шик юҡ. Әлеге конкурста ҡатнашҡан Дәүләт Сафин һәм Йәмил Намаҙбаев исемле егеттәрҙең, мәҫәлән, йәмәғәт алдында туған телгә ҡағылышлы әйткән һүҙҙәре бик күптәрҙең хәтерендә юйылмаҫлыҡ булып тороп ҡалғандыр. Ә телгә мөнәсәбәт бик күп нәмәне асыҡлай. Ун йәшлек Дәүләт Сафин - балаларса саф тауышлы һәм балаларға хас булмаған етди ҡарашлы, шулай уҡ эпосҡа етди мөнәсәбәтле малай. Ниндәйҙер эске ныҡлығы, ихтыяры менән арбаны ул. Уның Урал батыр ҡалдырған аманаттарҙы артабан тағы ла нығыраҡ үҙләштерәсәгенә шик юҡ, сөнки тыштан күренгән тыныслыҡ артында эске ялҡын йәшеренгәйне.

Тыңлаусыларҙың Өфө ҡалаһынан килгән Йәмил Намаҙбаевты нисек яратып, хуплап ҡабул итеүе шулай уҡ онотолмаҫ күренеш булды. Дәррәү алҡышланы уны тыңлап ултырыусылар. Төрлө ҡала һәм районлан килгән уҡыусылар һәм тәрбиәселәр ҡыйыу ҡарашлы, рухи ҡанатлы егеткә үҙҙәренең мөнәсәбәтен шулай белдерҙе. Ә милли ғорурлығы уға артабан да офоҡтарын киңәйтергә ярҙам итәсәк. Тап ошо егеттәр сығыш яһағанда мин дә Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙе беҙҙең арала уҡ ултырған һымаҡ хис иттем. Боронғо сәсәндәребеҙ уларҙы үҙҙәренә ышаныслы алмаш итеп күргәндәренә шикләнмәнем. Тасуири һәм еренә еткереп һөйләй белеү - сәсәнлектең айырылғыһыҙ атрибуты. Ләкин "Урал батыр" тигән мәшһүр исем быны менән генә сикләнмәй. "Урал батыр"ҙа - халыҡтың ҡаһарманлыҡ, егетлек мәктәбе ятҡанын иҫтән сығармаһаҡ ине. Батырыбыҙ донъя кимәленә сығып, кешелек мәсьәләләрен хәл итә. Һүҙ көсө менән аҡыл ҡеүәһененең берлеген күрһәткән был героик образ кәрәк икән - инандыра, кәрәк икән - рухландыра, кәрәк икән -ышандыра.

Дәүләт Сафиндан, эпосты тағы ла ниндәй телдә ятланың, тип һорағас, ул асыҡ итеп яуап бирҙе: "Урал батыр"ҙы башҡорт телендә ныҡлап белмәй тороп, башҡа телдә ятламаясаҡмын". Ошо уҡ һорауға Йәмилдең яуабы ла ҡәтғи булды: "Урал батыр Башҡортостанда башҡорт телендә яңғырарға тейеш". Был ике малайҙың ата-бабаларыбыҙҙың бөйөк ҡомартҡыһын еренә еткереп, үҙ туған телдәрендә ишеттерергә теләүе уйландырҙы. Миңә ун йәштә саҡта был эпосты яттан белеүсе бала юҡ ине һәм ошондай уҡ фекерҙе ҡәтғи әйткән малайҙы күргәнем дә, ишеткәнем дә булманы. Шуға ла әлеге ир балаларҙы башҡорт телендә ғорур һөйләшеүселәр, телде камил белергә ынтылыусылар тип кенә түгел, телде киләсәктә лә ныҡлы яҡлаусылар буласаҡ, тип ҡабул иттем. Ҡараштарын дәлилләй белеүселәр итеп, кем икәндәрен һәм кем булып үҫәсәктәрен һәм кем мәнфәғәтен һаҡлаясаҡтарын күрһәтте улар. Шуға ябай бер тыңлаусы булараҡ, уларға үҙемдең иң юғары баһамды ла бирҙем.

Ошондай ҡатнашыусыларҙы тыңлау тағы ла шундай фекерҙәр ҙә тыуҙырҙы. Бөгөн ҡайһы бер телселәребеҙ, журналистарыбыҙ һүҙҙәрҙе рус теленән тәржемә рәүешендә ҡуллана, һөйләй йә яҙа. Ә инде беҙ быға, ғәҙәттә, әллә ни иғтибар бирмәҫкә тырышабыҙ, бына шундай саҡта уҡыусы балаларҙың туған телгә юғары мөнәсәбәттәрен белдереүе, талапсанлыҡтары тәьҫир итмәҫлек тә түгел. Ғүмер баҡый ҡулланылған һүҙҙең дә ҡай саҡ тәржемә менән алмаштырылғанын һиҙмәй ҡалабыҙ. Мәҫәлән, "уҙған йыл" тигән һүҙ ниңә йыш ҡулланылышҡа инеп китте? Борондан ҡулланылған "былтыр" һүҙе ҡыҫырыҡлана. Был осраҡта Туҡайҙың билдәле әҫәрендәге Шүрәленең "Былтыр ҡыҫты! Былтыр!" тигәнен үҙгәртеп, бөгөнгө заманға ярашлы шулай һөрән һалырға була: "Былтырҙы ҡыҫтылар бит хәҙер! Былтырҙы!" Хәйер, бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Төп фекер шуға барып ялғана: һүҙгә булған ихтирам - сәсәнлектең иң юғары күрһәткесе. Үткәнебеҙ Һүҙ ярҙамында беҙгә килеп еткән, Һүҙ (йәки уны ҡәҙерләүселәр) тарихи анды, хәтерҙе Бөтәһен дә йота барыусы Ваҡыттан һаҡлап ҡалған.

Тағы ла уҡытыусыларҙың иғтибарын бер нәмәгә йүнәлтергә итәм: өндәрҙе дөрөҫ әйтеү һәр тел өсөн төп талап булып тора. Ни өсөндөр тасуири ятлау артында өн әйтелешенә әллә ни әһәмиәт бирмәгән тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының булыуы һағайта. "Б" һәм "п" өндәре һуҙынҡылар эсендә йомшаҡ "в" ("v") өнөнә әйләнә, ә "к" ҡасан мотлаҡ "ғ" булып үҙгәрергә тейеш? Телдең әйтелешен, яңғырашын транскрипцияла күрһәткән ҡулланмалар ҙа ярҙамға сығарылһын ине. "Шулай тип әйткән, ти". Ҡайһы бер уҡыусылар "ти" ҡылымын яңғыратып "тци" рәүешендә әйтә. Сәхнәлә бер генә тапҡыр ишетелһә, иғтибар итмәҫкә лә булыр ине, ләкин был хәл юҡ-юҡта ҡабатланып торҙо. "Т" өнө башҡорт телендә һаңғырау, ул һис кенә лә яңғыратыуға мохтажлыҡ кисермәй. "Ти" тип яҙыла, ләкин "тей" тип уҡыла. Быны һәр бала белергә тейеш. "Тигән"дең "тциған", "тине"нең "тцине" менән алмашыныуы шәп түгел. Шундайыраҡ етешһеҙлектәр туған телдә яңғырағанда, йәш сәсәндән эпосты сит телдә һөйләп ишеттереүен һорау урынлы булырмы? Хәлбүки, ул телдә һөйләгәнде баһалаусы белгес тә юҡ бит. Шуның өсөн "Урал батыр" эпосын төрлө телдә яңғыратыу төп маҡсатҡа әйләнмәһен, тигән борсолоу бар.

Тел яңғырашы, һүҙҙең дөрөҫ әйтелеше радиола эшләүемдең үҙенсәлегенә генә бәйләнмәгән. Милләттәрҙең телгә талабы ла тәбиғи күренеш. Хатта башҡа телдәрҙең йоғонтоһона әллә ни дусар ителмәгән рус теле өсөн дә был ҡәтғи талап икәне бәхәсһеҙ. Мәскәүҙә курстарҙа булғанда Рәсәй радиоһының эшмәкәрлеге менән ныҡлап танышҡайныҡ. Унда радио сығыштарын даими тыңлаусы, тел хилафлыҡтарынан иҫкәртеп тороусы эксперттар эшләй. Бер эксперттың хатта тәжрибәле журналисҡа һүҙ баҫымын ("сре'да", "среда'") дөрөҫ яһамағаны өсөн генә: "Рус телен боҙорға баҙнат итмә!" - тип тулҡынланып, эске ярһыу менән ныҡ иҫкәрткәне хәтерҙә. Хилафлыҡтар китә икән, шундуҡ һүҙҙең дөрөҫ әйтелеше һәм хата яһаусының исеме таҡтаға эленеп тә ҡуйыла. Телде "бөйөк" тип атайҙар икән, ысынлап та, ул шул дәрәжәһендә ҡалырға тейеш. Аңлы рәүештәме, йәки наҙанлыҡ арҡаһында яһалһынмы, хата берәүҙе лә яуаплылыҡтан азат итмәй.

Урал батыр - тәбиғәтте, тормошто бөтә бысраҡлыҡтан азат итеүсе ҡаһарман, халыҡ уға ысын ир-егеттең олуғ һыҙаттарын һалған. Был образды тәрәнерәк өйрәнгәндә беҙ тағы ла әллә күпме аҫыл сифаттарҙы атаясаҡбыҙ. Ләкин эпостан театрлаштырылған өҙөктәр күрһәткәндә ҡайһы бер коллективтарҙың ошо геройҙы ҡыҙ балаға "тапшырып" ҡуйыуы бөтөнләй аңлашылманы. Был ни маҡсаттан эшләнә, уның мәғәнәһе нимәлә, тигән һорау тыумай ҡалмай. Геройҙарҙы, йәғни ил батырҙарын - ир балалар башҡарырға, ҡатын-ҡыҙ образдарын ҡыҙ балалар башҡарырға тейешлеге бәхәсһеҙ һымаҡ. Әгәр ҙә ошо төп талап үтәлмәй икән, был образ ниндәй бурыс атҡара һуң? "Ир-егет ролен оҫта башҡарыусы ҡыҙ" тигән номинация булдырыр өсөн түгелдер бит? Мәктәптә Урал батырҙы күрһәтерлек малай, үҫмер табылмауы мөмкин түгел. Лайыҡлы башҡарыусыны эҙләү һәм табыу шулай уҡ бәйгегә әҙерләүселәрҙең бурысына инәлер, моғайын. Таба алмайҙар икән, был бит һағайтырлыҡ хәл. Ғәбит, Хәмит сәсәндәрҙең изге эштәрен дауам итеүселәр, үҫтереүселәр нишләп булмаһын? Улар бар һәм булыр.

"Урал батыр" бәйгеһенә килгәндәрҙең шаҡтай ғына өлөшө сәхнәнән төшөү менән рус телендә аралашыуға күсә. Ниндәйҙер кимәлдә һағаймаҫлыҡ та түгел. Тел маһирҙарын ярышҡа алып килгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының роле нимәлә? Дөрөҫ, заман үҙгәрә. Хәҙер бит башҡорт милли кейемен генә кейһәң дә, йә йырлап күрһәт, йә бейеп ҡара әле, тигәнде ишетергә тура килә. Милли кейемдең декорация һәм сәхнәлә кейелә торған әйбер тип кенә ҡабул ителеүе берәүҙе лә ғәжәпләндермәй, буғай. Башҡорт телен дә шул күренешкә яҡынайтмаҫбыҙмы, уға аралашыу теленән бигерәк сәхнә теленә әйләнеп китеү хәүефе янамаҫмы?

Сәсән һәм йыраусы Мөхәмәтйән олатай Ҡаҙаҡбаевты тыңлаған саҡта ул тасуири бәйән итәме-юҡмы, тигән уй хатта башҡа ла инеп сыҡмай. Тоноғораҡ, әллә ни көслө булмаған яғымлы тауыш телебеҙҙең тәмен һәм ҡабатланмаҫ моңон бирә алыуы менән үҙенә арбап алып китә. Бындай оҫтанан бер ҡасан да һүҙ йәки өн хатаһы ишетмәҫһегеҙ. Сөнки улар телде бөтә нескәлегендә белгән һәм шуны еткерә алған ғали заттар. Улар күңелдең "хужаһы"на әйләнә. Балалар дөрөҫ әйтмәгән осраҡта беҙ, өлкәндәр, "Йә, ярар, үтһен дә китһен", "Бынан ғына бер ниндәй зыян юҡ," тигән һымаҡ, бер ҡолаҡтан индереп, икенсеһенән сығарып ҡына ебәрһәк, телдең беҙҙе ғәфү итмәүе ла бар бит әле.

Тиҫтә йыл ғына йәшәп тә, туған телгә үҙ мөнәсәбәттәрен асыҡ белдергән баяғы Дәүләт Сафин, Йәмил Намаҙбаев кеүек ир балалар, ысынлап та, Урал батырҙың лайыҡлы вариҫтары булып етерҙәр. Улар сығыш яһағанда халҡыбыҙға төрлө дәүерҙәрҙә һүҙ һәм рух тереклеген бүләк итеүсе сәсәндәребеҙ янныбыҙҙа ултырған булһа (шөкөр, ә улар бит бик күп!), ошондай ейәндәренән бик риза ҡалырҙар ине. Тасуири ятлау мәртәбә, ләкин сәсәнлек телгә маһирлыҡты ла аңлата. Туған телдә уҡығанда, ғилем алғанда, туған телдә һөйләшеп хушланғанда, мәсьәләләрҙе хәл иткәндә, аралашҡанда ғына бала телде камил үҙләштерә һәм уны үҫтереүҙә, нығытыуҙа, пропагандалауҙа үҙ өлөшөн индерә ала. Бүтәнсә икән, тел һайыға, һәм ул тонсоға, һаҫый барыусы быуылған һыуҙы ғына хәтерләтәсәк. Урал батырҙың улдары Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмарҙың алмас ҡылыс менән сабып ағыҙған йылғаларының юлы быуылмаһын, тотҡарланмаһын ине. Мәңгелек хәрәкәттәге йылғалар йәшәү ағышын, йәғни быуындар алмашына барыуын кәүҙәләндерә. Ул киләсәктә лә яңы сығанаҡ-инештәр менән байытыла ғына барһын.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**



Йәмил НАМАҘБАЕВ.

✓ *Ғабдулла хәҙрәт халыҡ медицинаһын ныҡ үҫтергән, үләндәрҙе оҫта файҙаланған, ошо һөнәргә, йәғни ҡайһы үләнде ниндәй сирҙе дауалағанда ҡулланырға кәрәк икәнлекте, шәкерттәргә лә өйрәткән.*



ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# ҒАБДУЛЛА СӘЙЕТ ИСЕМЕ

## ил йөрәгенә яҙылған

**Кем ул Ғабдулла Сәйет хәҙрәт? Ниндәй остаздарҙың остазы булған ул? Хәҙрәт исемен йөрөткәс, дин әһеле икәне барыбыҙға ла мәғлүм. Бөтә илгә даны таралған Мөжәүир хәҙрәттең, Мөхәмәтшакир, Мөхәмәтзакир Рәмиевтарҙың уҡытыусыһы булыуы ғына ла аңлағанға тос ишара.**

Ғабдулла хәҙрәт Зәки Вәлидиҙең дә рухи етәкселәренең береһе. Былна нимә тип яҙа Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр" китабында: "Ғаиләбеҙҙең иң күп аралашып йәшәгән даирәһе муллалар булды. Уларҙан Стәрлетамаҡта йәшәүсе Нуғай улдары Шәрәфетдин һәм Камал, Һайран ауылынан Әбсәлим һәм уның улы Бикбулат мулла, Йомағужа ауылынан Солтангәрәй, Ҡоншаҡ ауылынан Ғәлләм, Стәрлебаштан Ниғмәтулла һәм Зәйнулла, Уралдың көнсығышынан Муллаҡай ауылынан Сәйет улы Ғабдулла... һәм Троицкиҙан Зәйнулла ишан исемле мәшһүр шәйех иң башта иҫкә төшә. Уларҙың барыһы ла ғәрәпсә, фарсыса белгән, дини ғилемдәре камил, мәҙрәсә тотҡан китап уҡыр заттар. Вәли мулла ла, атайым да яһил, фанатик муллалар менән артыҡ аралашырға тырышманы. Был шәйехтәрҙең иң ғалимы Троицкиҙан Зәйнулла ишан менән Муллаҡайҙан Ғабдулла ине. Бохарала уҡыған Ғабдулла дин ғилемдәрендә бик абруйлы, ғәрәпсә һәм фарсыса шиғырҙар яҙған бер остаз булды. Нәкшбәндиәнең Һиндостандағы "Меджеддид-и һалиди" даирәһенән ине. Быларҙың мәҙрәсәләре Бохара, айырыуса Хорезм мәҙрәсәләре тәртибендә ҡоролдо. Әммә улар Ҡазан тарафтарындағы Ҡышҡар һәм төнтәр муллалары кеүек, шулай уҡ башҡорт илендәге бик күп ишандар кеүек фанатик кешеләр түгел ине. Барыһы ла сәйәсәт хаҡында фекер йөрөтөрлөк аңлы кешеләр булды".

З. Вәлидиҙең "сәйәсәт хаҡында фекер йөрөтөрлөк аңлы кешеләр булды" тигәненә түбәндәге дәлилде миҫалға килтерәм. "Ғабдулла хәҙрәт башҡорттарҙың ер һәм урмандарын әжәрәгә ят милләттәргә күп мөҙҙәткә биреүҙең киләсәк милләт балалары өсөн бик күп ҡимmәткә төшәсәген, йәғни аҙағы насар булыуын белеп аңлатыр булған", - тип яҙа уның шәкерте Н. Мәһәҙиев үҙенең "Муллаҡай" исемле китабында.

Хәҙер Ғабдулла Сәйет хәҙрәттең тормош юлына туҡталайыҡ.

Ырымбур виләйәте Орскиға мансүп 2-се Бөрйән улысы Муллаҡай ҡарйаһында башҡорт тайфаһы Нурмөхәмәт исемле кемсәнә үҙенең Сәитбаттал исемле улын Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ мазафаты Стәрлебаш ҡарйаһы мәшһүр мөҙәрис Ниғмәтулла хәҙрәт мәҙрәсәһенә тапшыра. Сәйетбаттал бик зирәк, һәр фәндә маһир булған өсөн хәҙрәт Ниғмәтулла ҡулъяҙма китаптарын хәлифәнән (Сәйет хәлифә) ҡаратып үтмәйенсә файҙаланмай торған булған, тип риүәйәт итәләр.

Сәйетбаттал хәлифә Стәрлебаш ҡарйаһында Тойғон исемле кешенең Шәмсийаһиан исемле ҡыҙына никахланып, унан 1836 йылда бер улы тыуып, Ғабдулла тип исем ҡушалар. Сәйетбаттал хәлифә күп йылдар дәрес менән шөғөлләнгән, шәкерттәр уҡытҡан. Тимәк, ул замананың уҡымышлы кешеләренең береһе. Ләкин, ни хәл итәһең, тәбиғәттең үҙ ҡанундары бар - 1847 йылда вафат була. Улы Ғабдулла 11 йәшендә етем ҡала. Элек исемдәрҙең алдына "Ғәбде" ялғауын ҡушыу бик сауаплы эш һаналған, шуның өсөн дә өлкән йәштәге кешеләрҙең исеме Бәбделварис, Ғәбделмәтин, Ғәбделғафур, Ғәбделғата булған.

Ғабдулланы әсәһе менән бер туған Әфләтүн Тойғон улы Стәрлебаш ҡарйаһына алып ҡайтып, бик дәрәжәле мөҙәристәр ҡулына уҡырға бирә. Унда ул 12 йыл уҡый. "Сәләм вә ғаҡаид-эл тафтаз"ды һәм тузих китаптарын үҙе яҙып, мәшһүр Зәки Шәмсетдин ибн Йәрмөхәмәт әфәндене уҡыған. Бик зирәк, һәләтле кеше булыуы арҡаһында уны 1859 йылда Бохараи шәрефкә уҡырға ебәрәләр. Бохарала уҡыған ваҡытта ҙур-ҙур шәйехтәр менән аралаша, ғилем серҙәренә төшөнә, үҙе лә күп кенә хеҙмәттәр яҙа. Бохарала 11 йыл уҡығандан һуң, 1870 йылда, аҫыл ватаны Муллаҡайға ҡайта.

Ауылда Ғабдулланың атаһы тотҡан мәҙрәсә була, ә инде яңы типтағы, З.Вәлиди әҫәрендә иҫкә алынған мәҙрәсә, Ғабдулла Сәйет мәҙрәсәһе 1870 йылда һалына. Ғабдулла хәҙрәт Муллаҡайға ҡайтҡас, 34 йәшендә, имамлыҡҡа имтихан биреп, имам-хатип һәм мөҙәрислек дәрәжәһенә ирешә.

Шул уҡ 1871 йылда мәзкүр волоста Иҫәнбәт ҡарйаһы имам Ҡотлозаман Байбулдвтың Мәймүнә исемле ҡыҙына никахланып, унан ике улы һәм өс ҡыҙы тыуа. Оло улы Мирзаһиһт, икенсеһе Мөхәмәтәнүәр ине. Мөхәмәтәнүәр бабай (1886-1988 йылдарҙа йәшәгән) ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем халыҡ файҙаһына эшләп, гел изгелек өҫтөндә ултырҙы: уға илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән хисапһыҙ кешеләр килеп, дауаланып, сәләмәтләнеп ҡайталар ине. Алтындың ҡулда барҙа ҡәҙере юҡ, тигәндәй, тере тарихты файҙаланмай ҡалғанбыҙ. Атаһы тураһында унан да тура, унан да һәйбәт итеп кем һөйләр ине?!

1875 йылда ахун Мәхмүт Дәүләткирәйев хәҙрәтенең Райхан исемле ҡыҙына никахланып, унан өс улы була: оло улы Мөхәмәтмаҙһар, икенсеһе имам-хатип Сәитәхмәт, өсөнсөһө Мөхәмәтәшрәф.

1890 йылда Бикарыҫлан Собханғолов докторҙың Зөләйха исемле ҡыҙына никахланып, ике улы, өс ҡыҙы була. Бер улы - Мөхәмәтнәжип, икенсеһе - Мирзасалих. Икеһе лә аталарынан бәлиғ булмай ҡалғандар.

Ғабдулла Сәйеткә ике мәртәбә хаж сәфәре насип булып, Ҡәғбә-и-шәрифкә һәм бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи сәләм йәшәгән ерҙәргә зыярат ҡыла. Тәүге хаж сәфәре 1881 йылда була. Юлдаштары 2-се Бөрйән улысы Этҡол ҡарйаһы Ибнәмин Әхмәр улы, Яйыҡбай ҡарйаһы Суфьян Мөхәмәтйәр улы һәм Бөрйән-Таналыҡ улысы Байыш ҡарйаһы имам Аллабирҙе Ҡотлоғужа улы инеләр. Хажға икенсе мәртәбә 1899 йылда бара.

Ғабдулла Сәйеттең арымай-талмай дәрес алып барыуы 44 йыл дауам итә, ҡайһы бер йылдарҙа талиптары 400-гә хәтле барып етә торған булған.

Мәзкүр заттың хәтерен мәңгеләштереү өсөн, йәғни киләсәк быуынға аманат итеп тапшырыу өсөн ихлас йөрөүселәрҙең береһе, уҡытыусы-пенсионер Мөхәмәтсадиҡ улы Мөхәмәтҡамил Аллабирҙин миңә ауылдашы Ғабдулла хәҙрәт тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Йәғәфәров Ғәлиастан ҡарт хәҙрәттәрҙә йорт-ҡура эштәрендә ярҙамсы сифатында йөрөгән. Ул шулай тип һөйләгән: "Бер көндө хәҙрәт: "Аш һалығыҙ, хәҙер бесән алып киләләр", - тине. Беҙ, өйҙәгеләр, ул ниндәй бесән килә икән, бер һүҙ ҙә булманы, өйҙән дә бер кем бесәнгә китмәне, тип аптыраныҡ. Шулай ҙа хәҙрәт ҡушҡас, аш һалып, әҙерләнеп торҙоҡ. Бер аҙҙан һуң, ысынлап та, ҡапҡа алдына бөтөнләй таныш булмаған кешеләр бесән тейәп килеп туҡтаны, урамға уҡ индереп бушаттылар. Баҡтиһәң, кемдер хәҙрәттең ҡырҙа ултырған бесәнен ошо кешеләргә һатҡан икән. Былар үҙебеҙгә алып ҡайтып барабыҙ, тип хис иткәндәр. "Юл күренмәй, ҡайҙа барғаныбыҙҙы ла белмәйбеҙ, күҙ алды томаланып тик тора", - тип яуап биргәндәр.

Ғабдулла хәҙрәт халыҡ медицинаһын ныҡ үҫтергән, үләндәрҙе оҫта файҙаланған, ошо һөнәргә, йәғни ҡайһы үләнде ниндәй сирҙе дауалағанда ҡулланырға кәрәк икәнлекте, шәкерттәргә лә өйрәткән.

Медицина - кешенең аҡыл, ихтыяр көсөн талап иткән бик ҡатмарлы изге ғилем. Ғабдулла хәҙрәт иң беренселәрҙән булып фәнни медицинаны дин нигеҙенә, йәки, киреһенсә, динде фәнни медицина нигеҙенә ҡорған изге зат. Уның рухының изгелектең юғары нөктәһенә ирешеүе, кеше организмының бөтә нескәлектәрен илаһи көс ярҙамында тойоуы әҙәмгә дөрөҫ диагноз ҡуйыуға һәм уны сәләмәтләндереүгә булышлыҡ иткән.

Ғабдулла хәҙрәт үҙенең мәҙрәсәһендә дин уҡытыу менән бергә, донъяуи фәндәргә ныҡ иғтибар итә, шәкерттәрен төрлө һөнәрҙәргә, әйтәйек, балта оҫталығына ла өйрәтә (ауылда ул төҙөгән өйҙәр әлегә тиклем һаҡланған), тимерселеккә, балсыҡтан төрлө буяуҙар яһауға, шулай уҡ им-том, арбау серҙәренә өйрәтә.

Балсыҡтан төрлө буяуҙар яһарға өйрәткән, тигәнгә ошо миҫалды килтереү бик тә урынлы булыр. Ғабдулла хәҙрәттең ейәнсәре, Әнүәр Сәйетовтың ҡыҙы Зәйтүнә апай түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Атайым Карауанһарайҙы буяу-биҙәү өсөн олатайымдың ысулы менән буяу әҙерләй. Олатайымдың буяуы бер ҙә боҙолмай: ҡояшта ла уңмай, ҡырып та бөтөрөп булмай".



Талиптарының йән сәләмәтлеген генә ҡайғыртмай, ә тән сәләмәтлеген нығытыуға ла нык иғтибар итә Ғабдулла хәҙрәт. Был йәһәттән ул әлдән-әле ат сабыштырыу уйындарын, көрәш, уҡһаҙаҡ ярыштарын ойоштороп, мәргәнлек, оҫталыҡ, тапҡырлыҡ, түҙөмлөлек һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ иткән. Был инде хәҙерге күҙлектән ҡарағанда егеттәрҙе физик яҡтан һаусәләмәт итеп, әрме хеҙмәтенә, ғөмүмән, тормошҡа әҙерләү була.

Ғабдулла Сәйет хәҙрәт үтә принципиаль кеше булған, үҙ халҡын нык яратҡан, милләтенә һүҙ тейҙереүселәргә аяуһыҙ ҡаты булған.

Ғабдулла хәҙрәт 78 йәшендә, 1914 йылдың 31 августа вафат булып, 1 сентябрҙә гүр әйәһе була.

Ғабдулла Сәйет хәҙрәт исемен ил йөрәгенә яҙған бөйөк шәхес, аҡыл эйәһе, ил атаһы. Уның тураһында ғалимдарҙың әйтә торған һүҙҙәре күп әле. Оло шәхестең хеҙмәттәрен табыу, тасуирлау, үҙ телебеҙгә тәржемә итеү - беҙҙең мөҡәддәс бурыс.

**Гөлнур ЛОҠМАНОВА.**

**Әйткәндәй...**
**15 августа 10 сәғәттә Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында Ғабдулла Сәйет хәҙрәт рухына зыярат ҡылыу ойоштороla.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# КИРБЕС

Борон заманда йәшәгән, ти, Морат исемле ярлы кеше. Ул Аллаһҡа нык ышанған һәм бик әҙәпле булған. Бер ваҡыт өй стенаһын ремонтлағанда ул кирбес формаһындағы алтын тапҡан. Шатлығының сиге булмаған уның.

"Ниһайәт, ярлылыҡтан ҡотолдом! Үҙемә ҙур йорт төҙөп ултыртасаҡмын, иҙәндәре ап-аҡ мәрмәрҙән буласаҡ... Баҡсаһында матур гөл-сәскәләр үҫеп, күҙҙең яуын алыр. Төрлө емеш биргән ағастар ултыртырмын, уларҙың ботаҡтарында матур -матур ҡоштар һайрап ултырыр, бар ғәләмгә моң таратыр",- тигән татлы уйҙар менән Морат йоҡоға сумған. Икенсе көнөнә төшөндә тағы ла матурыраҡ нимәләр күргән: йәнәһе, уның өйө тулы хеҙмәткәрҙәр... Көн һайын шулай хыял диңгеҙендә йөҙөп, Морат бар донъяһын онота: ашамай ҙа, намаҙҙы ла онота, барлыҡ сауаптарҙы биргән Аллаһы Тәғәлә хаҡына рәхмәт сүрәләре лә уҡымай.

Бер ваҡыт ҡала буйлап йөрөгәндә Морат зыярат ситендә кирбес һуҡҡан бер кешене осрата. Был кеше ерҙән балсыҡ ҡаҙып алып, уны һыу менән ҡушып, кирбес өсөн формаларға һалып тора икән. Ике ир һөйләшеп китә һәм эшсе Моратҡа ныҡлы кирбестәр эшләүҙең серен аса:

- Зыяраттағы балсыҡтан эшләнгән кирбестәр нығыраҡ була һәм оҙаҡ хеҙмәт итә.

Был һүҙҙәр Морат өсөн аяҙ көндә күк күкрәү кеүек яңғырай.

- Эх, ахмаҡ! Һинең ҡалдыҡтарыңдан да бит кирбес эшләрҙәр, килер шул көн! Ҡулыңа алтын килеп эләккәйне, һин башыңды юғалттың. Намаҙҙы ла, сүрәләрҙе лә оноттоң. Аҙым һайын һин үлемгә яҡынырак була бараһың. Хыялдарыңды онот! Аллаһы Тәғәлә ебәргән сауапты дөрөҫ ҡуллан, теләһә нимәгә әрәм итмә!

Шул ваҡыт көндөҙгө намаҙға саҡырыу ишетелә. Морат күп уйлап тормайынса, ихлас йылмайып, мәсет яғына юллана...

Морат Бәйғәмбәрҙең: "Ухуд тауындай алтыным булһа, уның миндә өс көндән артыҡ тороуын теләмәҫ инем", - тигән хәҙисен тәүҙән үк белһә икән дә бит...

*✓ Анатолий Чубайс бына нисек фекер йөрөттө: "Беҙ тәүҙә иҡтисадты яңынан ҡорасаҡбыҙ, ә мәғариф һәм мәҙәниәт әлегә көтөп торор". Кешенең йәшәү кимәлен күтәрмәйенсә, рухи хәләтен үҙгәртмәйенсә, иҡтисадты күтәреп буламы һуң?*

# Фән вә дин – йәки Донъяуи һәм дини

**Йәмғиәт процестары бер өҙлөкһөҙ бара, әммә һәр дәүер уларҙың йөкмәткеһен үҙгәртә, яңырта. Был мәғрифәт өлкәһендә лә шулай. Бөгөн беҙҙе донъяуи белем биреүҙә диндәр менән мөмкин булған бәйләнеш мәсьәләләре, дәүләт мағариф системаһында шәхес үҫеше өсөн үтә йоғонтоло булған дини-мәҙәни компонентты файҙаланыу проблемалары ла ҡыҙыҡһындыра. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев та илебеҙҙең төп 4 конфессияһы етәкселәре менән осрашыу барышында ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатып, мәктәптәрҙә диндәр тарихы йәиһә дини һәм донъяуи мәҙәниәт дәрестәрен индереү зарурлығы булыуын белдерҙе. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры, педагогия фәндәре докторы, профессор Рәил ӘСӘҘУЛЛИН һәм Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй Ислам университеты ректоры кәңәшсеһе, тарих фәндәре докторы, профессор Риф ЯҠУПОВ менән әңгәмәбеҙ тап ошо юҫыҡта барҙы. Уларҙың дин һәм йәмғиәт үҫеше, донъяуи һәм дини мәғрифәттең һәм мәҙәниәттең берлеге хаҡындағы фәлсәфәүи уй-фекерҙәре һеҙҙә лә ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайбыҙ.**

**▸ Киләсәккә күҙ һалам, тиһәң, үткәндәргә бағыу фарыз. 1917 йылда башланған трагик ваҡиғаларға тиклем Рәсәйҙә донъяуи һәм дини белем биреү ҡуша алып барылып, дини тәрбиә халыҡ мәғарифы өлкәһендәге дәүләт сәйәсәтенең төп принциптарының береһе була. Урыҫтар һәм башҡа христиан динлеләр өсөн сиркәү-приход мәктәптәре мәғрифәт усаҡтарына әйләнһә, мосолман халыҡтары мөхитендә дин әһелдәре асҡан мәҙрәсәләр һәм мәктәптәр абруй ҡаҙана. Ул дәүерҙә донъяуи белем биреү менән дини-мәҙәни тәрбиәнең тығыҙ бәйләнешен нисек аңлатып була?**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Был һорауға тулы һәм аныҡ яуап табыуы еңел түгел, тип уйлайым. Әлеге көндә лә ошо һорау тәрән фекерҙән алдараҡ хис-кисерештәрҙе, эмоцияларҙы ҡуҙғыта, шуның өсөн был осраҡта объектив булыуы бик ҡыйын. Әлбиттә, ҡасандыр бер ваҡыт был мәсьәләгә лә асыҡлыҡ индерелеп, тәрән интеллектуаль анализ һәм рефлексия ерлегендә объектив ҡараш барлыҡҡа килер.

Дин - беҙҙең тарихыбыҙҙың һәм мәҙәниәтебеҙҙең айырылғыһыҙ өлөшө, һәм ул йәмғиәттең, уның үҙ аңының барлыҡҡа килеүенә, үҫешенә ҙур йоғонто яһай. Әңгәмәбеҙҙең башында уҡ һеҙ мәғрифәттең һәм дини мәҙәниәттең берлегенә иғтибар иттегеҙ: белем биреү һәм тәрбиә өлкәһен халыҡ мәҙәниәтенән, уның борондан килгән ғөрөф-ғәҙәттәренән башҡа ҡарап булмай, ә динде халыҡ мәҙәниәтенең квинтэссенцияһы, тип тә нарыҡлап була. Кешеләрҙең донъяға ҡарашы дини тәғлимәттә дөйөмләштерелһә, дин институттары ошо уртаҡ мәҙәниәтте ысынбарлыҡта ғәмәлгә ашырыуҙы, хәҙергесә әйткәндә, технологик яҡтан да тәьмин итә.

Шәхесте өлөшләп тәрбиәләп булмай: әхлаҡ һәм аҡыл, хис-кисерештәр һәм фекерҙәр, аң һәм ғәмәли торош, рациональ һәм иррациональ (аңдан тыш) нәмәләр кешенең ғәжәйеп бер бөтөнлөгөн хасил итә. Динде кешене бар бөтөнлөгөндә тәрбиәләй алыусы махсус педагогика итеп тә ҡарап була, тик ул уға ышаныу-инаныстар, донъяны образлы итеп һүрәтләү аша йоғонто яһай. Дин кешенең хис-кисерештәре ерлегендә үҙенең әхлаҡи-мәҙәни потенциалын ғәмәлгә ашыра ла инде.

Йәмғиәт үҫеше барышында кешеләрҙә үҙ йәшәйешен инаныстар аша ғына түгел, ә аң даирәһе аша танып белеү зарурлығы барлыҡҡа килә. Үҫешә барған фән өлкәһе диндән ситләшә башлай. Тап бына ошо ваҡыттан шуға тиклем бер бөтөн булған белем биреү һәм тәрбиә ике яҡҡа тармаҡланып китә: донъяуи белем-тәрбиә биреү өҫтөнлөк ала барып, дини тәрбиә өлкәһенән айырылып китә.

**▸ Һеҙ динде мәғрифәт, белем-тәрбиә биреүҙең тәү сығанаҡтарының береһе сифатында ҡарайһығыҙмы?**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Тап шулай. Әлбиттә, иң тәүҙә кешелек көнкүреш тәжрибәһенә, ғәмәли ерлектә тыуған аҡылына таяна. Йәмғиәт процестары кешене мотлаҡ рәүештә дини мәҙәниәткә алып килә. Шуның өсөн диндәрҙе "мәҙәниләштерелгән юғары мәҙәниәт", тип нарыҡлау ҙа раҫ. Мифология ла, дини тәғлимәт тә кешенең эмоциональ-әхлаҡи кисерештәренә ныҡ иғтибар бирә, бында уның мәҙәнилеге, башлыса, аң менән түгел, инаныстары аша формалаша. Шуға күрә мин үҙемдең студенттарыма "Педагогик антропология" курсы буйынса лекциялар уҡығанда, гуманитар өлкә проблемаларын хәл итеү өсөн бөгөнгө фән динде лә йәлеп итергә тейеш, тип аңлатам. Кеше шәхесе шул тиклем ҡатмарлы, уны рациональ юл менән, фәнни ысулдар аша ғына тулыһынса асып-өйрәнеп тә, маҡсатҡа ярашлы тәрбиәләп тә булмаясаҡ.



Тәбиғәттәме, йәмғиәттәме, һәр бер процестың билдәле бер этаптары була. Тәү осорҙа донъяуи һәм дини мәғрифәт бер бөтөнлөктө тәшкил итһә, ул үҙ үҫешендә тармаҡланып китеп, дифференциациялы рәүештә йәшәй башлай. Әммә ҡасан да булһа был ике тармаҡ араһында интеграция башланасаҡ, сөнки улар кешелектең берҙәм мәҙәниәтен булдыра. Был - йәмғиәт аңының алыштырғыһыҙ ҡануны. Беҙ, моғайын, тарихи үҫешебеҙҙә фән һәм диндең ҡайтанан берләшә башлаған осоронда йәшәйбеҙҙер. Улар, бер-береһен тулыландырып, кешелек мәҙәниәтенең юғала барған берҙәмлеген тергеҙә ала. Әлбиттә, ошо заман кимәлендәге берҙәмлеккә өлгәшкәндән һуң да фән үҙ юлынан, дин үҙ тәриҡәтенән яҙмаясаҡ. Алыҫ киләсәктә улар тағы ла юғарыраҡ кимәлдә интеграцияға инеп, һәр айырым шәхестең һәм тотош кешелектең ҡаҡшамаҫ һәм тарҡалмаҫ бөтөнлөгөн булдырыр, тип фараз итергә була. Был үҫеш ҡанундарын инҡар итмәй.

**▸ Дини тәғлимәт һәм донъяуи фәндәр бәйләнеше асылын нисек аңларға була?**

**Р. ЯҠУПОВ:** Белеүегеҙсә, совет дәүерендә беҙ диалектик һәм тарихи материализм методологияһына ярашлы фекер йөрөттөк. Әлбиттә, диалектик материализм, анығыраҡ әйткәндә, диалектика танып белеү инструменты була ала, бында һис бер шиккә урын юҡ. Минә, донъяуи белем алып, байтаҡ йылдар буйы ғалим-ғөләмә араһында эшләргә насип булған кешегә, танып белеүҙең рациональ, йәки аң аша башҡарылған юлдары яҡшы таныш. Шул уҡ ваҡытта фекерләүҙә, аң даирәһендә, танып белеүҙә иррациональ булған сығанаҡтар йоғонтоһон өйрәнеп, шуға илтифат иткәс, бына ошо ике айырым өлкә буйынса тупланған тәжрибәм билдәле бер һығымталар яһауға ерлек бирә.

Башҡа диндәрҙәге кеүек, Исламда ла белемде донъяуи һәм дини тип нарыҡлап, ҡапма-ҡаршы ҡуйыу юҡ. Белем ике төрлө була алмай, был бүленеш - яһалма. Фәндә һәм диндә белемдең дөйөм берлеге булып, уны табыу һәм ҡулланыуҙың айырымлыҡтарын ғына иҫәпкә алырға кәрәк. Дини белем Хоҙай серенең Илаһи асылышы аша төшөрөлөп, шуға инаныуҙы ғына талап итһә, фәнни белем рациональ юл менән раҫланмайынса, уның объективлығы билдәләнмәйенсә, ҡабул ителмәй. Һүҙ донъяуи һәм дини фәндәрҙең айырымлығы тураһында түгел, ә танып белеү ысулдарының төрлөсә булыуы хаҡында бара.

Йәнә бына нимәгә иғтибар итеү фарыз: донъяуи фәндәрҙә һәм диндә танып белеү объекты айырымланған. Дин, башлыса, кеше һәм уның асылын белеүгә ҡоролһа, тәүҙәрәк дин аша билдәле булған белемдәрҙе рациональ өйрәнеүгә йүнәлтелгән фәндәр кешенең үҙенән алыҫлашҡандан-алыҫлаша бара. Мин Рәсәйҙең беренсе профессиональ тарихсыһы, XVIII быуатта йәшәгән Василий Татищевтың "Разговор двух приятелей о пользе наук и училищ" тигән әҫәрендә теркәлгән һүҙҙәргә иғтибар итеүегеҙҙе теләр инем. "Фәндә төп нәмә - кешенең үҙен-үҙе аңлай алыуына өлгәшеү", - тигән ул. Бына ошо фекер хәҙерге ваҡытта онотолдо, фән ғәмәли юҫыҡты хуп күреп, кешене аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү, ғүмерен оҙайтыу, уға мөмкин тиклем уңайлыраҡ матди шарттар булдырыу кеүек проблемаларҙы йәиһә теге йәки был өлкәлә күберәк табыш алыу мөмкинлектәрен өйрәнеүҙе өҫтөн күрә башланы. Хәҙерге фәндәр "Кем һуң ул кеше, уның асылы ниҙә, ул ҡайһы юҫыҡҡа йүнәлеш тота, кешелек рухиәтенең киләсәге нисек буласаҡ?" һәм башҡа ошондай һорауҙар менән бөтөнләйгә тиерлек ҡыҙыҡһынмай башланы. Ә бит тап ошо һорауҙар бөгөн дә донъя диндәре өсөн иң әһәмиәтлеләрҙән һанала.

Әле әйтелгәндәр донъяуи белем биреү барышында дини тәғлимәтте файҙаланыу, һис булмаһа, диндәр тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәтеү мәсьәләһененең өлгөрөп еткәнлегенә дәлил. ВУЗ системаһында диндәр тарихы буйынса бер аҙ мәғлүмәт бирелә, әммә был да ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә түгел әле.

*Мин Рәсәйҙең беренсе профессиональ тарихсыһы, XVIII быуатта йәшәгән Василий Татищевтың "Разговор двух приятелей о пользе наук и училищ" тигән әҫәрендә теркәлгән һүҙҙәргә иғтибар итеүегеҙҙе теләр инем. "Фәндә төп нәмә - кешенең үҙен-үҙе аңлай алыуына өлгәшеү", - тигән ул. Бына ошо фекер хәҙерге ваҡытта онотолдо, фән ғәмәли юҫыҡты хуп күреп, кешене аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү, ғүмерен оҙайтыу, уға мөмкин тиклем уңайлыраҡ матди шарттар булдырыу кеүек проблемаларҙы йәиһә теге йәки был өлкәлә күберәк табыш алыу мөмкинлектәрен өйрәнеүҙе өҫтөн күрә башланы.*

**▸ Һеҙ был предметты уҡытыу формаль рәүештә башҡарыла, тип әйтергә теләйһегеҙме?**

**Р. ЯҠУПОВ:** Бөтә вуздарҙа ла шулайҙыр, тип әйтмәһәк тә, башлыса, мәғариф системаһында электән килгән формализм өҫтөнлөк алыуын инҡар итеп булмай. Бүтән фәндәрҙе уҡытҡанда был түҙерлек булһа ла, дин тарихын өйрәткәндә быға юл ҡуйырға ярамай.

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Донъяуи фәндәр объектив хәҡиҡәтте аса алмай, тигән фекер менән килешеп булмай. Фән хәҡиҡәтте аса алмаһа, беҙ бөгөн космосҡа ла сыға алмаҫ, телевизор ҙа ҡарамаҫ, күп техник процестар менән идара итә алмаҫ инек. Мин белемде лә бер бөтөн тип әйтмәҫ инем: ысынбарлыҡ берҙәм һәм бөтөн булһа ла, уны сағылдырған белемде бер ҡалыпҡа һалып булмай. Фәнни һәм дини белем бер үк тормош күренештәрен ике төрлө асыу ысулы һөҙөмтәһендә туплана. Дини белем нигеҙендә инаныстар ятһа, фән тик аң аша табылған белемгә таяна. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, донъяны танып белеү менән мауыҡҡан кеше үҙен дә тикшеренеү объекты итеп ҡарамайынса, фән юлында үҙ-үҙенән ситләшкән. Тап шул сикләнгәнлек һөҙөмтәһендә бөгөн беҙгә экологик, атом һәм кешелек үҙлеген юғалтыу һәләкәте хәүефе янай.

**▸ Заманса белемгә, юғары аңға эйә булһа ла, кешенең үҙ асылын юғалтыуы мөмкин, тип уйлайһығыҙмы?**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Тап шулай. Хәтерегеҙҙәлер, либераль реформалар башланғас, Анатолий Чубайс бына нисек фекер йөрөттө: "Беҙ тәүҙә иҡтисадты яңынан ҡорасаҡбыҙ, ә мәғариф һәм мәҙәниәт әлегә көтөп торор". Кешенең үҙен, уның йәшәү кимәлен күтәрмәйенсә, рухи хәләтен үҙгәртмәйенсә, иҡтисадты күтәреп буламы һуң? Реформаторҙарҙы быңдай һорауҙар ҡыҙыҡһындырманы. Беҙҙең етәкселәребеҙ әлегә тиклем ил иҡтисадын рациональ юл менән генә хәл итергә уйлай, ә кешенең көндәлек матди һәм рухи ихтыяждары икенсе планда ҡала. Тап шуның өсөн беҙ башҡа илдәрҙән артта ҡалабыҙ ҙа инде. Был яңы бинаны уның нигеҙенән түгел, башынан төҙөй башлауға тиң.

**▸ Цивилизациялы илдәрҙә, шул иҫәптән, Рәсәйҙә лә, оҙайлы тарихи ваҡыт арауығында донъяуи һәм дини белем биреүҙә ҡапма-ҡаршылыҡтар булмай, тиерлек. Бәлки, ул замандарҙа был тарихи зарурлыҡтың үҙенсәлекле сағылышы булғандыр, сөнки донъяуи һәм дини ҡараштар берҙәмлеге барса диндәргә лә хас.**

**Р. ЯҠУПОВ:** Хәҙерге заман күҙлегенән диндәрҙе айырып, бүлгесләп ҡарау дөрөҫ түгел. Айырым кешеләр үҙҙәренең теге йәки был дингә ҡарағанын белдерһә лә, улар барыһы ла бер төптән сыҡҡан. Донъя диндәренең бәйләнешен сағылдырып, уларҙы бер-береһенә яҡынайтыусы фактор булған төшөнсә - Аллаһтың берлеге. Был фекер Иб-

раһим бәйғәмбәр заманынан башлап, барса диндәрҙә лә танылыу тапҡан. Белем биреү өлкәһендә лә беҙ ошондай уҡ уртаҡ ҡараштарҙы күрәбеҙ. Һин ниндәйҙер белемгә эйә булғанһың икән, уны башҡаларға еткерергә бурыслыһың.

**▸ Исламда белем-тәрбиә мәсьәләһенә айырыуса ҙур иғтибар бүленә, һәм ул һәр мосолманды туранан-тура белем алырға өндәп тора бит.**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Эйе, Ислам донъяһында белем барыһынан да өҫтөнөрәк ҡуйыла, белемгә өлгәшеү Әҙәм балаһының төп бурыстарының береһе һанала.

**Р. ЯҠУПОВ:** Хәҙер белемһеҙ, грамотаһыҙ мосолманды мосолман тип тә атап булмай, тигән ҡараш бар. Мөхәммәт ғәләйһиссәләмгә иң беренсе төшөрөлгән Аллаһ бойороғо "Иҡра!" булып, "Уҡы" тигәнде аңлата, изге кешегә тура килешлелек принциптарын ғәмәлгә ашырабыҙ, тиһәк, мәғарифҡа дини мәҙәниәттең ҡайтарылыуын тик хуплап ҡына ҡаршыларға кәрәктер.

**▸ Дидактика ғилеменә нигеҙ һалыусы чех педагогы Ян Амос Коменский XVII быуатта уҡ тәбиғәткә ярашлылыҡ принцибын индереп, үҫеп килеүсе быуындарға белем һәм тәрбиә биреүҙә тәбиғи һәм ижтимағи ысулдарҙы берләштереү мәсьәләһен ҡуйған. Бында әле тикшерелгән проблеманың башланғысы күренә һымаҡ...**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Һеҙ ошо бөйөк педагогтың "Дидактиканың алтын ҡануны" тип аталған ҡағиҙәһе тураһында һүҙ алып бараһығыҙ. Эйе, ул донъяны танып белеүҙә кешенең барлыҡ һиҙеүтойоу ағзаларын әүҙемләштебергә ҡәҙимге мир ҡағиҙәләренә ярашлы йәшәй.

**▸ Коменский һәм Аҡмулланы иҫкә алып, беҙ үҙебеҙҙең цивилизацияға хас булған бер хәҡиҡәткә иғтибар иттек: күрәһең, руханиҙарыбыҙ мәғрифәтселек эшен үҙҙәренең иң төп бурыстарының береһе итеп һанаған.**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Улай ғына ла түгел, Аҡмулла һымаҡ руханиҙар фәлсәфәүи һығымталарын, өгөт-нәсихәтен белемһеҙ халҡының күңеленә еткерә алырлыҡ ысул-саралар таба алған. Тап шул маҡсатта Аҡмулла ауылдан-ауылға йөрөп, йыйынбәйгеләрҙә халыҡҡа үҙе сығарған шиғыр-йырҙары аша мөрәжәғәт иткән. Был уның кешеләрҙең тормош психологияһын яҡшы белеүен дә күрһәтә. Шулай булғас, белем төрлө сифатта булған кеүек, уны халыҡҡа еткереү юлнеүҙәр ниндәй маҡсатта башҡарыла, улар кешелекте ҡайҙа алып бара һ.б. Тимәк, философия ла этиканан башҡа йәшәй алмай, ә этика донъяға дини ҡараштың, дини-рухи белем биреүҙең төп йөкмәткеһен тәшкил итә. Тик шундай белемде генә алтындай саф белем, тип нарыҡлап булалыр: ул кешегә иң кәрәкле, иң файҙалы нәмәләр иҫәбендә тора, уға хеҙмәт итә. Ислам да кешегә шундай белемде бирә ала. Тик Ислам белемен өҫтән-мөҫтән генә өйрәнеп, уны аңлап булмаясаҡ. Ислам белемен кеше йөрәге менән ҡабул итергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дини этиканы һанға һуҡмау фән өлкәһендә лә билдәле бер сиктәрҙе уҙып китеп, тыйылған һәм зыянлы ғәмәлдәргә алып килә. Ҡөрьән әҙәм балаһын тап ана шундай сиктәрҙе уҙыуҙан һаҡлап тора.

# БЕЛЕМ АСҠЫСТАРЫ,

## мәҙәниәт берлеге тураһында

"Ҡөрьән" һүҙе лә "Уҡыу", йәғни белем алыу төшөнсәһенә тура килә. Зәкәт өсөн мосолман килеменең ҡырҡтан бер өлөшөн бирһә, "фикх" ҡағиҙәһенә ярашлы, алған белемен тулыһынса башҡаларға тапшырырға бурыслы. Ҡабатлап әйтәм, был кешенең бар булған белеменә ҡағыла, сөнки уны донъяуи һәм дини өлөштәргә бүлеп ҡарау ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, XX быуатта танып белеүҙең тәбиғилеге юғалып, уның асылына хилаф ҡылынды.

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Әммә белемдең әлегә тиклем ошолай бүленә килеүенең тарихи, объектив сәбәптәре бар. Танып белеүҙең тәү дәүерҙәрендә белемдең бер ниндәй ҙә бүленеше булмай. Әммә белем даирәһе тәрәнәйә һәм киңәйә барған һайын, ул айырымлана, айырым тармаҡтарға, фән өлкәләренә бүленә. Бәғзе фәндәр кешене һәм ул йәшәгән мөхитте тик аң-фекер позицияларынан өйрәнһә, башҡалары уны йән феномены рәүешендә аңлата. Рус философы Бердяев әйткәнсә, кеше тураһындағы фәндәрҙә белемдең дифференциацияға дусар булыуы шул тиклем көсәйә, был хатта фәндән кешенең үҙен сығарып ташлауға килтереүе мөмкин. Һәр хәлдә лә, ошо яңы осорҙа кеше мәҙәниәт һәм рухиәт критерийҙарына ярашлы өйрәнелмәй.

Фән әһелдәре, бигерәк тә педагогика өлкәһе ғалимдары, танып белеү ғәмәлиәтенең үҙәгендә кешенең үҙе торғанын онотмаҫҡа тейеш. Донъяны танып белеүсе кеше тәбиғи һәм ижтимағи мөхиткә яраҡлашыу йәиһә уның менән идара итеү кеүек маҡсаттар ҡуя башлай. Шуға күрә уға йәшәйештә рациональ, донъяуи белем менән бер рәттән, рухи-мәҙәни ҡиммәттәрҙе үҙләштереү фарыз. Ә был донъяуи һәм дини белемдең ҡайтанан берләшеүен, билдәле кимәлдә интеграцияланыуын талап итә. Ғөмүмән, йәмғиәтебеҙҙә кешегә ярашлылыҡ, реүҙе талап итә. Беҙ хәҙер был турала онотоп та бөттөк инде. Коменский бер үк ваҡытта белем биреүҙе ойоштороуҙың өр-яңы технологияһын булдырыуға өлгәшә. Уны белем биреү йөкмәткеһе артыҡ ҡыҙыҡһындырмай, әммә ул барыһын да бөтә нәмәгә лә өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Иғтибар итегеҙ: Ян Коменский үҙе рухани булып, уҡытыусылыҡҡа дин әһеле булараҡ килә. Ярай, ул быуаттар төпкөлөндә ҡалған шәхес. Ә беҙҙең Аҡмуллабыҙ? Ул да мулла булған бит, әммә был уға философ һәм алдынғы ҡарашлы мәғрифәтсе булырға ҡамасаулыҡ итмәгән. Аҡмулла муллаларҙан көлгән, тиҙәр. Әммә ул муллаларҙан түгел, ә мулла вазифаһындағы наҙан кешеләрҙән әсе көлгән. Үҙ халҡын аң-белемгә саҡырып, ябай кешеләргә үҙ күңеленән, зиһененән шиғри формаға һалынған яҡтылыҡ нурҙарын таратып йөрөүсе аҡтан-аҡ, пактан-пак мулла булған ул. Аҡ йәнле мәғрифәтсе мулла айырым кешеләрҙең генә түгел, ә барса халыҡтың етеш һәм мул, әммә мәғрифәтле вә әхлаҡлы тормош ҡора алыуы хаҡында хыял йөрөткән.

Ислам дине мосолмандарҙан үҙ донъяларын дөрөҫ ҡора белеүҙе талап итә һәм шуға өйрәтә лә. Ислам әҙәм балаһының тормош итеүен донъяуи һәм дини яҡҡа бүлеп ҡарамай, хатта дин әһелдәре лә, рухани бурыстарын үтәгәндән һуң, башҡалар менән дарының да төрлөсә булыуы яҡшыраҡтыр. Күренекле антрополог Леви-Стросс был хәҡиҡәтте бына нисек аңлата: мифологик аң заманса абстракт фекерләүҙән түбәнерәк һәм көсһөҙөрәк түгел, ул фекер туплауҙың икенсе төрлө, башҡаса башҡарыла торған ысулы. Был бөтөнләй икенсе төрлө белемдәрҙең булыуын да иҫбатлай.

**Р. ЯҠУПОВ:** Мин, мөхитебеҙҙә Ислам мәғрифәтен тергеҙеү менән туранан-тура шөғөлләнгән мосолмандарҙың береһе булараҡ, Ислам барлыҡҡа килгән дәүерҙән хәҙерге заманға тиклем дини-рухи белем биреү тарихы, уның донъяны танып белеүҙәге роле менән ҡыҙыҡһынам. Бөтә ғәмәлдәрҙең асылы алға ҡуйылған маҡсатталыр. Бына Жюль Верн геройы Луи Паганель планетаның teләһә ниндәй нөктәһендәге күбәләкте тотоп, исемләп әйтә алған. Уны иҫ киткес биолог-географ, тип атап булыр ине. Бында ла бер һорау урынлы: был белем уға ниндәй маҡсатта кәрәк булған һуң? Йәшәйеш фәлсәфәһе кешеләр ҡуйған маҡсатҡа ярашлы формалаша.

Философиянан башҡа фән үле белемдәр йыйынтығына әйләнә. Заманса танып белеү һәр ғалимдың билдәле кимәлдә философ булыуын талап итә. Төрлө өлкәләрҙә ғалим булып танылғандарҙың күпмеһе философ икән? Бик һирәктәрелер. Тик философия ғына ғалим алдында мәңгелек һорауҙарҙы ҡуя: һинең ғилемеңдән кешегә ниндәй файҙа (йәки зыян) бар, ғилми тикшереүҙәр

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Кеше һәм йәмғиәт, фән һәм дин мәсьәләләрен асыҡлағанда Кант философияһына таяныуығыҙ ысынбарлыҡҡа объектив баһа бирә алыу мөмкинлеген биргән фекерҙәргә юл асалыр, тип уйлайым.



**Р. ЯҠУПОВ:** Миңә Канттың бер фекере ныҡ оҡшай. "Ике нәмә мине айырыуса ғәжәпкә ҡалдыра: Йыһан һәм үҙемдәге ҡанун". Был үҙе үк кешеләге Илаһи асылға ишара бит.

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Донъя яралыуҙан алып кешелек иғтибары үҙәгендә булған фәлсәфәүи проблемалар хаҡында яҙған ошо философтың һуңғы хеҙмәте "Педагогик антропология тәжрибәһе" тип атала. Был әҫәр уның йән асылынан яралғандыр, тип баһалау дөрөҫ булыр. Кант ошо әҫәрендә үҙе "категорик императив" тип атап, кешене тормош маҡсаты итеп иғлан иткән философик ҡанунды ғәмәлгә ашырыу юлдарын барлай. Әгәр беҙҙең йәмғиәтебеҙҙә ошо ҡанун үтәлмәй икән, әгәр кеше тик килем алыу, байлыҡ туплау сараһына әйләндерелә икән - был дин тыйған әлеге сикте үтеү тигән һүҙ бит. Был - кешелектең йәшәйеш ҡанундарын боҙоу. Дин барыһын да кешенең саф асылына ҡайтарырға ынтылыуы менән әһәмиәтле.

**▸ Дини философия ла кешелектең үҙен-үҙе һаҡлай һәм үҫтерә алыу маҡсатына хеҙмәт итә түгелме һуң?**

**Р. ӘСӘҘУЛЛИН:** Был гуманист философтар ҡарашына тап килә. Әҫәрҙәрендә әхлаҡһыҙлыҡтары арҡаһында иң түбән һәм бысраҡ мөхиткә юлыҡҡан кешеләр тормошон һүрәтләгән Ф. М. Достоевский ҙа: "Әгәр Аллаһ юҡ икән, уны уйлап сығарырға кәрәк", - тимәҫ ине. Ерҙә йәшәгәндәрҙең барыһы өсөн дә бер хаҡ Хөкөмдарҙың булыуы фарыз. Ул һеҙгә лә, миңә лә, башҡаларға ла берҙәй кәрәк. Шулай булмаһа, үрҙә әйтелгән сикте үтеп китеүселәр күбәйгәндән-күбәйә барасаҡ. Минеңсә, кешенең шәхси хөкөмдары - уның выжданы, ул кеше йәнендәге Аллаһ сағылышы. Әммә кеше мөнәсәбәттәренән өҫтәрәк, юғарыраҡ торған Рухи Көстөң дә булыуы бик кәрәк.

**▸ Үҙ граждандарына сифатлы белем бирергә ынтылыусы дәүләт системаһы, мәғарифҡа дини мәҙәниәтте ҡайтармайынса, ошо маҡсатҡа өлгәшә алырмы һуң?**

**Р. ЯҠУПОВ:** Белем сифатын күтәреүҙә дини мәҙәниәтте мөһим фактор сифатында ҡарау фарыз. Әгәр бөгөн дин донъяны танып белеүҙең йөкмәткеһен тулыландырып, кеше аңын белемдең тәү сығанаҡтарына йүнәлтә, мәғрифәткә әхлаҡи тәғлимәтте ҡайтара ала икән, быны ҡуш ҡуллап хуплау кәрәк. Бөгөн дәүләт етәкселәре йәмғиәт ҡарамағына сығарған проектты ғәмәлгә ашырыу мәғарифҡа ғына түгел, йәмғиәткә һәм дәүләткә бик ҙур файҙа килтерәсәк.

Күптәребеҙ дини белем биреүҙең асылын аңлап та етмәй әле. Беҙ бөгөн тап ошо юҫыҡта эш башлайбыҙ. Быйыл көҙ махсус курстарҙа Рәсәй Ислам университеты белгестәре М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Ислам мәғрифәтенә булышлыҡ итеү үҙәге педагогтары өсөн шәриғәт фәндәре буйынса, ә улар беҙҙең мөғәллимдәребеҙгә донъяуи фәндәр буйынса лекциялар уҡыясаҡ. Был Ислам мәҙәниәтен халҡыбыҙға ҡайтарыу юлындағы тәүге аҙымдарыбыҙҙың береһе булыр, иншалла.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

> *Беҙҙең Аҡмуллабыҙ ҙа мулла булған бит, әммә был уға философ һәм алдынғы ҡарашлы мәғрифәтсе булырға ҡамасаулыҡ итмәгән. Аҡмулла муллаларҙан көлгән, тиҙәр. Әммә ул муллаларҙан түгел, ә мулла вазифаһындағы наҙан кешеләрҙән әсе көлгән. Үҙ халҡын аң-белемгә саҡырып, ябай кешеләргә үҙ күңеленән, зиһененән шиғри формаға һалынған яҡтылыҡ нурҙарын таратып йөрөүсе аҡтан-аҡ, пактан-пак мулла булған ул. Аҡ йәнле мәғрифәтсе мулла айырым кешеләрҙең генә түгел, ә барса халыҡтың етеш һәм мул, әммә мәғрифәтле вә әхлаҡлы тормош ҡора алыуы хаҡында хыял йөрөткән.*

**Шулай итеп, йәмғиәттә дини аңдың, дини мәҙәниәттең тергеҙелеүе - ваҡытлы һәм маҡсатҡа ярашлы ваҡиға. Тик был эштә ашығыслыҡ булмаһын ине. Дини мәҙәниәтте уҡыта башлау үҙе үк бик күп яңы проблемалар тыуҙырасаҡ. Бигерәк тә күп конфессиялы республикабыҙҙа ошо мәсьәләне бик төптән уйлап, алдан уҡ әҙерлек эштәре алып барып башҡара алыу фарыз. Был эште ғәмәлгә ашырыу, мәғариф өлкәһенә ҡарағандарынан тыш, ижтимағи, мәҙәни һәм психологик проблемаларҙы хәл итеүҙе лә талап итәсәк, тиҙәр әңгәмәбеҙҙә ҡатнашҡан хөрмәтле ғалимдар.**

**Ғәҙәти булмаған уҫлаптай эҙҙәрҙе яҡындан күргән Айбулаттың күҙҙәре упайҙы. Аҙымдарының эрелегенә шаҡ ҡатып, бер талай торғандан һуң үҙ аяғына самалап ҡараны: ҡырҡ өсөнсө үлсәмле итегенән йәнә бер иле тирәһе артып ҡала!**





# КҮК ИРӘНДЕК ҠУЙЫНЫНДА

(Мистик повесть)

Иҙрис НОҒОМАНОВ

Көҙ ахырының ифрат тоҡос көндәрендә ҡайнап торған томан менән тау түбәһенә уралған болоттар аша ҡояштың ҡайҙа торғанын тоҫмалларлыҡ та түгел. Шулай ҙа Айбулаттың "самаһы" бер ваҡытта ла һынатмай: ваҡытты ул һәр саҡ дөрөҫ тоҫмөрләй. Шуның өсөндөрмө, урманға сыҡҡанында үҙе менән сәғәт алып йөрөмәй. Ҡата башлаған тәнен иретер ҡайнар сәй, талсыҡҡан тарамыштарын яҙып, йәненә рәхәтлек йүгертте лә, йөрәгенә май булып яғылды. Кәйефе лә бермә-бер күтәрелде. Ҡуна ятырға йыйынып сыҡҡан Айбулат ҡабаланмай. Берәй йәтеш урын табыр ҙа, таған ҡағыр. Усаҡ тоҡандырып, кискелеккә яраштырыр, сәйен дә ҡуйыр. Бөткәнме ни урманда ҡулай урындар. Әммә ҡабаланмаһаң да, тиҙерәк бул, тиҙәрме әле, ҡараңғы төшкәнсе ҡуныр урын табыу зарур. Күҙ бәйләнә башлаһа, ҡыйынға тура киләсәк. Ул тау түбәненә, һәр саҡ үҙенә тартып торған серле Ҡарайылға буйына төшөп китте.

Йылға үҙәнендәге ҡар ҡатламы айырата ҡалын ине. Һарҡыуға торо шәберәк атларға тырышҡан Айбулат йәй мәлендә бесәнселәр ҡорған ҡыуышҡа килеп сыҡты. Бына әҙер ҡыйыҡ, һыуы эргәлә генә, хатта киҫелгән утыны ла бар. Ул иҙәненә түшәлгән бесәне йәм-йәшел көйө күпереп ятҡан ҡыуыш эсенән иҫке тағандарҙы алып сыҡты. Әле ныҡлап туңырға өлгөрмәгән ергә, элекке өтә урынына ҡаҡты ла шунда уҡ ут тоҡандырып ебәрҙе. Ярым ҡараңғы ҡыуышта һәрмәнә торғас, йоморо төплө сүлмәк табып алды. Уныһын ҡомлап ышҡығандан һуң, үлән-йыуғыс менән сайҙы, селтер шишмәнән һыу һоҫоп, ҡайнатырға ҡуйҙы.

Айбулат, сүлмәктәге һыу ҡайнап сыҡҡас, бушаған термосын тултырҙы ла, ярты услам йәшел сәй онтағы төшөрөп, быҡтырырға ҡуйҙы. Бер аҙҙан күпмелер өлөшөн термос ҡапҡасына бушатҡас, ҡалғанын тығынлап япты: быныһы төнгөлөккә булыр, иртәнсәккә лә ҡалыр. Сүлмәк төбөндәге һыуға хөкүмәттең пакетлы әҙер һурпаһын бешереп ашағас, сират хуш еҫле сәйгә етте. Һай, шәп тә һуң! Ете төр сәскәүлән ҡушып әҙерләнгән сәйҙән һуң арыу-талыуҙарың шундуҡ онотола ла барлыҡ хәстәрҙәрең ҡул менән һыпырып ташлағандай ҡапыл юҡҡа сыға.

Иҫке кәнсир ҡалайҙы тултырып этенә лә һурпа ултыртты. Уныһы сәп-сөп ашап бөткәнсе айырым ҡыҙығыу менән ҡарап ултырҙы. Ахырҙа, ҡыуыштың өңөрө-тәпәш ауыҙынан имгәкләп үтеп, һуған ише йәшел һәм хозур йәй еҫтәре бөркөп ятҡан күпмә-бесән өҫтөнә ауҙы. Үҙе уңайлап ятҡандан һуң янына этен саҡырҙы. Уныһының инде инәлтә торған ғәҙәте юҡ. Илгәҙәк холҡо менән башҡа эттәрҙән ыңғай яҡҡа айырылған лайка шуны ғына көткән тиерһең, хужаһы эргәһенә йылп итә һалды. Айбулат йылы йомғаҡ булып ҡуйынына һыйынған тоғро дуҫының башынан һыйпап, арҡаһынан һөйҙө.

Тирләп-бешеп Ирәндек артылыу, һәр ваҡыттағыса, эҙемтәһеҙ ҡалманы. Онотола биреп күпмелер ятҡас, арҡаһына йәбешкән еүеш кейем сирҡандырып өшөтә башланы. Ә ныҡ тирләгәндән аҙаҡ өшөһәң, һалҡын тейҙереүгә бер аҙым ҡала. Ошо хәҡиҡәтте һәр ваҡыт иҫендә тотҡан Айбулат, ҡыуыштан сығып, һүрелә барған усаҡҡа алдан әҙерләп ҡуйылған ҡоро киҫкәләр ырғытты ла арҡаһын утҡа ҡуйып ултырҙы. Бына инде алдырып ҡара, һалҡын, ағанды. Арҡаһы баҙлап, шөйлә йылына барғанын тойған Айбулат ирәүән ҡиәфәттә, усаҡ тирәләй йөрөштөргөләне. Толҡа тапмай, кире инеп ятты, бая өҙөлә ҡалған уйҙар сылбырын өр-яңынан ялғаны...

...Иртәгә, иң әүәл, тура Олоташ ҡаяһына сығасаҡ. Мотлаҡ. Ул тирә "тәбиғәт санитары" - бүрененң яратҡан төйәге. Теге сабый улар эше түгелме икән? Хәйер, ҡасандан бирле инде йыртҡыстың, кешегә тейгән, тигән хәбәре ишетелгәне юҡ. Шулай ҙа... Эйе, ул сағында байғоштоң кейем ҡалдыҡтары булһа ла ятып ҡалырға тейеш. Нисек кенә фараз ҡылма, был эштә ниндәйҙер әтнәкә бар һымаҡ. Икенең бере: йә атай кеше алдаша, йә ҡыҙыҡай урманда түгел. Ә ҡайҙа? Мәгәр, Николай хаҡты һөйләй, һәм, бәләкәс Ира аҙашып киткән икән, уның юлы теге һоро юлбаҫарҙарҙыҡы менән киҫешеүе кисектергеһеҙ.

Айбулаттың фекерен йөпләгән һымаҡ, Олоташ яғынан бүре олоғанға тартым, үҙе шомло, үҙе бер аҙ һағышлы ла ауаз ишетелеп китте. Өйөр башлығының һөйәркәһен осрашыуға саҡырған йәмһеҙ олоуға оҡшаш ауаз нимәһе менәндер һунарсы күңелендә шик тыуҙырҙы: был бүре түгел. Йыртҡысты алдаштырмаҡҡа яһалма тауыш менән күп тапҡырҙар һунар иткәне булған ярайһы ғына оҫта һәм тәжрибәле аусы ошоно шунда уҡ һиҙеп алды. Ә ул сағында ниндәй сәйер тауыш һуң? Ҡояш байып, ҡараңғы төшөү менән Олоташ ҡаяһы аҫтында мәскәй иларға тотона, тигәндәрен Айбулаттың бер нисә тапҡыр ишеткәне бар. Аҫылбаев үҙ алдына көләмһерәй ҡуя: эй бер ҡатлылыҡ, мәскәй тигәнең бары әкиәттәрҙә генә йәшәй ҙә баһаң. Шулай ҙа, күңеленә аңлайышһыҙ көҙөк йүгерергә өлгөргән Айбулат, этенә яҡынырaҡ шылып ятты ла, мылтығын һәрмәштереп ҡуйҙы. Күпме генә баш ватмаһын, ул теге ишетер ҡолаҡҡа ете ят ауаз эйәһененң кем булырын асыҡ ҡына күҙ алдына килтерә алманы. Ана, Айбулатты үсекләгән шикелле, ул йәнә ишетелде. Унан тағы, тағы. Ишетелгән һайын үҙе яҡыная кеүек. Аҫылбаев ошо урында тәбиғи һынамышын эшкә ҡушты: Ирәндек буйҙарын яңғыратып ебәргән ауаз сама менән биш-ун минут һайын ҡабатланып тора. Бая ул һиҙелеп яҡынлаша ине, хәҙер, киреһенсә, йыраҡлаша бара. Йыраҡлаша шул. Тәүҙәрәк ап-асыҡ ишетелгән тауыш торған һайын тоноҡлана. Әллә ул томанлы йонсоу һауанан йотолоп шулай һаңғыраулынамы? Уяулы-йоҡоло ятҡан Айбулат уның ҡасан тынып ҡалғанын да һиҙмәне: ойоп бара ине. Шулай ҙа, томаланған аңы менән: "Үгеҙ болан баҡыра, ахыры, - тип уйларға өлгөрҙө, ошо мәлдә бит боландарҙың нәҫел хәстәрләү осоро, йәғни, туйҙары бара. Нисек ошоғаса башына килмәгән? Ана бит, барыһы ла яп-ябай ғына икән..." Әлеге өҙөк-йыртыҡ уйҙарынан тыныслана төшкән Айбулат, арҡаһын Аҡтырнағына терәгән көйө, үҙе татлы, үҙе баш бирмәҫ еңмеш таңғы йоҡоға талды.

Барҡылдаҡтарҙың зыҡ ҡубып соролдашыуына һиҫкәнеп уянған Аҫылбаев ныҡ ҡына өшөгән ине. Эте урынында булмай сыҡты. Аҡтырнаҡмы һуң оҙаҡ сыҙап ятыр эт? Айбулат, йәһәт кенә, һүрелгән утты дөрләтеп ебәрҙе лә, һыуы ҡайнап сыҡҡансы, буйтым ҡатырға өлгөргән тәнен яҙмаҡҡа, ҡул-аяҡтарын улай-былай һелтәштереп иртәнге зарядка яһарға тотондо. Йәш, көслө тәнгә күп кәрәкме, тиҙ арала тамырҙары буйлап рәхәтләндергес йылы йүгергәнен тойҙо. Юрый ҡарап торған тиерһең, урманса наҡыҫ табын әҙер булыуға, күңелле һикерәнләп, ҡайҙандыр Аҡтырнағы ла килеп етте. Һәй, шилма, башҡаһынан ҡалһа ҡалыр, әммә өлөштән һис ҡалмаҫ. Мәрҙәс!

Иртәнге сәй аҙағынан Айбулат тағандар менән сүлмәкте индереп ҡыуышҡа һалыуҙы кәрәк тапты. Урманда яҙылмаған шундай ҡағиҙә бар: кеше әйберен алып тораһың икән, мотлаҡ урынына һалып кит. Һала белмәһәң - ҡағылма. Аяғы менән ҡар һибеп быҫҡый ятҡан торонбаштарҙы һүндергәндән һуң, еңеләйә төшкән биштәрен рәтләп алды. Күңеленән генә ошо ҡыуышҡа, шул ҡыуышты ҡорған кешеләргә рәхмәт әйтеп, фатиха алғандан һуң, юлын дауам итте. Ниәте: ҡояш ҡалҡмаҫ элек үк тәғәйен урынға етеп, шул тирәне ныҡлап байҡаштырыу. Ни өсөн тигәндә, ҡояштың күренеп ҡалыуы булыр, йоҡа ғына, шунлыҡтан ышанысһыҙ ҡарың иреп юҡҡа сығыр ҙа ҡуйыр. Ярай ҙа, кисәге кеүек көнө һалҡын, болотло булһа. Аяҙға тартып, йылытып ебәрһә, кире ҡайтыуҙан башҡа сараһы ҡалмаясаҡ. Ныҡ ашыҡҡан Айбулаттың бер минут та тик тора белмәҫ эте йәнә ҡайҙалыр китеп олаҡты. Төн уҙғарған урынынан ҡуҙғалып китеүенә сама менән сәғәт ярым тигәндә, Айбулат түбәһе аҡ болоттар эсенә йәшеренгән Олоташ ҡаяһы аҫтында тора ине инде.

Моноклен күҙенә яҡын килтереүгә, мөһабәтлеге менән таң ҡалдырыр таш башынан уға ғәжәйеп күренеш асылды. Әлеге күренеште тәү тапҡыр күреүе булмаһа ла, һоҡланыуын еңә алмай, тағы бергилке ҡарап торҙо. Был урындан яҡын-тирә ус төбөндәге һымаҡ йәйрәп ята. Ана кескенә ауылдар. Уларҙың шырпы ҡабындай ғына өйҙәре. Ауыл өҫтәрендә күгелйем-шыйыҡ әллә төтөн, әллә томан йөҙөп бара. Уның аша ҡояштың тамсы ла нуры үтеп инә алмай, шунлыҡтан ҡараңғы һәм томһа. Әллә ҡайҙарҙа, болоттар ергә тейеп торған урында, әле туңырға өлгөрмәгән һыу ятҡылыҡтары ялтыраша. Сыбаркүл аръяғында Магнит ҡалаһының ағыулы төтөн борхотҡан торбалары һерәйешеп тора. Ҡала, билдәле, күренмәй, ул яман урғылтып, үҙе бөрккән төтөн эсендә үҙе тонсоға. Кешеләре нисек түҙеп йәшәйҙәр тиһең?..

Тылсымлы әкиәттәрҙәге дәү йылан ише борғоланып ятҡан сөм-ҡара асфальт таҫмаһы буйлап, берен-бере уҙырға маташҡандай, уйынсыҡ машиналар елә. Ҡайҙа һәм нимәһенә шул тиклем ашығаларҙыр? Ана, төп-төҙ һыҙат булып ятҡан аэропорттан ғәләмәт ҙур самолёт күтәрелде. Яҡында ғына һымаҡ күренгән самолёт үҙе ҙур булһа ла геүләгәне бөтөнләй ишетелмәй. Уның ер тетрәндергес ғәйрәтле тауышы Олоташ башына килеп етә алмай - ҡыҙыҡ. Күк Ирәндек ҡуйынындағы ҡараңғы үҙәктәрҙе ышыҡлап, ялбыр-ҡуйы томан ята. Уратып алған мөхит иркенлегенә һоҡланып донъяһын оноҡан Айбулатты баш осонда әйләнгән бөркөт саңҡыуы аҫылына ҡайтарҙы. Шунда уҡ, ҡоштар батшаһына яуап иткәндәй, ҡотһоҙ ҡоҙғон ҡорҡолдағаны ишетелде. Хәйләкәрҙә, йылғыр ҙа, иҫ китмәле әрһеҙ ҙә ул ҡоҙғон тигәнең, һөмһөҙләнеп, тырнағына табыш эләктергән бөркөткә оятһыҙ рәүештә ташланырға ғына тора. Ә тегеһе ғорур, ниндәйҙер ит киҫәге хаҡына ваҡланып, түбәнһенергә яратмай, оңҡот ҡошҡа тырнағындағын ташлай ҙа үҙе тиҙерәк ары осорға ашыға.

Көндөң шыпа ҡояшһыҙ булыуы, әлбиттә, яҡшыға: ҡырпаҡ ҡарҙың иремәйсә оҙағыраҡ ятырына өмөт бар. Баш әйләнгес бейеклектән аҫҡа ҡарап торған Айбулаттың ентекле ҡарашына сәйер-эре эҙҙәр теҙмәһе салынып ҡала. Бәй, ул ошо үҙе шыҡһыҙ, үҙе өшөргәнес донъяла япа-яңғыҙы түгел икән дә! Ана, йылы өй уңайлыҡтары менән йәшәйеш рәхәтлектәренән ваз кискән тағы кемдер йөрөп ята. Моғайын, томанда башы әйләнеп темеҫкенгән һунарсы йоратылыр әле? Кем генә булмаһын, күреп һорашырға кәрәк, улай-былай шикле нәмә осратманымы икән?

Ғәҙәти булмаған уҫлаптай эҙҙәрҙе яҡындан күргән Айбулаттың күҙҙәре упайҙы. Уларҙың ҙурлығына, аҙымдарының эрелегенә шаҡ ҡатып, бер талай торғандан һуң үҙ аяғына самалап ҡараны: ҡырҡ өсөнсө үлсәмле итегенән йәнә бер иле тирәһе артып ҡала! Ә аҙымдарына ҡарағанда - атлап бармаған был, нимәгәлер ҡабаланыуҙан, йүгереп кенә уҙған булырға тейеш. Ҡыҙыҡһыныу еңде - оҙон-оҙаҡ уйларға яратмаған Айбулат эҙ юллап китте.

Тегенең атлап барышы бөтә урында ла бер сама: аҙым арауығы һис үҙгәрмәй. Әллә туҡтауһыҙ йүгереп барғанмы? Ҡыҙыҡһыныуы арта төшкән Аҫылбаев этен саҡырҙы. Уныһы сәйер эҙҙәрҙе битараф ҡиәфәттә еҫкәштереп торғандан һуң, пырх итеп ҡуйҙы ла, ары сапты. Ә ул әҙәм ышанмаҫлыҡ аҙымдарҙың эйәһе ниндәй ҙурлыҡта булырға тейеш? Шуныһы ҡыҙыҡ. Туҡта... Аяғында быйма? Тамам аптыраған Айбулат тубыҡлана төштө лә әләгетле урман эсенә инеп юғалған эҙҙәрҙе ентекләберәк тикшерергә тотондо. Шулай, йә табанһыҙ быйма кейеп, йә бөтөнләй ойоҡсан үткән был. Итекле кеше юлына тамсы ла оҡшашлығы юҡ. Үҙе лә һиҙмәҫтән аусы ҡомарына бирелә барған Айбулат әлеге эҙҙәрҙе ахырынаса ҡәҙәр ҡыуырға ҡарар итте: барыһын да асыҡламай тороп, ул хәҙер туҡтаясаҡ түгел.

Теге эҙҙәр эре уҫаҡлыҡ араһындағы ҡурайлы аҡлан уртаһында ятҡан тигеҙ-яҫы таш янына килеп еткәс тә, өҙөлгән сылбыр ише юҡ булды. Ҡанатлы бәһлеүән йүгереп килгән-килгән дә осоп киткән, тиерһең. Башҡаса быны нисек аңлатырға? Күҙ алдында булып ятҡаны ошоғаса ышанып етмәгән урман эйәһе - албаҫты кәрәмәтеме әллә? Ҡасандыр уның хаҡында ишетеп ҡалыу менән, әкиәткә һанап, көлөп кенә ҡуя торғайны. Әллә урынһыҙға көлгәнме? Тамам алйыған Айбулат тейелмәгән өлпәрәм ҡарҙы еңе менән һыпырҙы ла, хәлһеҙләнеп, таш өҫтөнә ултыра төштө: иҫте китәрҙе бит был үҙе ҡыҙыҡ, үҙе ғәжәп осраҡ. Башын баҫа биреп ултырған Аҫылбаев бар зиһенен эшкә еккән дә, аҡыл етмәҫ хәлдәрҙең айышына төшөнөргә тырыша. Ғәжәп түгелме, баяғы эҙҙәр ошо урындан бер яҡҡа ла сығып китмәгән. Ҡабат таш янына килде һәм... шунда ғына уның урынынан ҡуҙғатылыуын аңғарҙы. Бая нисек күҙ уңынан ысҡындырған тиһең? Тәне буйлап башынан-аяғынаса эҫеле-һыуыҡлы тулҡын үтеп киткән Айбулат ул-был була ҡалһа, тип, иңбашындағы мылтығын ҡулына ала һалды ла, тәте һаҡлағысты ысҡындырып, әҙер тотто. Ни өсөндөр - үҙе лә аңламаны шикелле - яһауҙарын барлап ҡуйҙы. Атламалағы* биш патрон да урынында. Һәммәһенә әҙер ҡиәфәттә ҡатып бер талай торғандан һуң, иҫке япраҡтар араһында ғәмһеҙ соҡсонған Аҡтырнағын һөсләне. Уныһы таш тирәһен, баяғы кеүек, рыя ғына еҫкәштереп алды ла, хафаланырлыҡ бында бер ни ҙә юҡ, хужам, алағайымға борсолаһың, тигән һымаҡ, аҡ осло ҡойроғон һелкә биреп китте лә барҙы. Айбулат бит таш аҫтындағын, ни сәбәптәндер туйына алмай ҡалып, ҡышҡы өңөнә ята алмайса йөрөгән ҡот осҡос януар - шатундыр, тип фараз иткәйне. Түгелдер, шәт. Ул булғанда, ҡан дошманын һиҙеп алған лайка ер тырнар ҙа енен сәсер ине. Хәйер, нисек итеп шатун шул тиклем араны ике аяғында үтергә тейеш? Өҫтәүенә өңөн тип-тигеҙ асыҡ урынға эшләгән дә ауыҙын таш менән ҡаплап ҡуйған. Айыу шулай итәме? Итмәй.

**(Дауамы бар).**

*Атлама - обойма

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# БАШҠОРТОМДОҢ ДЕБЕТ ШӘЛЕ...



## Борондан килгән шөғөл

Ейәнсура! Күҙ күреме етмәҫ ерҙәргә йәйелгән бәрәкәтле баҫыуҙар, хәтфә болондар, күкһел тауҙар, сыңрау торналар иле! Данлы улдары һәм ҡыҙҙары, йондоҙ булып балҡыусы таланттары менән дан тотҡан гүзәл еркәй! Тағы бер ғорурлығы, йәнтөйөгем йәме - Ейәнсура шәлдәре! Алсаҡ килендәрҙең, аҡ инәйҙәрҙең, йәш ҡыҙҙарҙың тилбер ҡулдары тыуҙырған һоҡланғыс мөғжизә ул - Ейәнсура шәле! Ҡурҡыу белмәҫ яугирҙәребеҙҙең уҡтары зыңлап үткән көмөш йөҙөктән үткәрерлек нәфис тә, нескә лә ул! Гәзиз еребеҙ йылыһын, Ҡаҫмарт, Һүрәм буйҙарының гүзәллеген, күнел наҙын, сибәр ҡыҙҙарыбыҙҙың серен, уңған еңгәләрҙең моң-һағышы, тыуған яҡ биҙәктәрен йыйған ул! Йәнгә - сихәт, тәнгә - дауа, ҡулға һәләт биреп кенә ҡалмай, йыркөйҙәрҙең иң дәртләнеп йырлата, моңландыра, ҡанатландыра ла, йыйындарға, байрамдарға, енеүҙәргә әйҙәй, Ейәнсура шәле!

Башҡорт дебет шәлдәре Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында (Күгәрсен, Ейәнсура, Хәйбулла), Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Һаҡмар райондарында йәшәгән башҡорт халҡының ҡул эше булып һанала. Ошо төбәктәрҙең тәбиғәт шарттары үҙенсәлекле дебет биргән билдәле кәзә тоҡомдары үрсетеүгә булышлыҡ иткән. Шәл бәйләү һәм һуғыу өсөн ошо кәзә дебетенән нәҙек кенә итеп еп иләйҙәр. Дебет шәлдәр әлеге көндә лә өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар кейеменең айырылмаҫ өлөшө булып тора.

Һуғылған шәлдәр ҙә туҡыу сифатының уникаль күренеше, уның аналогтары башҡа халыҡтарҙың туҡыу сәнғәтендә бөтөнләй юҡ. Бындай шәл өй станогында туҡыла һәм аҙаҡтан икеәс өлөшкә киҫеп, тоташтырыла. Шәлдең ситенә селтәрҙәр һәм суҡтар тағыла. Ошондай шәлдәрҙе бары тик Башҡортостанда ғына дебеттән эшләйҙәр, ҡалған Силәбе, Свердловск, Ҡурған башҡорттары һарыҡ йөнөнән әҙерләйҙәр.

XVIII быуаттың икенсе яртыһында Көньяҡ Уралдың һәм Урал арьяғының далалы райондарында биҙәкле шәлдәрҙе энәләр ярҙамында бәйләү башлана. 1766 йылда А.А. Рычков "Кәзә дебете тәжрибәһе" тигән мәҡәләһендә үҙенең ҡатыны А.Рычкова тарафынан Ырымбурҙа ойошторолған дебеттән әҙерләнгән әйберҙәр күргәҙмәһе тураһында яҙа. Оҫта шәлселәр боронғо шәлдәрҙең уртаһы һәм ситтәре селтәрле булғанлығын, ә селтәрҙәренең ситтәре "теш"ле булыуын күҙәткән. Шәлдең уртаһы сит менән өҫтәмә бәйләм ("обвязка") ярҙамында тоташтырылған булған. Ҡабарып торған ҡалын шәлдәр йәки ошолай бәйләнгән, ә ҡалған йоҡа шәлдәрҙең уртаһы селтәрле булған. Бөгөн дә уны ошолай бәйләйҙәр.

Ейәнсурала 1932 йылдан бирле "Свобода" шәл артеле эшләп килгән. Был турала Рәйсә Ваһапова бына ниҙәр хәтерләй: "Һәр кешегә 900 грамм дебет бирәләр ине. Шуны таҙартып, аялап, шәлдәр әҙерләп бирә инек. Ауыл халҡына урта, сит бәйләгән һәм дебетте аялап, иләп эшкәртеп биргән өсөн эш хаҡы түләйҙәр ине. Ырымбурҙағы "Первомайская" фабрикаһынан 12-се һанлы кашемирептәр килтерәләр ине. Шәлдең урталарын станок бәйләһә, ситтәрен селтәрләп ауылда ҡулдан бәйләйҙәр ине. Аҙаҡ шәлдәрҙе инструкторҙар йыйып ала ине. Шәл уртаһы өсөн йомғаҡтарҙы беҙҙең район ғына түгел, Һарыҡташ, Ҡыуандыҡ, Йылайыр, Күгәрсен райондарынан әҙерләп, тоҡлап килтерә инеләр. 1968 йылда Урта Азиянан ун бер станок алып ҡайтҡас, артелдә эшләүселәр һаны күбәйҙе. Хөкүмәткә беҙ ҙур ғына килем килтерә инек. Бөтән өлкәләргә шәлдәрҙе посылка менән ебәрә инек. Бер шәл 28 һум тора ине ул саҡта. 1992 йылда артелде яптылар".

1993 йылдарҙан бирле район мәҙәниәт һарайында "Йырау" фольклор ансамбле эшләп килә. 2003 йылда уға халыҡ исеме бирелде. Был ансамблгә шәл белгестәре йөрөй. Тәүге "Ашҡаҙар таңдары" республика башҡорт фольклоры байрамында беҙҙең ансабль I дәрәжә дипломға лайыҡ булды. Унда беҙ кәзә тарауҙан башлап, сит бәйләүгә тиклем, йыр-моң аша шәл бәйләү йолаһы күрһәттек.

**Земфира ӘБДРӘХИМОВА.**

## Йылындыра ла, туйындыра ла…

Ейәнсура халҡы бөтән райондарҙан айырмалы рәүештә кәзә малын күпләп аҫрай. Кәзә үҙе бәләкәй генә булһа ла шәхси көнкүрештә уның файҙаһы бик ҙур. Беренсенән, кәзә ите бик тәмле һәм файҙалы, сөнки кәзә үләндәрҙе һайлап ҡына ашай. Уның һөтө лә бик шифалы, күптәр унан ҡымыҙ яһай. Ә инде дебете тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Кәзә дебетенән төрлө әйберҙәр: шарф, бейәләй, бирсәткә, косынка, ойоҡ, кофта һәм, әлбиттә, шәл бәйләргә була. Беҙҙең районда оҫта шәл бәйләүселәр бик күп, уларҙың күптәре дипломдарға, төрлө призадарға лайыҡ. Юҡҡа ғына йырҙа ла:

Ейәнсура дебет шәле
Бөтә ерҙә дан тота.
Шуға күрә беҙҙең шәлдәр
Баҙарҙарҙа шәп үтә, - тип йырланмай.

Кәзә дебетенән матур шәл бәйләр өсөн бик күп көс һалырға кәрәк. Февраль-март айҙарында, кәзәләрҙең дебете күренеп ҡалҡҡас, уны махсус тараҡ менән тарап алалар. Дебет сүпле булмаһын өсөн башта бесән һалалар, шунан ғына кәзәләрҙе сығаралар. Кәзәне тарағанда уның аяҡтарын бәйләйҙәр, бәреү башынан тотоп тора. Дебеттең иң сифатлыһы тәкәләрҙә була. Улар дебетте кәзәләргә ҡарағанда күберәк - бер килограмдан алып өс килограмға тиклем бирә. Шәл һаны менән иҫәпләгәндә, өстән алып алты-ете шәлгә етерлек дебет бирә кәзә тәкәләре. Дебеттең сифаты һәм күплеге һауа торошона һәм ҡыштың нисек килеүенә лә бәйле. Ҡыш һалҡын килһә, дебет күп һәм оҙон була. Ҡыш тыуған кәзә бәрәстәренең дебеттәренең сифатын яҙ көтөүгә сыҡҡансы белеп була. Был ваҡытҡа тиклем уларҙың дебеттәре үҫә, оҙонлоғо, төҫө күренә. Хужалар ошо билдәләргә ҡарап, кәзәне аҫрауға ҡалдыра. Кәзәләрҙе яҙ тарап бөткәс, ҡылын ҡырҡалар. Ҡырҡылған кәзәләрҙең дебете таҙа һәм матур булып үҫә. Таралған дебетте әрәмәһен, көйә төшмәһен өсөн һалҡынса ергә ҡуйып торалар. Оҙаҡ ятҡырып ҡуйырға ла ярамай, ул әрей башлай һәм сифаты кәмей.

Дебет эшкәртеү эшен башлағанда иң тәүҙә таҙартып ҡыллайҙар (ҡылдан таҙартыу шулай атала), шунан тетәләр. Унан һуң иҙәнгә берәй нимә түшәп, шунда дебетте һалып, селек һепертке менән борҡолатып туҡмайҙар. Был дебет матурлап аралашһын, шәл бәйләгән саҡта ала-сола ыҙаттар барлыҡҡа килмәһен өсөн эшләнә. Былар ҙан һуң дебетте ике тапҡыр аялайһың, бөгөн күберәк һуҡҡыс менән эш итәләр. Элек үлсәү булмағандыр инде, әсәйем аялаған дебетте ҡулы менән самалап баҫып ҡарай ҙа, һигеҙ өлөшкә бүлеп һала: дүрт өлөшө шәл уртаһына, дүрт өлөшө ситтәренә, тип, тигеҙләп айыра ине. Дебетте иләгәс, уны тынлайһың (еп - тынлыҡ тип атала). Әгәр аяҡлы тынлыҡ булһа, уны әүернәгә (епте ҡуйыу өсөн махсус ҡоролма) ҡуйып, епте тәүҙә йомғаҡ итеп урап алаһың да, шунан дебет еп менән бергә ҡушып тынлап, орсоҡ менән сиратаһың. Унан ҡаты итеп йомғаҡ урап алаһың (йомшаҡ итеп ураһаң, тиҙ ҡуперә). Йомғаҡтар әҙер булғас, төп эшкә - бәйләү эшенә тотонаһың. Бер сит бәйләп алғас, уға урта теҙеп алаһың. Уртаһын бәйләгәс, ҡалған әҙер ситтәрҙе матур итеп ҡушаһың.

Дебет шәл кешене ҡышҡы һалҡындан һаҡлау өсөн бик ҡулай һәм файҙалы әйбер. Башҡа ябынырға ла, арҡаға һалырға ла мөмкин. Йәш балаға юрған урынына ябырға мөмкин, ул, берҙән, йылы, йомшаҡ, икенсенән, еңел дә була.

**Мөкәрәмә МЫРҘАБУЛАТОВА.**

## Йырҙар ҙа йырлата…

Кәзә аҫрау, уның дебетен тарап алыу, шәл бәйләү - Ейәнсура районында борон-борондан килгән кәсеп. Әсәй-әләсәйҙәр һөйләүенсә, шәл бәйләүҙең ҡайҙан һәм ҡасан килеп сығыуын аныҡ һәм төплө генә белгән кеше юҡтыр, моғайын. Әүәле элекке Абзан районына (хәҙерге Ейәнсура) ҡараған ауылдарҙа, бигерәк тә Юлдаш, Биштирәк, Аҡдәүләт, Байыш яҡтарында һәр йортта егерме биш баштан да кәм кәзә малы аҫырамағандар. Хәҙер ҙә был ауылдарҙа ҡырҡ-иллеләгән кәзә аҫырайҙар. Йәштәр дебетте үҙҙәре эш итеп, шәл бәйләһә, олораҡтар дебет көйөнсә һатыуҙы төп кәсеп итеп күрә. Кемгә өй һалырға, кемгә машина алырға, кемгә туй яһарға йә бала уҡытырға һәр саҡ ярҙам итә.

Әлбиттә, шәл бәйләү еңел эш түгел, мәшәҡәте етерлек. Кәзәне тарау үҙе бер процесс булһа, аҙаҡ уның дебетен эшкәртеү күп ваҡыт һәм көс талап итә. Дебетте һуғырға, йыуырға, тетергә, унан тағы һуғырға, иләргә, ҡатлап сиратырға кәрәк. Ошоларҙың барыһын башҡарғандан һуң ғына әҙер йомғаҡ килеп сығып, бәйләү эшенә тотонаһың. Шуға ла беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар шәл бәйләгәндә өмәләргә йөрөүҙе өҫтөн күрә. Ә бындай кис ултырыуҙарҙа йыр-моң тиһеңме, әйтештәр, йомаҡтар әйтеү тиһеңме, барыһы ла бар.

Ҡыштың оҙон төндәрендә
Өмәгә йыйылабыҙ.
Эш бөтөргәс, уйнап-көлөп
Күңелдә күтәрәбеҙ.

Уйындар, ярыштар ойоштороп ебәрәбеҙ. Мәҫәлән, шәл уртаһы бәйләүселәр ярты сәғәттә нисә һыр бәйләй, ә ситен бәйләүселәр еп һалыша. Ул былай була: ике сит бәйләүсенең ептәрен бер оҙонлоҡта алып, бергә ҡушып таплап һалалар. Кемдең ебе алдан бәйләнеп бөтә, шул еңеүсе була.

"Тел һөйләй, ҡул эшләй", "Эш оҫтанан ҡурҡа", "Эшләһәң, эш көс бирә", "Дебет эшенең башы михнәтле булһа ла, аҙағы хикмәтле була", "Ярыҡ ҡайҙа - ел шунда, дебет ҡайҙа - йыр шунда", "Байлыҡ күрке мал менән, дебет күрке өмә менән", "Инәһеҙ ҡорт көсһеҙ булыр, дебетһеҙ йорт шөкһеҙ булыр" кеүек мәҡәлдәр ошондай шәл өмәләрендә тыуған да инде.

Ә шәл ситенә ниндәй генә биҙәктәр һалынмай һуң! Кем ижадҡа яҡын, кем һүрәт төшөрөүгә һәләтле - һәммәбеҙ ҙә уйлап сығарып, бер-беребеҙгә өйрәтәбеҙ.

Беҙ үҙебеҙ шәл ситенә
Төрлө биҙәк һалабыҙ.
Ете-һигеҙ биҙәктәрҙән
Иң матурын һайлайбыҙ.
Иң сағыу биҙәктәрҙән
"Бесәй табаны" була.
Бик уңған шәлселәр генә
"Һалма биҙәге" һала.
Шәл ситендә "шыршылар"
Тип-тигеҙ урынлашҡан
"Ҡайын япрағы" менән
"Сәскәләр" ҙа ҡатнашҡан.
Беҙ үҙебеҙ үҫәргәндәр
Торна - беҙҙең изге ҡош
Ҡош юлдары - донъя йәме,
Биҙәк итеп шәлгә ҡуш.
Шулай итеп...

Шәл бәйләү уңғанлыҡ та, таһыллыҡ та, тилберлек тә, һиҙгерлек тә, ижади һәләт тә талап иткән шөғөл. Күҙ нуры, йөрәк йылыһы, йыр-моң ҡушып бәйләнгәнгә лә башҡорт шәлдәре нәфис тә, йомшаҡ та, затлы ла була. Үҙе бер мөғжизә инде улар!

**Фәүзиә МӘУЛИТОВА.**

✓ *Әсәйҙән күрмәксе, мин дә ямғырҙы туҡтата алам. Үҙемсә һорайым, доға ҡылам. Балалар аптырай икән. Тирә-яҡта ямғыр яуа, ә беҙҙең бесән ҡоп-ҡоро. "Әсәй эше", тип ҡыуаналар.*



*РУБРИКА ТӘҠДИМ ИТӘМ: "АҒИНӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ"*

# ЯМҒЫР ЯУҘЫРЫУ ЙОЛАҺЫН...

## иманлылар ғына атҡара

**Беҙ уның менән бер урамда йәшәйбеҙ. Һикһән йәште күптән түңәрәкләүенә ҡарамаҫтан, Рәфиҙә инәйҙең зиһененә күптәр көнләшерлек. Ауылға бәйле хәтирәләр, аймаҡтар тарихы, һ.б тураһында һөйләгәнен яҙып алғанмын. Музей хеҙмәткәре булараҡ, оло әхирәтем янына йыш килəм.**

- Ямғыр яуҙырыу сараһын күрергә ине... - Һаман шул уйынан ҡайтмай, ҡолағыма бер үк нәмәне туҡыпмы-туҡыны был килгәнемдә лә Рәфиҙә инәй.

Бары уға ҡарата ихтирам йөҙөнән генә көлөмһөрәп тыңлағанды (йәнәһе, суйын түңкәреп кемдәр яуым-төшөм саҡырмаҫ ине) һиҙгер күңеле менән тойоп өлгөрә ул. Капылғара шымайып ҡала. Ахыр килеп, тәрән итеп көрһенеп ҡуя.

- Эх, бар ине заманында тәбиғәт телен аңлай алған йәндәр. Әсәйем дә ана шундай аҫыллдарҙың бөртөгө ине. Ни үҙемдең хәлдән килерлек түгел. Кәр ҡайтты. Йәш саҡтарҙа күпме атҡарҙыҡ изге йолаларҙы. - Үпкәләтеүҙән ҡурҡып, уға табан һылыша биреп ҡуям. Уның ҡәнәғәтләнеп йылмайыуынан тирә-яҡ нурға мансылғандай. Ҡаптынмы ҡармаҡҡа, тигән ҡиәфәттәге әңгәмәсемдең бары минең өсөн генә тәғәйенләнгән аманаты ҡалған икән әле. Уның кеүек йәшәмештәргә генә хас булғанса, баласағы, әсәһе, ямғыр яуҙырыу йолаһын ҡайта-ҡайта һөйләгәне лә файҙаға ғына. Хәтереңә һеңдереп кенә өлгөрт.

- Әсәйем Бибизада мине табыр алдынан 12 көн ауырыған, - тип һөйләп китте Рәфиҙә инәй.- Ахыр сиктә, Ғабдулсабур ағайым күрше Көсөк ауылынан Ғәфиә исемле кендек әбейен алып килгән. Мине ҡулына алған әбейҙең аптырағаны булыр. Бөркәнсектә тыуғанмын. "Был бала зиһенле булыр. Рәнйеһә - рәнйеше, ҡарғаһа - ҡарғышы төшәр. Им-томға, дауалауға һәләтле бала буласаҡ", - тигән. Әсәйемдең өшкөрөм-төкөрөмгә тыны килешкәнен һөйләгәйнем дә инде. Уның ямғырҙы хатта нисек туҡтатҡанына үҙем шаһит. Иҫтамғолдағы Мәрхәбә апайым ауырып түшәккә яткас, әсәй менән уның янында булдыҡ. Ҡойоп яуған ямғыр һаман туктамағас, сәләм күндерә минә. Бата-сума Ҡаралайғыр шишмәһенә юл тоттоҡ. Сөгөндә эҙләп табып, ауыҙын өҫкә ҡаратып ултыртып ҡайттыҡ. Ямғыр шып туҡтаны. Әсәйҙән күрмәксе, мин дә ямғырҙы туҡтата алам. Үҙемсә һорайым, доға ҡылам. Балалар аптырай икән. Тирә-яҡта ямғыр яуа, ә беҙҙең бесән ҡоп-ҡоро. "Әсәй эше", тип ҡыуаналар.

- Ә ямғырҙы нисек яуҙыра ине әсәйегеҙ? - тип, ҡыҙыҡһынып китеүемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын.

- Бына ошо икмәк менән ант итәм. Һис кенә лә алдамайым. Элек уҡымышлылар ауыл һайын ине. Әсәй үҙенә иптәшкә берәүҙе ала һәм Ҡаралайғыр шишмәһенә юллана торғайны.

- Әллә тәүәкәлләп ҡарайһығыҙмы?

Үҙенең һорау, өмөт тулы ҡараштары мине утәнән-үтә тишерҙәй итеп ҡарай Рәфиҙә инәй. Арбап маташамы әллә? Ыңғай яуапты алғас, икеләнергә урын ҡалдырмаҫлыҡ ҡәтғи рәүештә йәнә киҫәтә.

- Аслан кеше ни әйтер, көлмәҫтәрме, тип тайҡалай күрмәгеҙ. Юҡһа, ниәтегеҙҙең һүрелеүе, көсөгөҙҙөң кәмеүе бар. Хоҙай Тәғәлә анық, теүәл эш итеүҙе хуп күрә.

Йома көндә, өйләнән һуң, ҡайнаға, еңгә, мин - өсәүләшеп тау шишмәһенең эргәһенә килдек. Сәләм биргәс тә ике рәкәғәт истисҡа намаҙын уҡыныҡ. Доға-теләктәр ялбарып һораныҡ. Үҙебеҙ менән бергә алып килгән суйын сүлмәкте түңкәреп (беҙҙең яҡта уны сөгән тип йөрөтәләр), шишмәнең бер яҡ ситенә бәләкәй соҡор яһап, күмеп ҡуйҙыҡ. "Иғтибарлы булһағыҙ, бер-ике тамсы ямғыр күҙе төшөп ҡуйыр. Яуасағын аңғартыр", - тигәйне Рәфиҙә инәй, нәҡ шулай булды ла. Ә иртәгәһенә өйләнән һуң яуа башлаған ямғыр бер аҙна тирәһе дауам итте.

Ә сөгөнөбөҙ йылға башында ҡалды. Кем белә, бәлки, тағы барырға тура килер...

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы.**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*



# НИ ӨСӨН ҮЛӘН ЙӘШЕЛ?

## Йәки баланың һорауҙарына яуаптар

**Ни өсөн ямғыр яуа? Терпегә энәләр нимәгә кәрәк? Тәҙрәләр ни өсөн "тирләй"? Ошо һәм ошоға оҡшаш тағы ла бик күп һорауҙар яуҙырған бала ҡайһы ғына ата-әсәне аптырауға һалмай икән? Һәр сабый үҙе өсөн таныш булмаған донъяны үҙенсә аса, үҙ аллы фекерләргә өйрәнә, аралашыуҙар һөҙөмтәһендә тәжрибә туплай. Көндәлек эш араһында бер туҡтауһыҙ яңғыраған бындай һорауҙарҙан ҡасырға ынтылған атай йәки әсәй: "Кит әле, ҡамасаулама" йәиһә "Әллә, белмәйем", - тип яуаплай икән, баланың ҡыҙыҡһыныуы һүрелеүе мөмкин.**

### Нисек яуап бирергә?

Алдығыҙҙа ҙур кеше түгел, ә бала торғанын бер ҡасан да онотмағыҙ, шуға ла һеҙҙең яуабығыҙ уға аңлайышлы, ябай булырға тейеш. "Бына ҙур үҫкәс - белерһең" - тип яуапларға тырышмағыҙ. Бала бәләкәй, барыбер аңламаясаҡ, тип уйлап, унан ҡотолоу өсөн генә нимәлер әйтеү ҙә яңылыш буласаҡ. Әгәр ҙә яуапты белмәйһегеҙ икән, был турала улығыҙға йәки ҡыҙығыҙға әйтергә оялмағыҙ, бергәләшеп китаптарҙан мәғлүмәт эҙләп табып уҡыу ҙа отошло ғына, бындай саҡта, ғәҙәттә, балала тиҙерәк уҡырға өйрәнеү теләге лә тыуа.

### Нисек аңлатырға?

Бар миҙгелдә лә бергәләшеп тәбиғәт ҡосағында ял иткәндә балаға күп нәмәне күрһәтеп аңлатыу мөмкинлеге тыуа. Энәгараҡтың һыуға нисек ултырыуын, ҡояш нисек байыуын, ҡасан йәйғор барлыҡҡа килеүен, ләлә сәскәһе япраҡтарының ысыҡ һәм ямғыр тамсыларын йыйыу өсөн уңайлы булыуын, һ.б.

### Үҙе яуап бирһен

Баланың бөтә һорауҙарына ла яуап бирергә ашыҡмағыҙ. Ҡайһы бер һорауҙарға бала үҙе лә яуап бирә ала. Бары тик уны кәрәкле өлкәгә йүнәлтеп ебәрергә генә кәрәк.

### Мин ҡайҙан барлыҡҡа килдем?

Йыш ҡына ата-әсәләрҙе бындай һорау аптырауға ҡалдыра. "Кәбеҫтә араһынан таптыҡ", йәиһә "Коштар алып килде", - тигәнерәк әкиәттәрҙе замана балаларына һөйләп тормаһағыҙ ҙа була. Телевизор, компьютер быуатында бындай яуап балағыҙҙың һеҙгә ышанысын ғына ҡаҡшатасаҡ. "Тәүҙә һин бөтөнләй бәләкәй генә инең һәм һин әсәйҙең эсендә йәшәнең", - тигән кеүегерәк дөйөм һүҙҙәр менән аңлатһағыҙ, яҡшыраҡ булыр.

**Шулай итеп...**

**Әгәр ҙә һеҙ үҙегеҙҙе иғтибарлы ата-әсә тип иҫәпләйһегеҙ икән, сабыйығыҙҙың һорауҙарына яуап бирергә, уны ҡыҙыҡһындырған һәр күренешкә аңлатма бирергә тырышырға кәрәк. Донъяны танып-белеүҙә балағыҙға һеҙҙең ярҙамығыҙ гел кәрәк, шуны онотмағыҙ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Гүзәл НАҘАРҒОЛОВА, педагог:** Аралашыуға һәр бала мохтаж. Атай-әсәй менән бергә донъяны танып белеү ваҡытында баланың үҙен борсоған ниндәйҙер эмоциональ ауырлыҡтарҙан да ҡотолоуы фәнни яҡтан иҫбатланған, шуға ла баланың һорауына ҡул һелтәп кенә ҡуймағыҙ. Иғтибар иткәнегеҙ бармы икән: бәләкәй бала һорауҙы һәр ғаилә ағзаһына түгел, ә ышанған кешеһенә генә бирә, сөнки ул өләсәйҙең, олатайҙың, атайҙың йәки әсәйҙең уның һорауҙарына төрләсә ҡарауын яҡшы тоя. Кем уның һорауын ихлас күңелдән тыңлай, ҡыҙыҡлы итеп яуап бирә - шул ғаилә ағзаһы баланың яҡын дуҫына әйләнә. Баланың һорауына яуап биргәндә уның йәш үҙенсәлеген, тормош тәжрибәһен дә иҫәпкә алығыҙ. Алты йәшлек Ғәлиҙең "Беренсе кеше ҡайҙан барлыҡҡа килгән?" - тигән һорауына атаһы кешенең маймылдан барлыҡҡа килеүе тураһында оҙаҡ итеп һөйләй. Малай быны үҙенсә аңлай һәм иртәгеһенә дуҫтары менән белгәндәрен уртаҡлаша: "Минең олатайым маймыл булған, ул эшләй башлаған һәм кешегә әйләнгән. Шунан минең атайым тыуған, атайымдан мин тыуғанмын..." Был осраҡта атай кеше улын ҡыҙыҡһындырыу өсөн ҡайһы бер фактарҙы ғына һөйләй ала ине. Әгәр ҙә бала тағы ла күберәкте белергә теләй икән, быны эшләргә ашыҡмағыҙ, Макаренконың "Һәр белемдең үҙенең ваҡыты бар" - тигән һүҙҙәрен онотмағыҙ. Мәктәпкәсә йәштәге бала күп нәмәне хәтерендә ҡалдыра ала, әммә ул бар нәмәне лә аңлап етә алмай. Һөҙөмтәлә, мәктәпкә уҡырға баргас, уның белем алыуға ҡыҙыҡһыныуы кәмейәсәк. Шуға ла "Был турала һинә белергә иртәрәк, тиҙҙән уҡырға барасаҡһың, шунда барыһына ла төшөнәрһең", - тип әйтеү дөрөҫөрәк була.

"Мин ҡайҙан барлыҡҡа килдем?" - тигән һорау йыш ҡына ата-әсәне аптырауға һала. Беренсенән, улар был һорауҙы сәләмәт булмаған ҡыҙыҡһыныу тип тапһа, икенсенән, уға бәләкәй бала төшөнһөн өсөн ябай һәм аңлайышлы итеп яуап биреүе, ысынлап та, ауыр. Был осраҡта баланы оялтып маташмағыҙ, бала, ғәҙәттә, һорау йөкмәткеһенә бөтөнләй икенсе мәғәнә һала. Мәҫәлән, А.О. Пинттың "Һеҙгә, ата-әсәләр" тигән китабында ошондай ҡыҙыҡлы ваҡиға һүрәтләнә. Малай: "Мин ҡайҙан барлыҡҡа килдем?" - тип һорай. Атай һәм әсәй нимә тип яуап бирергә белмәй, ҡауҙы һәм кәбеҫтә тураһында һөйләп маташа. Шул саҡта улар баланан ни өсөн был турала ҡыҙыҡһыныуын һорай һәм көтөлмәгән яуап ишетә: "Бөгөн Петя икенсе ҡаланан күсеп килеүе тураһында әйтте. Ә мин ҡайҙан килеп сыҡҡанмын?"

Ҡайһы саҡта бала үҙе лә яуап бирә ала торған һорау менән мөрәжәғәт итергә мөмкин. Был саҡта яуап бирергә ашыҡмағыҙ, "Ә һин нисек уйлайһың?" тигән һорау бирегеҙ. Уның дөрөҫ яуапҡа килмәүе лә мөмкин, тик үҙ аллы яуап эҙләү баланың үҫешенә ыңғай йоғонто яһаясаҡ, бергәләп табылған яуап уның хәтерендә лә нығыраҡ ҡаласаҡ. Ошо урында сабыйығыҙҙы маҡтап та ебәрһәгеҙ, уның күп нәмәгә үҙе лә төшөнә аласағына ышанысы тағы ла нығый. Баланың һәр һорауына яуап биреү өсөн атай менән әсәй ҙә күп белергә тейеш. Бергәләп китаптар аҡтарыу ҙа файҙалы буласаҡ. Күп балалар әкиәттәрҙе үҙгәртеп һөйләргә ярата, был да уның фекерләү ҡеүәһен үҫтерә, шуға ла бергәләп әкиәттәр уйлап сығарығыҙ.

Бала артыҡ һорауҙар биреп йонсота икән, тимәк, уға күңелһеҙ, уның һеҙҙең менән аралашҡыһы килә. Төрлө һорауҙар биреп, ул һеҙҙең иғтибарығыҙҙы яуларға тырыша: "Нимә эшләйһең?" "Сынаяҡ йыуам". "Ниңә?" "Таҙа булһын өсөн". "Ни өсөн таҙа булһын?" "Сәй эсеүе күңелле булһын өсөн", һ.б. Һөйләшеүҙең башында уҡ яуап биреү урынына "Ә һин нисек уйлайһың?" тип ҡайтарып һорау урынлы булыр ине. Бындай саҡта һорауға уйнап ҡына яуап биреү ҙә кәйефте күтәреп ебәрә ала: "Нимә эшләйһең?" "Бейейем!" "Юҡ, әсәй, һин бейемәйһең, ә сынаяҡ йыуаһың!"

Өлкәндәрҙең яуаптары балаға тәбиғәтте, йәмғиәтте, әхлаҡи ҡағиҙәләрҙе, һ.б. аңларға ярҙам итеүен дәлилләп тороу кәрәкмәй. Шуға ла балағыҙ менән йышыраҡ аралашығыҙ, уның һорауҙарына яуап бирергә ҡыйынһынмағыҙ һәм һеҙ бөтә яҡтан камил булған шәхсе тәрбиәләйәсәкһегеҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

*ТӘҮБӘ*



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 6-се һабаҡ: "Үҙең тураһында һөйлә"

Минең "йәшел йылан" ҡоллоғонан ҡотолоуым тураһында иң тәүҙә, әлбиттә, бергә эскән шешәләштәрем белде. Әйтергә кәрәк, был ҡарарымдың ҡоро һүҙ генә түгел, етди аҙым икәненә иң тәүҙә улар үҙ күҙҙәре менән күреп инанды. Ни өсөн тигәндә, алда әйткәнемсә, Шешәбикә менән хушлашһам да, ҡайһы бер табындарҙа мин һаман да сәй йә һыу эсеп кенә ултыра инем әле.

Был хаҡта ишетеп кенә белеүселәр: "Һе, тумыртҡа тәүбәһе, алкаш, әллә кем булған булып, күпме ҡыланып йөрөр тиһең, күр ҙә тор, барыбер ысҡына бит ул",- тип, минең ҡабат эсеүемде түҙемһеҙләнеп көттө. Әммә көтә-көтә, өтөк булдылар. Ҡайһы берҙәре аҙаҡтан, мәжлестәрҙә бергә тура килеп, шулай уҡ үҙ күҙҙәре менән күрҙе.

Башҡалар ҙа быға ышанһын өсөн апаруҡ ваҡыт кәрәк буласаҡ әле минә. Был ҡыйыу аҙымым өсөн иң тәүҙә атайым менән әсәйем, башҡа туғандарым ҡыуанды. Бигерәк тә атайым спиртлы эсемлектәргә битараф булмаған туғандарыма мине өлгө итеп ҡуйҙы. Күҙ менән ҡаш араһында абруйым үҫеп киткәндәй тойолдо.

Яйлап-яйлап эсеүемде ташлауым тураһындағы хәбәр таралып, туғандарымдың, дуҫтарымдың һәм таныштарымдың ышанысында инаныуға әүерелә барған һайын, мин бер хәлкүренешкә диҡҡәтемде туҡтаттым. Иғтибар итеп кенә ҡалманым, уны артабанғы көндәремдә лә файҙаландым.

Быға тиклем һине яҡшы белгән, ара-тирә аралашҡан һәм ишетә-күрә таныған кешеләргә эсеүеңде ташлауың тураһында күберәк һөйләргә, был хәбәрҙе мөмкин тиклем күберәк таратырға кәрәк икән. Уларҙың араһында үҙең һәм башҡалар өсөн абруй һаналған, исемдәре халыҡ араһында киң танылыу яулағандары булһа, бигерәк тә һәйбәт. Ни өсөн тиһегеҙме? Аңлатып үтәм.

Беҙ һүҙҙе абстракт төшөнсә итеп кенә беләбеҙ. Уны тотоп, әйбер кеүек тойоп булмай, әммә аныҡ һүҙҙең йоғонтоһо теләһә ниндәй матдәнең тығыҙлығына ҡарағанда ла ҡеүәтлерәк көскә эйә. Юҡҡа ғына "Иң тәүҙә һүҙ булған" тип әйтмәйҙәр. Һүҙ менән кешенең тормошон балҡытып, шулай уҡ уны үлтереп тә була. Әгәр ҙә һинең хаҡта яҡшы хәбәр таралһа, яҡшы атҡа атланаһың икән. Таралған һүҙ кешеләр араһында әйләнеп йөрөй-йөрөй ҙә, үҙ эшен барыбер эшләй. Был һүҙҙәрҙең асылына тоғро ҡалһаң, улар һинә ғүмереҥ буйы, хатта донъялыҡтан киткәс тә хеҙмәт итә. Һүҙ - иң аныҡ предмет, төшөнсә. Һүҙ - бумеранг, яҡшы ниәт менән осорһаң, һинә изгелек булып әйләнеп ҡайта.

Һөҙөмтәлә һинең үҙ-үҙеңә ышанысың арта, ихтыярың ныҒый. Ә инде абруйлы кешеләргә килгәндә, һин уларға эсеүеңде ташлауың тураһында һүҙ еткерһәң, үҙеңдән-үҙең ошо һүҙең өсөн яуаплылыҡ тоя башлайһың. Был ябай ғына яуаплылыҡ тойғоһо түгел. Үҙ тәүбәңдән тайпылып ҡара - Аллаһы Тәғәлә алдында гонаһҡа батаһың. Үҙ һүҙеңдә тормай ҡара, киренән эсә башлаһаң, оятҡа ҡалаһың бит. Улай ғына ла түгел, шул абруйлы кешеләр алдында, уларҙың ҡарашында юҡҡа сығаһың. Был - рухи яуаплылыҡ, сөнки исемдәре билдәле шәхестәр был абруйҙы халыҡҡа хеҙмәт итеп яулаған. Улар ҡайҙа ғына булһа ла, бигерәк тә ситкә сыҡҡанда, тотош халыҡ исеменән сығыш яһай. Тимәк, улар алдында һүҙ биреү халҡың алдындағы антҡа ла тиң.

Уларға нисек итеп әйтергәме? Яндарына килергә лә: "Ағай, апай, мин теге "йәшел йылан"дың муйынын быуып ырғыттым, һеҙ минә ышанһағыҙ, ҡабат ауыҙыма ла алмаясаҡмын!" - тип кенә өндәшергә. Мин бик күптәрҙең янына барҙым һәм шулай тип әйттем, үҙемә рухи яуаплылыҡ, уларҙың ышанысы аша ихтыяр көсө алдым.

Тормош бит кешене төрлө хәлгә ҡуя, беҙ хатта бер-ике сәғәттән һуң, иртәгә нимә булырын да белмәйбеҙ. Әле генә шатланабыҙ, бәхетле тойғолар кисерәбеҙ, күп тә тормай, ҡайғырабыҙ, күңел төшөнкөлөгөнә биреләбеҙ. Әйләнәбеҙҙәге башҡа ваҡтөйәк алдатҡыстар, ымһындырғыстар бер шешә һалҡын һыра, йәки йөҙ грамм шарап эсергә тамшандырып ҡына тора. "Бер шешә һыра, йәки йөҙ грамм шарап эс тә ҡуй, артығы кәрәкмәй" тигән аңлауҙар ҙа башҡа килеп ҡуя. Бына шул саҡта инде теге абруйлы кеше иҫкә килеп төшә. Үҙеңдә алдарһың да, уның алдында нимә тип яуап бирерһең. Күптәр тап ошондай мәлдәрҙә алдана ла инде. "Йөҙ грамм эскәндән ни булған?" тип, эсеп ҡуя ла, шундай уҡ хәл киренән ҡабатланһа, шул уҡ һүҙҙәрҙе тағы ла ҡабатлап, тағы ла түңкәреп ҡуя. Ә бит халыҡта "Тамсы ташты тишә" тигән бик тапҡыр бер әйтем бар. Көн һайын иллешәр-йөҙәр грамлап ҡына ҡабул ителгән шарапҡа өйрәнеү ай аҙағында ярты давайлай башлай. Тамсы эсте тишмәһә лә, ихтыярыңды бешә, телеңде сисә. Хәйер, "Тамсынан күл йыйыла" тип тә әйтәләр бит.

"Эсә белеп эсеү" тигән төшөнсәне хәҙер йыш ҡулланалар. Был осраҡта күберәк басымды "эсә белеп" тигәненә яһайҙар. Ә бит был һүҙбәйләнештең "эсеү" тигән төп өлөшө лә бар. Эсә белеп эскәндәр өсөн дә барыбер "Тамсы ташты тишә" һәм "Тамсынан күл йыйыла" бит. Был һүҙҙәрҙе мин уйлап сығарманым. Улар халыҡтың меңәр йыллыҡ тормош тәжрибәһенән, аҡылынан һәм зиһененән тупланған һығымта, һөҙөнтө һәм сырымта. Эсә белеп эсеүселәр төркөмөнә ҡараусылар үҙҙәренең шарап алдында көсһеҙлеген йәшерер өсөн ошо һүҙҙе ҡуллана, йәмғәтселек алдында "ала ҡарға" булып күренергә тырыша. Эсеү - беҙҙең халыҡҡа, тәбиғәтебеҙгә һәм булмышыбыҙға бөтөнләй ят күренеш. Уны аҡлау һәм яҡлау өсөн һүҙҙәр юҡ беҙҙең ләғәттә. Күптәр йөҙ грамды ҡабул иткәндә аш һеңдереү, ҡан тамырын киңәйтеү, стресты бөтөрөү өсөн тип һылтана. Ошо өс маҡсат өсөн шараптан тыш әллә күпме башҡа ысул бар. Был хаҡта алдараҡ һөйләшербеҙ.

Нисек кенә булмаһын, халҡыбыҙ араһында ҙур абруй яулаған шәхестәр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, минең был сирҙән ҡотолоуымда ныҡ ярҙам итте. Әйтергә кәрәк, үҙҙәренең донъяла булыуҙары, абруй яулауҙары менән. Шәхестең халыҡ һәм йәмғиәт алдында яуаплылығы тураһында күп һөйләйҙәр, әммә киреһенсә булған осраҡ өсөн аңлатма юҡ. Минең уйымса, йәмғиәттең һәм халыҡ вәкилдәренең шәхес алдындағы яуаплылығы тураһында ла асыҡтан-асыҡ һөйләшер мәл килеп етте. Сөнки талаптар ике яҡҡа ла ҡуйылырға тейеш. Бигерәк тә йәмғиәтебеҙҙе "йәшел йылан" быуып алған саҡта. Уларҙың башҡалар өсөн йәндәрен фиҙа ҡылып йәшәүҙәре минең тормошомдо ҡырҡа үҙгәртергә ярҙам иткән икән, мин уларҙы ысын мәғәнәһендәге шәхес, инсан тип атайым. Рәхмәт уларға!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН АҠЫЛЫ*

## РӘХИМ ИТ, АТАҠАЙЫМ!

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәхәбәләре араһында, уның бер сөхбәтләрен дә ҡалдырмай, гел янында йөрөгән бер сәхәбәһе булған. Ул Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡайҙа барһа ла уға эйәргән һәм алдына бәләкәй сабыйын ултыртып, уның телмәрҙәрен тыңлаған.

Тик бер көндә сәхәбәнең малайы үлеп ҡалған. Оло ҡайғыға ҡалған ата кеше, үҙенең уңалып бөтмәгән күңел яраһы менән башҡаларҙың тынысльғын боҙоуҙан һаҡланып, бер нисә көн Мөхәммәт бәйғәмбәр янына килмәгән. Мөхәммәт ғәләйһис сәләм был кешенең юҡлығын һиҙеп ҡалған һәм уның тураһында һорашҡан. Һәм сәхәбәнең яратҡан малайы үлеп ҡалғаны тураһында белгән. Шунан Мөхәммәт бәйғәмбәр уның ҡайғыһы тураһында сәхәбәнең үҙ ауыҙынан ишетер өсөн уны эҙләп киткән. Сәхәбәнең ысынлап та малайын юғалтҡанын белгәс, ҡайғыһын уртаҡлашҡан һәм уның күңелен ошо һүҙҙәр менән йыуатҡан: "Әйт әле миңә, һин баландың ерҙәге тормошонда гел һинең менән бергә булыуыңмы, әллә иртәгә, һин ожмахтың үҙең теләгән ишегенә барған саҡта уның йүгереп килеп: "Рәхим ит, атаҡайым!" - тигән һүҙҙәр менән ишек асыуын теләр инеңме?"

Шул ваҡыт сәхәбәнең иңенән тау төшкәндәй була. "Эй, Аллаһтың илсеһе! Әлбиттә, мин улымдың минә ожмахтың ишектәрен асыуын теләйем", - тип яуап биргән ул. Бәйғәмбәр ғәләйһис сәләм: "Һин нисек теләйһең - шулай булыр", - тип әйткән.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Рәхмәтле була бел

Дүрт йәшлек малайҙың тыуған көнөн билдәләгәндәр. Бөтә булмә төрлө бүләктәр һәм төргәктәр менән тулған. Әсәй кешенең улына: "Ҡәҙерлем, һин хәҙер нимә тип әйтергә тейешһең инде?" - тип һорағас, малай: "Ә башҡа бүләктәр ҡайҙа?", - тип яуап биргән.

Был дүрт йәшлек бала өсөн ғәҙәти хәл, әммә күптәребеҙ һаман да эстән генә: "Ысынлап та мин барыһын да алып бөттөммө икән?" - тигән ошоға оҡшаш һорау бирә. Һәр ваҡыт кеше ҙурыраҡ, яҡшыраҡ, замансараҡ, тиҙерәк, эҫерәк йәки һыуығыраҡ, күләме буйынса ҙурыраҡ, сағыуыраҡ әйберҙе көтә шул.

Беҙ йә алдыбыҙҙа торған ике юлдың береһен һайлап, барына шөкөр ҡылып, рәхмәтле була алабыҙ, йә үҙебеҙҙә булмаған әйбер тураһында уйланып, үҙебеҙҙе лә, бүтәндәрҙе лә бәхетһеҙ итә алабыҙ. Беҙ шул тиклем ни теләйбеҙ һуң? Бер нәмәгә ҡарамай тырышып тултырырға теләгән бушлыҡта нимә йәшеренгән? Эске асығыуыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн нимәлер эҙләйбеҙ? Ниндәйҙер юғарылыҡҡа эйә булыу теләгене ҡәнәғәтләндереү өсөн билдәлелек һәм дан тураһында хыялланабыҙ. Беҙ, йәнәһе лә, теләгән һәр әйберебеҙҙе алыу мөмкинлеген биргән күп аҡсаға өмөтләнәбеҙ. Беҙ үҙебеҙҙең уңышлыҙлыҡтарыбыҙҙы һәм мохтажлығыбыҙҙы аңлауҙан арынып, тойғоларыбыҙҙы үҙгәртеү мөмкинлегенә эйә булыр өсөн накотиктарға ҡул һонабыҙ. Беҙ быларҙың барыһын да, үҙенде бәхетле һәм ҡәнәғәт итеп тойор өсөн күп тейешле әйберҙәргә эйә түгелбеҙ, тип иҫәпләгән өсөн эшләйбеҙ.

Беҙ үҙебеҙгә: "Минә аҡса күберәк түләһәләр, мин яҡшыраҡ эшләйәсәкмен", - тибеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, яҡшы итеп эшләү үҙенән-үҙе ҙур бүләк һәм ҙур шатлыҡ килтерә. Кешеләргә хеҙмәт итеүеңде һәм эшеңде яҡшы итеп башҡарыуыңды аңлауҙан да юғарыраҡ бүләк юҡ.

Беҙ үҙебеҙгә: "Әгәр ҙә мин билдәлелек яулаһам, барыһы ла мине яратасаҡ", - тибеҙ. Әммә ысынында билдәлелек ысын һөйөү килтермәй. Һәр кемебеҙҙе ниндәй бар, шундай итеп яраталар, һәм Ер шарындағы һәр кеше яратыуға лайыҡлы. Һөйөүҙең һәм уратып алған кешеләрҙең мөхәббәтен йәлеп итә белеүҙең мәғәнәһе уның бер ниндәй шарттарһыҙ килеүенән ғибәрәт. Беҙҙе яратыуҙарын беләбеҙ икән, беҙ хатта яңғыҙыбыҙ ҡалғанда ла үҙебеҙҙе яңғыҙ итеп тоймайбыҙ.

Үҙ баһаңды аңлау - ваҡытлыса килгән уңышһыҙлыҡтарға ҡаршы тороусы иң яҡшы һаҡлау сараһы булып тора. Әгәр беҙ кем булыуыбыҙға һәм нимәгә эйә булыуыбыҙға рәхмәт тойғоһо кисерәбеҙ икән, был беҙҙең йөҙөбөҙҙә йылмайыу уята һәм тормоштоң барлыҡ ҡиммәттәрен беҙгә табан тартып килтерә.

Борсолоу һәм ҡайғырыу йөҙҙә йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеүенә һәм бөтә тән буйлап ҡан йөрөшө кәмеүенә сәбәпсе булып тора. Тәндәге көсөргәнеш баш ауыртыу, артрит, йөрәк өйәнәге, ашҡаҙан боҙолоуы, хатта рак кеүек төрлө сирҙәрҙе ҡуҙғытыусы фактор булып тора ала. Һин быны тикшереү өсөн ҡыҫҡа ғына эксперимент эшләп ҡарай алаһын: борсолғанда йәки асыуланғандағы кеүек ҡашыңды төй һәм иренеңде ҡымты. Был ваҡытта тәнеңдең айырым өлөштәре менән нимә булыуына иғтибар ит. Ә хәҙер бит мускулдарын тынысландыр һәм тәрән итеп тын ал. Ниндәйҙер күңелле әйбер тураһында уйла, йәки булдыра алһаң, бер нимә тураһында ла уйлама. Был ваҡытта тән өлөштәрендең нимә тойоу айырмаһын күрҙеңме инде?

"Мин күберәкте теләйем!" тип әйтеү урынына, "Ҙур рәхмәт!" тип әйтеп ҡара. Тап ошо һүҙҙәр һинең кәйефеңде яҡшыртмаҫмы икән? Был һин һәр ваҡыт кисерергә теләгән тойғо түгелме ни? Рәхмәт әйтеү һинең көндәлек маҡсатыңа әүерелһен.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АҪАБА ХАЛЫҠТАР КӨНӨНӘ ҠАРАТА



**Горизонталь буйынса:** **7.** 22 августан 22 сентябргә тиклемге осор. **8.** Ҡатын-ҡыҙҙың еләненең елкәһенә ҡуйылған уҡа суҡ. **11.** "Үгеҙ ат булмаҫ, һыйыр дөйә булмаҫ, // Күпме ҡымыҙ бирһә лә, кәзә (...) булмаҫ, // Улары ла булып торһа, заман яман булмаҫ". **12.** Емеш ағастарын ашай торған аҡ ҡанатлы, ҡорһаҡ осо алтын һарылы төнгө аҡ күбәләк төрө. **13.** Уҡалы, тәңкәле, яҡшы буҫтауҙан тегелгән яғаһыҙ өҫ кейеме. "Егет елле лә, (...)е ҡыҫҡараҡ". **16.** Йәш бәрәс тиреһе. **17.** Нәҫел-ырыу тарихы, шәжәрә. **18.** Йәйә һалып, табала бешереп алынған икмәк; көлсә. **21.** Инәһен имеп йөрөгән башмаҡтың сәнскәкле морондоғо. "Бер ҡараһаң - (...), икенсе ҡараһаң - төлкө". **22.** Һыбай йөрөгәндә аттың ҡабырғаһына төртөп ҡыуыр өсөн итек үксәһенә ҡуйылған тимер. **24.** Малдың үпкә-бауырынан бешерелгән бәлеш. **25.** Мосолман ирҙәренең баш урамаһы. "Наҙан мулланың (...)һе ҙур булыр". **29.** Ҡайыш сбруйҙы биҙәр өсөн ҡуйылған йомро-йомро көмөш ҡалай. **30.** Ожмахтан ҡыуылған фәрештә. Шунан бирле ул бысраҡ урындарҙа, мунсала, зыяраттарҙа, баҙарҙарҙа йәшәй икән. Ҡыуылыуына үс итеп, Әҙәм балаларын юлдан, имандан яҙҙыра, гонаһтарға этәй. **31.** Сихырға һәләтле яман мифик зат. Улар ғаилә ҡороп, ырыу менән йәшәйҙәр. Балалары йәмһеҙ булғанға күрә, уны кеше балаһына алмаштырыу осраҡтары ла бар. **34.** "(...)гә төшкән ашамлыҡты ашарға ярамай, кешегә зәхмәт ҡағыла. Ризыҡты йыйып алалар. **35.** Эйәр өҫтөнә һала торған күн тышлы кейеҙ. **36.** "(...) малы ваҡытһыҙ көтөүҙән йүгереп ҡайтһа һәм ышыҡҡа ҡаса һалһа, тиҙҙән ямғыр буласаҡ". **39.** Ҡашмауҙың ике яғынан төшөп торған сулпылы, мәрйенле суҡтар. **40.** Өс рәт итеп теҙелгән шау көмөш тәңкәнән торған, күкрәккә ҡыйыҡса итеп кейелә торған биҙәү әйбере.

**Вертикаль буйынса:** **1.** Малдың бөйөрө янындағы ҡыҫҡа ҡабырғаһының ите (иң һәйбәт ит тип еңеүсегә бүләк бирелә). **2.** "Ишәккә алтын (...) һалһаң да һаман ишәк". **3.** Иләргә тетелгән йөн, мамыҡ йәки сүбәк йомарламы. **4.** Оҙонса сөм һауыт. **5.** Туҫтаҡтан ҙурыраҡ йәйенке һауыт. **6.** Эре һалма өҫтөнә туралған ит һалып, тоҙлоҡ ҡойоп әҙерләнгән аш. **9.** "Атай - кешән менән (...), инәй - йөрәк менән үҙәк". **10.** Үлем фәрештәһе. Ышаныуҙар буйынса, ул ҙур кәүҙәле, оҙон аяҡлы күҙгә күренмәгән зат. Уның 4 йөҙө, 4 мең ҡанаты бар. Уларҙың һаны ер йөҙөндә йәшәгән кешеләр һанына тиң икән. **14.** Йылтыр аҡһыл төҫтәге шыйыҡ металл. **15.** Йәш баланы һалыр өсөн элеп ҡуймалы итеп яһалған ҡулайлама; бишек. **19.** Матурлап, биҙәп эшләнгән ат ябыуы. **20.** "Эттең тынынан, (...)ҙең йөнөнән һаҡлан". **23.** Ғәрәп йондоҙнамәһендәге Ҡыҙ. **26.** Сөсө ҡамыр эсенә аҫтан ҡыҙыл эремсек, артабан дөгө ярмаһы, ит, кишер һ.б. ҡатлам һалып бешерелгән бәлеш төрө. **27.** Ҡыҙҙың артынан килгән мал-мөлкәт. (...) биргән - бикә килен". **28.** Күлдәктең ең осондағы тар өлөшө, йәки ҡатын-ҡыҙҙың ҡул биҙәүесе. **32.** Йәһәннәм. "Үгәй инәнең яҡшыһы - (...) утының саҡҡыһы". **33.** Башҡорт ышаныуҙарында эпилепсия ауырыуының эйәһе. Ул тотҡанда кеше тыны быуылып, ҡапыл ҡолап китә. Уның ауыҙ-мороноnan күбек килә. Ул тартыша, тыпырсына башлай. **37.** Ышаныуҙар буйынса, эткә, ҡоҙғонға, сиңерткәгә, күгәүенгә һ.б. төрлө ҡиәфәткә инә алған яман зат. Уның ҡамыты була икән. Ошо ҡамыт кеше муйынына тағылһа, кеше уға тарый, тиҙәр. "Айға ҡарап аҡырма, илгә (...) саҡырма. **38.** Бер айғыр йөрөткән көтөү. "Ҡайтып килеп (...)өн тапһа, аҙашҡан малда ғәйеп юҡ".

**30-сы һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Совнархоз. Журналистика. Ранжир. Лиана. Бүрек. Ондатра. Турне. Букинист. Нетто. Бутерброд. Рюмка. Материал. Мим. Арат. Икс. Интеграл. Шампиньон. Елкән. Интервью. Кишер. Дәрт. Бағана. Ризалыҡ. Геолог. Тартҡы. Алдаҡсы. Факт. Авангард. Строй. Амфора. Абажур. Ракета. Слет.

**Вертикаль буйынса:** Марси. Оптимизм. Шиғыр. Спикер. Амбра. Дары. Руль. Жюри. Бандит. Нонет. Амфитеатр. Сенаж. Ҡытай. Ректор. Наил (Ғәйетбай). Арпа. Литр. Агроном. Фарс. Хризантема. Огра. Альбом. Иваси. Диабет. Навага. Томат. Икенде. Евклид. Гусар. Игәр. Ваҡлыҡ. Люблин. Юрматы.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҺИМЕҘЛЕК...
## сирҙән араламай

**Табиптар күптән инде ҡатын-ҡыҙ тәнендәге май үреү урындары уның һаулығы менән бәйле булыуына иғтибар иткән. Мәҫәлән, кәүҙәһенең өҫкө һәм урта өлөшө тиҙ һимергән ҡатын-ҡыҙға йөрәк, диабет, яман шеш ауырыуының ҡайһы бер төрө менән сирләү ҡурҡыныcы янай. Артыҡ ауырлыҡ уларҙың арҡа, түш, бил һәм ҡул өлкәләренә ултыра. Ҡайһы бер хужабикәләр янбаш һәм оса өлөшөнә үргән майҙан ыҙа сигә. Һаулыҡҡа уның зыяны булмаһа ла, үҙ етешһеҙлеге бар. Был өлөштәге артыҡ май физик күнекмәләр йоғонтоһона ауыр бирелә.**

Ҡатын-ҡыҙ тәнендә май үреү урыны төрлө булыуын аңлатыусы бер нисә теория бар. Беренсеһе гормондар менән бәйле. Ғалимдар ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙа ир-егеттәргә хас гормондар күберәк булыуын асыҡлаған. Шулай уҡ был гүзәл заттарҙа ҡатын-ҡыҙ өсөн генә хас эстроген гормоны күп бүленеүен дә билдәләгән. Ул үҙ сиратында олоғая барыусыларға яман шеш ауырыуы менән янай.

Икенсе тикшереү һимереү барышына альфа-2 һәм бета-1 исемле күҙәнәк рецепторҙары мөһим роль уйнауын билдәләй. Мәҫәлән, үҫеү гормоны бета-1 рецепторы аша май күҙәнәге эсендәге ферментҡа тәьҫир итеп, артыҡ майҙы яндыра. Ә бына инсулин, киреһенсә, альфа-2 рецепторын әүҙемләштереп, май яндырыу процесын тотҡарлай.

Тағы ла бер теория буйынса, гендар һимереүгә булышлыҡ итә. Шулай уҡ туҡланыу рәүеше лә билдәле урын биләй. Диетаға бер ултырып, бер ташлаған ҡатын-ҡыҙҙың биле бындай тикшереү менән булмағандарҙыҡына ҡарағанда яҫыраҡ була икән.

Кәүҙәнең өҫкө өлөшөндәге һимеҙлек, алда әйтелгәнсә, төрлө ауырыуҙарға сәбәпсе була ала. Мәҫәлән, ҡандағы шәкәр кимәле лә уның менән бәйле. Һәр күҙәнәккә, хатта май күҙәнәгенә лә глюкоза кәрәк. Ләкин "тулған" май күҙәнәктәре уны һеңдереү һәләтен юғалта. Һөҙөмтәлә ҡан составындағы глюкоза кәмемәй, ҡан сироп кеүек ҡуйыра. Һәм организм ашҡаҙан аҫты биҙенән глюкозаны тән күҙәнәктәренә һеңдереүгә яуап биргән инсулин гормонын күберәк бүлеүҙе талап итә башлай. Ҡан составында инсулин кимәле арта, ә был диабет барлыҡҡа килеүгә ҙур этәргес. Шулай уҡ артериаль ҡан баҫымы ла күтәрелеүе бар. Сөнки инсулиндың саманан тыш күп булыуы бөйөрҙөң күпләп натрий һеңдереүенә килтерә.

Аналыҡтағы яман шеш ауырыуы менән кәүҙәнең өҫкө өлөшөнә артыҡ май бөрөүе араһында асыҡ бәйләнеш күҙәтелә. Америкалағы яман шеш ауырыуын дауалау үҙәгенең береһендә "аналыҡтағы яман шеш" диагнозы ҡуйылған бер нисә пациенттың тире аҫты май ҡатлауын үлсәп тикшергәндәр. Һөҙөмтәлә күбеһенең билендә һәм унан өҫтә ҡалын май ҡатламы булыуы билдәләнгән. Айырып ҡына май яман шеш ауырыуын тыуҙыра, тип әйтеүе ауыр, ләкин табиптар унан һаҡланырға тәҡдим итә.

Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары барлыҡҡа килһен өсөн кәүҙәнең өҫкө өлөшөнөң һимеҙ булыуы иң уңайлы сәбәп. Түш, арҡа, ҡулдарҙа артыҡ май ҡатламдары булыуы ҡанда холестерин күбәйеүенә һәм ҡан баҫымының күтәрелеүенә килтерә. Былар бөтәһе лә йөрәк өсөн зарарлы.

Күнекмәләр ярҙам итәме? Эйе. Сөнки спорт барыһын да үҙгәртә: гормон секрецияһын да, йөрәк һәм үпкәләр эшмәкәрлеген дә, аш һеңдереү процесын да һ.б. Күнекмәләр - организм өсөн стресс. Һәм ул "стресс" гормоны - адреналин бүленеүе менән оҙатыла. Ә был гормон май күҙәнәген тарҡата һәм ул ҡанға ҡушыла. Үҙ сиратында был май кислотаһы организмда өҫтәмә энергия сығанағы сифатында ҡулланыла. Һөҙөмтәлә, ни тиклем күберәк күнекмәләр эшләһәң, шул тиклем тиҙерәк ябығаһың. Билдән түбән урынлашҡан май ҡатламы, табиптар әйтеүенсә, үтә зарарлы түгел. Әммә был, артыҡ һимеҙлек һаулыҡҡа зыян килтерә, тигән хәҡиҡәтте юҡҡа сығармай.

Күптән түгел уҙғарылған тикшереүҙе медиктар үҙҙәре өҫтөндә эшләгән. 1976 йылдан алып 115 000 меңдән ашыу шәфҡәт туташы тикшерелгән һәм еңелсә тулылыҡ та һаулыҡ өсөн ҙур зыян сығанағы булыуы иҫбатланған. Һөҙөмтәлә, урта йәштәге ҡатындар буйына ярашлы билдәләнгән ауырлыҡ кимәленән 15 процентҡа кәм тартһа, инфаркттан үлеү ҡурҡынысы түбәнәйә. Шул уҡ ваҡытта үтә ныҡ ябығыу ҙа барлыҡ ауырыуҙарҙан һаҡланып ҡалыуҙы аңлатмай, ти ғалимдар.

**Шулай итеп...**

**Ни тиһәң дә, спорт менән шөғөлләнеү - иң дөрөҫ ҡарар. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тип юҡҡа ғына әйтелмәй. Ни тиклем күберәк хәрәкәт итһәң, шул тиклем адреналин бүленә, һин ябығаһың һәм бихисап ауырыуҙарҙан үҙеңде һаҡлап ҡалаһың.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

✓ *Тотош халыҡтың ҡурҡаҡлығы - уның өсөн ҡоллоҡ бығауҙары сүкеү мөмкинлегенең иң төп шарты.*

*(Ж. Марат).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КИНЙӘ ҺЫНЫНДА...

## аҡыл эйәһе сағыла

**Үткән йомала Ҡунаҡһарайҙың Картина галереяһында башҡорт халҡының милли геройы Кинйә абыҙ Арыҫлановтың киндерҙә эшләнгән портреты тамамланыуға арналған "Бер картина күргәҙмәһе" асылды.**

- Беҙ бала саҡтан Кинйә абыҙ ҡартатайыбыҙ булыуын белеп үҫтек, ә һүрәтен күргәнебеҙ булманы. Эстән генә ул, моғайын да, киң күкрәкле, ҙур, мөһабәт кәүҙәле булғандыр, тип уйлана инем. Бигерәк тә йөҙөн күреү теләге көслө булды. Шуға ла беҙҙең өсөн ҡәҙерле кешебеҙҙең образын киндер картинала һынландырыу теләге йылдар буйы күңелгә тынғы бирмәй йәшәп килде, - тип һүҙен башланы Кинйә Арыҫланов исемендәге Хәйриә фондының вице-президенты, "Портрет" ижади проектының һәм күргәҙмәһенең бағыусыһы Салауат Юлбарыҫов.

Кинйә абыҙҙың тыуыуына 285 йыл тулыуын уҙғарған йылда Салауат ағай был изге хыялын тормошҡа ашырыу ниәте менән Күмертау рәссамы Флүр Исмәғилевҡа мөрәжәғәт итә. Мишәр Фельдери (был уның ижади ҡушаматы) менән улар ун йылдан ашыу хеҙмәттәшлек итә. Кинйәбыҙ ауылы музейында был ауылдан сыҡҡан утыҙлаған шәхестең ул төшөргән портреты урын алған. Шулай итеп, Салауат ағай менән рәссам ҙур һәм яуаплы ижади эшкә тотона.

- Мин Кинйә Арыҫлановты тарихи шәхес булараҡ Ғәли Ибраһимовтың "Кинйә" романы буйынса уҡып белдем. Күп ваҡыттар үткәс, яҙмыш минә тағы ла был бөйөк шәхес менән яҡындан танышырға насип итте, - тип һөйләп китте Флүр Исмәғилев. - Мин тәүҙә был заказды ғәҙәттәгесә итеп ҡабул итһәм дә, тора-бара уның үтә лә яуаплы булыуын аңланым һәм был ижади эшкә етди тотондом. Батырҙың тышҡы йөҙөн өйрәнеү өсөн ағалы ҡустылы Салауат һәм Марс Юлбарыҫовтар, Самат Күҙәшевтар менән бергә Көйөргәҙе районы Кинйәабыҙ ауылына барҙым, урындағы халыҡ менән таныштым. Уның нәҫеләнән иҫәпләнгән баһадир кәүҙәле, ҡыйыу ҡарашлы, көслө рухлы кешеләр араһынан уның һыҙаттарын эҙләнем. Был, әлбиттә, художестволы образ, шуға күрә лә күберәк күҙаллауҙарға таянырға тура килә. Бөгөн беҙ күберәк Салауат Юлаев тураһында ишетәбеҙ, уның тураһында һөйләйбеҙ. Ә бына Кинйә Арыҫлановтың ниндәй шәхес булыуын аҙ беләбеҙ. Тап шуға ла уның характер һыҙаттарына килгәндә, шулай тип әйтергә кәрәк: әгәр Салауат Юлаев яугир булһа, Кинйә Арыҫланов - аҡыл эйәһе, башҡорт халҡының рухи остазы, юлбашсыһы булған. Уның был сифатын мин күҙ ҡарашы аша сағылдырырға тырыштым. Әллә яуҙа, әллә старшина хеҙмәтенән ҡара янған йөҙ. Йыйырсыҡтар, сал һаҡал, ҡымтылған ирендәр ҙә уның тәрән аҡыллы, ҡыйыу йөрәкле, киң күңелле кеше булыуы хаҡында һөйләй. Ә батыр бөйөклөгө уның кәүҙәһен тура тотоуында, эйәген юғары күтәреп, донъяға киң ҡараш ташлауында күренәләр. Дөйөм алғанда, башҡорт халҡының бөтә яҡшы сифаттарын ул үҙенә туплағандыр... Бындай бөйөк батыр образын һынландырырға бер рәссам да битараф ҡала алмайҙыр. Мин дә тарихта лайыҡлыҙ рәүештә онотолоп барған Кинйә Арыҫлановтың портре-



ты өҫтөндә эшләгәндә сикһеҙ тулҡындарғыс хистәр кисерҙем, ул минең донъяға ҡарашымды үҙгәртте, күңелемде рухи яҡтан байытты, сафландырҙы, көсәйтте.

Бына шулай тыуа башҡорт халҡының милли геройы, Рәсәйҙәге 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе, XVIII быуаттың өсөнсө сирегендә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуының башлығы, Көйөргәҙе районы Кинйәабыҙ ауылына нигеҙ һалыусы Кинйә Арыҫлановтың тарихтағы тәүге портреты.

- Беҙҙең Юлбарыҫтар тамырында Арыҫландар ҡаны ағыуын аңлау күңелде йылыта. Тап ошо эске аңтойто беҙгә Кинйә абыҙ Арыҫлановты беҙ күҙаллағанса һәм рәссам һынландырғанса нисек бар, шулай: уның ырыуҙаштары кеүекябай һәм киң күңелле, шул уҡ ваҡытта ғорур дәрәжә тойғоһо менән тулы шәхес итеп күрергә ярҙам итте. Был беҙҙең Кинйә! Хәҙер ул 1774 йылдың 9 сентябрендә хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә тормаясаҡ. Беҙҙең Кинйә яңынан халҡына ҡайтты! - тип юғары нотала һүҙен тамамланы Салауат ағай Юлбарыҫов.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАЛЫҠ ҠУРҠА ИКӘН...

## үҙенә ҡоллоҡ бығауҙары сүкей

Ҡоллоҡ кешене шул тиклем дәрәжәлә кәмһетә, күңеленә ҡоллоҡ инеп урынлашҡан кеше тора-бара хатта үҙенең бығауҙарын ярата башлай.

**(Л. Вовенарг).**

Иң ҡурҡыныс - бәләкәй кешенең оло власы.

**(И. Шевелев).**

Тотош халыҡтың ҡурҡаҡлығы - уның өсөн ҡоллоҡ бығауҙары сүкеү мөмкинлегенең иң төп шарты.

**(Ж. Марат).**

Кем күпте теләй, ул үҙ ғүмерен көтөүҙәр менән үткәрә; ә кемдең теләктәре юҡ, ул бары тик үлем көтә.

**(П. Буаст).**

Үҙ милкең менән иртәгә донъя ҡуйырға әҙерләнгән кеше кеүек файҙалан, үҙ байлығыңды оҙаҡ йәшәргә йыйынған кеше һымаҡ һаҡла. Ошоларҙы иҫеңдә тотоп, һаранлыҡ менән йомартлыҡ араһындағы урталыҡта ҡала белгән кеше - иң аҡыллыһы.

**(Лукиан).**

Кем байлығы булып та, уны башҡалар менән дә бүлешмәй, үҙе өсөн дә тотонмай, ул, баҫыуҙа сит кешенең игенен һаҡлаған һалам ҡараҫҡы кеүек, бер нимәгә лә эйә түгел.

**(Һинд мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡыусы уҡытыусыһына йүгереп килеп инә лә:**

**- Уҡытыусым, сит илдәге сауҙа буйынса бер консультант аҙна һайын гәзиттә рубрика алып бара һәм һинең фекерҙәреңде урлай! - ти.**

**- Әйт әле, ә ул минең фекерҙәрҙе ныҡ боҙамы?**

**- Юҡ. Шул илдә йәшәгән дуҫым миңә мәҡәләләрҙе тотош уҡып сыҡты. Әйтерһең дә, һин яҙған кеүек, тик ул кеше һеҙҙең фекерҙәрҙе үҙ исеме аҫтында сығара! Улай бит ярамай! Нимә эшләргә уйлайһың, уҡытыусым?**

**- Ә ни өсөн мин нимәләр эшләргә тейеш?**

**- Был кеше бит һинең фекерҙәреңде урлай. Белдекһеҙ булһа ла, үҙен аҡыллы итеп күрһәтә, һинең аҡылыңды файҙалана!**

**- Ләкин минең аҡылым бит кәмемәй, әллә мине ахмаҡлана бара, тиһеңме? - тип көлә уҡыусыһынан уҡытыусы".**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

### Эх-ма, война началась

Ауылда бәләкәй генә буйлы, һәр саҡ йүгереп йөрөгән, эшкә унған Сәйет ағай булды. Тик өйөндә бола сығарыуҙы, ҡанғырыуҙы, ҡатыны менән ирешеп-һуғышыуҙы өҫтөн ҡуйҙы. Уның был ҡылығына балалары ла өйрәнеп бөткән, ҡурҡмайҙар ҙа. Ата-әсәһе тас та тос һуғыша башлаһа, 8 йәшлек улдары Тимерғәли урындыҡ буйлап көлә-көлә йүгерә һәм үҙе: "Эх-ма, война началась, давай, атай, давай, әсәй", - тип һамаҡлай. Әле лә ауылда берәй ғаилә ҡаңғырһа, "Эх-ма, война началась", тип көләләр.

Күп ҡабатланған хәлдән баласаға ла ҡурҡмай икән.

### Уҡымаһаң да кәләш алып буламы?

Йәмил беренсе синыфҡа уҡырға төштө. Мәктәп бер комбайнсының өйөнә ҡаршы ғына. Малай көн дә быларға инә, сумкаһын урындыҡ аҫтына бәреп ебәрә лә, комбайн "ремонтлаша" башлай. Берике көн шулай үткәс, малай: "Олатай, уҡымаһаң да кәләш алып буламы ул?"- тип һорай. Олатаһы уға: "Булмай, наҙан егеткә ҡыҙҙар килмәй, анра нарыҡ тип атайҙар. Уҡыһаң, иң шәп ҡыҙҙы алаһың", - тип аңлата. Малай уйға ҡала. Иртәгеһенә уҡытыусыһы ла артынан төшә һәм малайыбыҙ уҡыуға йөрөй башлай. Юғары уҡыу йортон да тамамланы, кәләш тә алды, ҡыҙ үҫтерәләр.

Олатаһының етди аңлатыуы уға тәьҫир иткәндер, әлбиттә. Бала-сағаны алдамай, дөрөҫ һүҙ генә һөйләргә кәрәк икәненә бер дәлил был.

### Наши ваших бьют!

Әбйәлил районында һуғыштан алда уҡ килеп төпләнгән немецтар йәшәй. Уларҙың тоҡом-заты Германияны күргәне лә юҡ. Телевизорҙан һуғыш тураһында кино бара, совет һалдаттары немецтарҙы ҡыра. Шул саҡ Исаак ағайҙың 6 йәшлек кенә улы: "Кара, кара, наши ваших бьют!" - тип һөрән һала. Атаһы немец, үҙе урыҫ, йәнәһе. Бала башы күп нәмәне аңлап етмәй шул.

### Карта янында

География дәресе бара, карта менән эшләйәҙр. Уҡытыусы Хәлитте картаға сығара һәм дүрт яҡты күрһәтә. Малай бер аҙ уйлап тора ла: "Аҫ яҡ, өҫ яҡ, уң яҡ, һул яҡ", - тип, һанап сыға. "Төньяҡ ҡайҙа һуң?" тигән һорауға ла "Өҫ яҡ", тип яуаплай. Был хәлде әле лә һөйләйҙәр, үҙен "аҫ яҡ-өҫ яҡ" тип йөрөтәләр. Өндәшмәй торғанса, нимә булһа ла һөйләүең артыҡ икәнен малай яҡшы аңлаған.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5569
Заказ 3354